ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

8-14 апрель (алағарай) 2023

№ 13 (1055)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Тыуған ауылында...**

үҙ йортоң булһын!



8-9

**Көнөлдән - көнөлгә**



11

**Башҡорт ерендә...**

йөҙөм дә үҫә



12

**Рухлы заман утрауында**



13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Ташламалы хаҡҡа яҙыл!*

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 10 апрелдән ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 2023 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 664 һум 66 тингә яҙыла алаһаҡһығыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

*БАШ ҠАЛАМ*

## ӨМӘЛӘР БАШЛАНДЫ



**Ҡыш бауыры оҙон булһа ла, яҙ барыбер үҙенекен итә, тирә-яҡта ҡарҙар ирей, донъялар асылып ҡала. Яҙ бар тәбиғәттең уяныу мәле булыуы менән бер рәттән, мин уны таҙалыҡ һәм тәртип булдырыусы миҙгел, тип тә билдәләр инем. Март аҙағында - апрель башында, ғәҙәттә, традицион өмәләр башлана. Өфөлә лә үткән аҙнала яҙғы экологик таҙартыу миҙгеле башланды.**

Әйтергә кәрәк, баш ҡалала хеҙмәт яратҡан халыҡ йәшәй. Быны үткән аҙнала йома, шәмбе көндәрендә уҙған экологик өмәгә сыҡҡан кеше һанының күплегенә ҡарата ла әйтергә була. Ҡала ойошма һәм учреждениелары хеҙмәткәрҙәре берҙәм генә ҡар ташланы, урам һеперҙе, сүп-сар йыйҙы. Билдәле булыуынса, 31 март үткән санитар өмәлә 34 меңдән ашыу кеше ҡатнашҡан, 750 берәмек эш техникаһы йәлеп ителгән. Сүп-сарҙан 15,6 мең квадрат метр юл һәм парк, сквер биләмәләрендә 4 мең квадрат метр ер таҙартылған. Бер көн эсендә 2,7 мең кубометр сүп-сар сығарылған.

Шулай уҡ йорт ихаталарын һәр саҡ таҙалыҡта тотоусы урам һепереүселәрҙең эшен дә билдәләп китергә кәрәктер. Беҙҙең ихатаны таҙалыҡта тотҡан урам һепереүсе ер ҡарҙан әрселә башлау менән сүп-сарҙан, япраҡтарҙан таҙартыу эшенә тотондо.

Күмәк эштән Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиевтың да ситтә ҡалмайынса, ҡала халҡына хеҙмәт өлгөһө күрһәтеүен билдәләп үтмәйенсә булмай. Ғөмүмән, был йәш, ләкин эшлекле егетте төрлө яҡлап билдәләп үткем килә: сәләмәт тормош алып барыуҙы пропагандалауы, ҡала проблемаларынан ситләшмәйенсә, уларҙың уртаһында ҡайнауы, төрлө идеялар менән яныуы, асыҡ булыуы оҡшай. Мәҫәлән, Ратмир Мәүлиев беҙҙең ғаиләнең генә түгел, ә ҡала халҡының һәм Өфө ҡунаҡтарының да яратҡан урыны - Ағиҙел яры буйында масштаблы эштәр башланасағы тураһында хәбәр итте. "Юность" бассейны янында эшләй башлаясаҡ аттракциондар паркы, теннис һәм баскетбол майҙансыҡтары, һис шикһеҙ, барыһының да күңеленә хуш киләсәк.

Үҙең йәшәгән ерҙе таҙа тотоу һәр кем өсөн алтын ҡағиҙә кеүек тә, ләкин әҙ генә ҡар ирей башлау менән ҡыш сыҡҡансы ҡаланы ни тиклем бысраҡҡа күмеүебеҙ хайран итә. Ул төрлө шешә, тәмәке ҡаптары, эттәр ҡалдырған "өйөмдәр", ә балкондар аҫтында йыйылған тәмәке төпсөктәре һәм башҡа сүп-сар - иҫ-аҡылдар китә.

Был аҙнанан башлап ғәҙәти "санитар йомалар" аҙна һайын уҙасаҡ. Тимәк, баш ҡалабыҙ тағы ла матурайып, сүп-сарҙан таҙарынып, ағастар япраҡ яра башлаһа, йәшеллеккә күмелеп ҡаласаҡ. Шулай ҙа, тәү сиратта, тәртипте һәр кем үҙенән башлап, тирә-яҡты таҙа тотоуҙа үҙ өлөшөн индерә ала.

**Заһир ИСТАМҒӘЛИН.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## БЕРЕНСЕ СИНЫФҠАМЫ?



**Хәҙер ата-әсәләр баланы мәктәпкә яҙҙырыу өсөн алдан ғариза тултыра ала. Бының өсөн Дәүләт хеҙмәттәре порталында ғаризаны алдан тултырырға һәм уны шәхси кабинетта һаҡларға кәрәк.**

Электрон хеҙмәтте рәсмиләштереү өсөн түбәндәге документтар кәрәк: баланың атаһының йәки әсәһенең паспорты; баланың тыуыу тураһындағы таныҡлығы; баланың теркәлеү урыны хаҡында белешмә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, балаларҙы мәктәпкә ҡабул итеү кампанияһының тәүге осоро 1 апрелдән 30 июнгә тиклем дауам итәсәк. Ошо осорҙа ғаризаны теркәлгән урын буйынса йәки, ташламалар булған осраҡта, башҡа мәктәпкә бирергә була. Һайлаған мәктәптә баланың ағаһы йәки апаһы уҡыһа, был хаҡта мәғлүмәт биреү мотлаҡ. Кампанияның икенсе осоро 6 июлдән 5 сентябргә тиклем дауам итә. Был арауыҡта теләгән башҡа мәктәпкә ғариза биреп була. Буш урындар ҡалһа, баланы унда ҡабул итәсәктәр. Ғаризалар ҡабул итеү тамамланғандан һуң өс көн эсендә ошо хаҡта шәхси кабинетҡа хат киләсәк. Әгәр ташламаларығыҙ бар икән, ғаризаға ташламаны раҫлаған документтарҙы беркетегеҙ. Уларҙың төп нөсхәһен мәктәпкә алып барырға кәрәк - шәхси кабинетҡа тейешле хат ебәрелә. Белеүегеҙсә, ташламалар хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең, полиция хеҙмәткәрҙәренең балаларына, етемдәргә бирелә.

*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!*

## ТИРАЖДАР КӘМЕЙ,

### ә выждан ыжламай...



**Мин матбуғат ҡоломондор, тип уйлайым, сөнки үҙемде белә-белгәндән гәзит-журналдарҙан айырылмай йәшәйем. Шулай ҙа ҡасан тыуҙы миндә матбуғатҡа һөйөү?**

Бала саҡта Юлдыбайға барғанымда туғаныбыҙҙың улы ҡулында төҫлө һүрәттәр менән биҙәлгән бер гәзит күреп, мөкиббән булғанымныҡ хәтерҙә ҡалған. Ҡайтҡас, мин дә атай-әсәйемдән шул гәзитте яҙҙырыуҙарын һораным. Йөкмәткеһен әле аңламаһам да, һүрәттәре бик тә күңелемә ятты, сөнки уларҙа балалар тормошонан мауыҡтырғыс фотолар бирелә, тәбиғәт күренештәре сағыла ине. Был гәзит, һуңынан аңлауымса, "Пионерская правда" булып сыҡты.

**(Дауамы 2-3-сө биттәрҙә).**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ИСЕМЕҢ МАТУР...

***Зәлифә ӘБҮБӘКЕРОВА, РФА Өфө фәнни үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғилми хеҙмәткәре:*** Эшем буйынса фондта һаҡланған боронғо яҙмаларҙы күп уҡырға, тәржемә итергә тура килә. Башҡорт халҡының тарихында һәм рухи мәҙәниәтендә мөһим урын алып торған был ҡомартҡыларҙан үҙемә әллә күпме һабаҡ, аҡыл алам. Шулай уҡ хәҙер күптәр үҙ шәжәрәһен белеү менән генә сикләнмәй, уны артабан мөмкин тиклем өйрәнергә, архив материалдары менән тулыландырырға тырыша. Ошондай эштәр менән дә шөғөлләнергә, мөрәжәғәт итеүселәргә ярҙамлашырға тура килә. Архив материалдары менән эшләгәндә гел боронғо исемдәрҙең ни тиклем мәғәнәле, матур, яңғырашлы булыуына иғтибар итә йөрөйөм. **Әсәй кеше, милләтемдең бер вәкиле булараҡ, ни эшләп уларҙы яңынан йәшәйешебеҙгә индереп ебәрә алмайбыҙ һуң, тип тә уйланғаным бар.** Башҡорт халҡы, башҡа халыҡтар кеүек үк, үҙ йәшәү дәүерендә үҙенең генә исемдәрен дә булдырған бит. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың Һыуһылыу, Ҡараҡай, Ҡарасәс, Аҡбикә, Ҡанышбикә, Юлдыбикә, Илбикә, Көмөшбикә, Күсбикә, Ғәйетбикә, ир-егеттәрҙең Яйыҡбай, Абыҙгилде, Урмантай, Турыбай, Иштәкбай, Аҡсал, Йомаҡ, Соҡорбай кеүек исемдәрен йыш осратам. Атайым яғынан да, әсәйем яғынан да шәжәрәмде төҙөнөм, минең дә Ишлебикә, Йәмиләбикә, Иҫәнбикә, Аҙнабикә, Тамсыбикә, Гөлбостан, Гөлсәғиҙә, Бибинәзилә, Һәҙиә, Әминә тигән өләсәйҙәрем, Сурағол, Ишбирҙе, Ишкенә, Исхаҡ исемле олатайҙарым булған.

Күптән түгел Әбйәлил районы Ярлыҡап ауылынан мөрәжәғәт иткәйнеләр, 1850 йылғы ревизия мәғлүмәттәренән ҡарап, ир балаларҙың Йәнсолтан, Ҡустыбай, Әҙелбай, Әлибай, Әлиғол, Аҡҡол, шулай уҡ ҡыҙ балаларҙың Йәнифә, Алтынсәс, Илбикә, Юлдыбикә, Шәһәрбостан, Бәғҙиә, Мөзәлифә тигән матур исемдәр йөрөткәнен асыҡланыҡ. Яңылбикә тигән ҡыҙҙар исеме киң таралған булған. Быныһы ла ҡыҙыҡлы, сөнки ғалимә Таңһылыу Күсимова яҙыуынса, борондан ҡыҙ балаға ҡарағанда, ир бала табыу ата-әсә өсөн дан, шөһрәт итеп ҡаралған. Ә гел ҡыҙ тыуып торһа, Яңылбикә тип ҡушҡандар, "яңыл", йәғни, "яңылышып" китеп донъяға килгән, шунан һуң киләһе сабый малай булырға "тейеш булған". Шулай уҡ "бикә" компоненты ҡушып яһалған ҡатын-ҡыҙҙар исемдәре күп булған.

Әлбиттә, ижтимағи тормош үҙгәргән һайын, исемдәр ҙә үҙгәреш кисерә. Бөгөн килеп кемгәлер кәңәш йөҙөнән, балаңа боронғо исем ҡуш, тип әйтеп булмай. Алтын урталыҡта булған башҡорт исемдәре лә бар. Матур исемле балалар бигерәк тә Өфөлә күп, ә бына саф башҡорт ауылдарында Алина, Азалина, Ралиналарға мода үтмәй әле һаман. Шулай уҡ бер үк исемдәрҙе күп ҡушалар. Аҙаштар күбәйһә лә яҡшы түгел, шунан уларҙы бер-береһенән айырыу проблемаһы тыуа, ҡушаматтар барлыҡҡа килә. Балаларҙың исеме - ул беҙҙең аң кимәленең сағылышы ла. Балаға исеме менән сәләмәтлек, бәхет, оҙон ғүмер, ҡот, ырыҫ килһен.

**Ләйсән НАФИКОВА яҙып алды.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ТИРАЖДАР КӘМЕЙ,

## ә выждан ыжламай...

**(Башы 1-се биттә).**

Бөгөн иһә мәғлүмәт сығанаҡтары ғәйәт күбәйҙе. Хатта телевидение менән радио ла арттараҡ тороп ҡалды һымаҡ, сөнки һәр кемдең ҡулында - айфон, смартфон, ноутбук... Ни ҡылмаҡ кәрәк, мин яратҡан баҫма матбуғат та әлеге гаджеттарға урынын бирә, тираждары кәмегәндән-кәмей башланы. Матбуғат менән күптән дуҫлашҡанлыҡтан, йыл башынан уҡ үҙем алдырып уҡыған гәзит-журналдарҙың тираждарын яҙып барырға ғәҙәтләнгәйнем. Мәҫәлән, 2006 йыл башынан 24 605 дана сығып килгән "Йәшлек" гәзите алты йылдан һуң 17 мең булһа, тағы ла алты йылдан 10 меңгә ҡалғайы. Бөгөнгә шул кимәл һаҡлана алһа, ниндәй шатлыҡ булыр ине! Юғиһә бит, тәүге һандарынан алдырып уҡыған "Истоки" (2009 йылда ул 7 552 дана менән сыға ине) менән "Аҙна" (2013 йылда 54 810 дана булды) гәзиттәре, белеүегеҙсә, бөгөн юҡҡа сыҡты.

Мин мәғлүмәт сығанаҡтарының ҡағыҙ баҫмала сығыуы яҡлымын һәм яҙма һүҙ көсөнә нығыраҡ ышанам. Урыҫ халҡы әйтмешләй, ҡәләм менән яҙылғанды балта менән сабып ташлап булмай. Был - хәҡиҡәт. Ташҡа баҫылғаны мәңгелек һүҙ булып тарихта ҡаласаҡ. Әлеге заманда ла бит боронғо яҙмаларҙы уҡып, өйрәнеп, бик күп тарихи мәғлүмәттәргә эйә булабыҙ.

Армияла хеҙмәт итеп ҡайтҡас та мин "Совет Башҡортостаны", "Ленинсы" гәзиттәрен, районыбыҙ баҫмаһын һәм "Әҙәби Башҡортостан", йәғни "Ағиҙел" журналын алдыра башланым. Ул осорҙағы ҡағыҙ матбуғат саралары мәғлүмәт сығанағы ғына түгел, ә ойоштороусы, әйҙәүсе, туплаусы һәм ысын мәғәнәһендә тәрбиәсе лә ине, сөнки гәзиттәрҙә баҫылған мәҡәлә, очерктар эш һөйөүсе хеҙмәт алдынғылары өлгөһөндә тәрбиәләй, йәштәрҙе лайыҡлы алмаш булырға өйрәтә ине. Тәнҡит материалдары иһә ҡайһы бер бюрократ һәм вайымһыҙ хужалыҡ, район етәкселәрен дә үткер ҡәләм осона, "Өлгөрбай яҙмалары" фельетондарына йыш эләктерҙе, уларҙы ла тәрбиәләне. Халыҡ матбуғат баҫмаһы һүҙенә ышана ине, шуға ла ул саҡ гәзит уҡымаған кеше һирәк булды.

Ә бөгөн, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, гәзит уҡыусылар һирәк күренеш. Матбуғат ижтимағи әһәмиәтен юғалта барып, күбеһенсә мәғлү-

АТАЙСАЛҒА - ИЗГЕ ҒӘМӘЛДӘР

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК ҠАЙҘАН БАШЛАНА?

**"Атайсал", йәғни "Кесе Ватан" тигәндә тәү сиратта тыуған ауылың йәки ҡалаң, һыуын эскән, һыуында ҡойонған шишмә-йылғаларың, сәскәле-еләкле яландарың, һин тыуып үҫкән, һин тәүләп тәпәй баҫҡан изге ер күҙ алдына баҫа. Үҫә килә офоҡтар киңәйә, тауҙар артында ла тауҙар, ауылдар, ҡалалар булыуын асыҡлайһың. Тора-бара ғорурланырлыҡ тарихлы, һоҡланғыс тәбиғәтле Башҡортостаның барлығына төшөнәһең. Унның Рәсәй уртаһында йөрәкте хәтерләтеүенә инанаһың. Рәми Ғарипов артынса: "Урал күкрәгендә йөрәк кеүек, Башҡортостан - тыуған илкәйем. Шул йөрәктең ҡан тамыры булып, Күкһелләнә Ағиҙелкәйем!.." - тип ҡабатлайһың.**

Бына ошо күсәгилешлелек тәбиғи үҙләштерелгәндә генә Атайсалыңды ла, Оло Ватаныңды ла берҙәй һөйөү тойғоһо ярала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, күпмелер дәрәжәлә һаҡлана килгән ошо күсәгилешлелек айырыуса һуңғы өс-дүрт тиҫтә йыл эсендә аяуһыҙ рәүештә емертелде. Был осраҡта мин тәү сиратта туған телебеҙгә, халҡыбыҙ тарихына ҡарата алып барылған битараф сәйәсәтте күҙ уңында тотам. Дөрөҫ, башҡорт телебеҙ республикала дәүләт теле тип иғлан ителде, туған телде һаҡлау-үҫтереү йәһәтенән даими эш алып барыла, барса район үҙәктәрендә лә тиерлек башҡорт гимназиялары асылды, телде пропагандалау йәһәтенән бихисап саралар ойоштрола, әммә туған телебеҙҙең ҡулланылыш даирәһенә, балаларыбыҙҙың мәктәптәрҙә туған телендә белем алыуына, халҡыбыҙ тарихын өйрәнеүгә бәйле проблемалар тулыһынса хәл ителгән тип әйтеп булмай. Әсәйеңдең телен, атай-олатайҙарың яҙмышы менән яҙылған тарихты белмәй тороп, нисек илһөйәрлек тойғоһон тәрбиәләргә мөмкин! Бер үк мәлдә шуныһын да күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай: туған телгә мөнәсәбәт Атайсалыңа бирелгәнлек тойғоһонан айырылғыһыҙ һәм уларға бәйле эш - туҡталыуһыҙ, йәғни көн дә башҡарыла торған изге ғәмәлдәрҙән. Әгәр ҙә ниндәйҙер бер дәүерҙә был мотлаҡ атҡарыла торған кешелек бурысы онотола икән - уны иртәме-һуңмы ысынбарлыҡ үҙе мотлаҡ иҫкә төшөрәсәк...

Бәхет юҡ ине, бәлә ярҙамға килде, ти урыҫ мәҡәле. Украина менән бәйле һуңғы осорҙағы ваҡиғалар юғарылағы етәкселекте айнытып ебәрҙе: тәрбиә эше менән, бигерәк тә илһөйәрлек, ватансылыҡ тойғоларын тәрбиәләү йүнәлешендә даими һәм ныҡышмал эшләргә кәрәк икән. Бит

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2023 йылда Башҡортостанда 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 78 йыллығына арналған тантаналы саралар уҙғарыла. Республика Башлығының тейешле бойороғонда ойоштороу комитеты составы раҫланған. Уны Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин етәкләй. Ойоштороу комитеты рәйесе урынбаҫарҙары - Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры Ирек Сәғитов һәм Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев.

✓Башҡортостандың хәрби комиссары Михаил Блажевич яҙғы саҡырылыш сиктәрендә республиканан 5,5 меңдән ашыу егеттең хеҙмәткә алынасағын хәбәр итте. "Саҡырылыш Рәсәй ҡануниәтендә билдәләнгән ваҡытҡа ярашлы 1 апрелдән 15 июлгә тиклем дауам итә. Һалдаттар ил биләмәһендә урынлашҡан пункттарға хеҙмәт итергә ебәрелә, ә хеҙмәтен тултырған хәрбиҙәр өйҙәренә ҡайтарыла", - тине Блажевич.

✓Республикала подъездарҙы комплекслы ремонтлау программаһы буйынса эштәрҙең яңы миҙгеле старт алды. Программа сиктәрендә 274 йортта 752 подъезды ремонтлау ҡарала. Быйыл был эш 20 муниципалитетҡа ҡағыла, дөйөм бюджет - 744 миллион һум. Ошо хаҡта социаль селтәрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. Подъездарында ремонт яһау планлаштырылған йорттар исемлеге - Башҡортостандың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы сайтында.

✓"Башҡортостан делегацияһының Абхазияға сәфәре барышында маҡсатлы ҡабул итеү сиктәрендә Абхазияның IT-тармағы өсөн белгестәр әҙерләү мәсьәләһен өйрәнеү тураһында килешеүгә өлгәшелде. Өфө радиоэлектроника, телекоммуникациялар һәм хәүефһеҙлек колледжы менән Сухум дәүләт колледжы араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды", - тип һөйләне тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева Хөкүмәттең аҙналыҡ оператив кәңәшмәһендә.

✓Рәсәй Президенты указына ярашлы, республикала Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарының пенсияһына өҫтәп, 10 мең һум түләнә. Аҡса апрель пенсияһы менән бергә таратыла. 2023 йылда республикала уны 182 ветеран, шулай уҡ һаулыҡ мөмкинлеге сикләнгән 63 кеше алырға тейеш. Бының өсөн ғариза яҙырға кәрәкмәй.

✓ ***Баҫма матбуғаттың нимәһе яҡшы - унда әлегеләй тәртипһеҙлек һәм хаялыҡтарға бер ҡасан да юл ҡуйылманы һәм әле лә әҙәп ҡанундары изге күреп һаҡлана, бына шул да гәзит-журналдарыбыҙ өҫтөнлөктәренең мәртәбәһе.***





мәт сығанағы булып ҡына хеҙмәт итә, тиһәм, бигүк дөрөҫ тә булып етмәҫ кеүек. Әле ул күберәк социаль-көнкүреш, мәғариф һәм мәҙәниәт, сәнғәт, әҙәбиәт мәсьәләләрен яҡтырта, сәләмәт тормош рәүешенә өндәй. Ә иң мөһим темаларҙың береһе - туған тел һәм халҡыбыҙ тарихы мәсьәләләре, бынығһы ҡыуандыра, әлбиттә. Сөнки, кем әйтмешләй, бөгөнгө көн шуны талап итә лә. Тик, үкенескә, гәзит-журнал биттәрендә элекке кеүек янып-ярһып фекер алышыуҙар, конструктив бәхәс һәм диалогтар юҡ кимәлендә. Был аңлашыла ла: әйтеп китеүемсә, аудитория тарайҙы, гел бер үк авторҙар фекере ҡабатлана башланы. Уның ҡарауы, бая әйткән "янып-ярһып" бәхәсләшеүҙәр, хатта ки бер-береһенең йөҙөнән алыу, "бит тырнашыуға" тиклем барып етеүҙәр виртуаль донъяға - интернет киңлектәренә күсте: был донъя сикһеҙ, киң - әйҙә, бәхәсләшегеҙ, тик йәмһеҙләшеүгә, бер-берегеҙне кәмһетеүгә, мыҫҡыллауға юл ҡуймағыҙ.

Баҫма матбуғаттың нимәһе яҡшы - унда әлегеләй тәртипһеҙлек һәм хаялыҡтарға бер ҡасан да юл ҡуйылманы һәм әле лә әҙәп ҡанундары изге күреп һаҡлана, бына шул да гәзит-журналдарыбыҙ өҫтөнлөктәренең мәртәбәһе. Тап ана шул уйлап әйтеү, сама белеү, әҙәплелек сифаттары менән яҙма матбуғатыбыҙ йәшәйәсәк әле һәм, ихтимал, виртуаль киңлек авторҙары ул донъялағы самаһыҙлыҡ менән ялған мәғлүмәттәрҙән бүгеп, бер заман туған гәзит-журналдарыбыҙға яҙыла башламаҫтар, тимә...

Шөкөр, ә мин үҙем быйыл да "Киске Өфө", "Башҡортостан","Йәшлек", районыбыҙҙың "Һаҡмар", "Баймакский вестник", "Атайсал", "Ветеран Башкортостана" гәзиттәренә һәм шулай уҡ "Ағиҙел", "Ватандаш" журналдарына яҙыла һалдым һәм шуларҙы уҡып кинәнәм. Ҡимммәтерәк, әлбиттә, ләкин матбуғатһыҙ йәшәү миңә күңелһеҙ һәм мәғәнәһеҙ тойола. Ҡиммәт, тигәндән, бөгөн нимә арзан һуң ул? Миңенсә, гәзит-журнал редакциялары эшенә почта хеҙмәте ҙур ауырлыҡ һала. Был фекерҙе яңыраҡ осратып һөйләшергә тура килгән бер мөхәррир иптәш тә раҫланы: почта матбуғат баҫмаларының ярты хаҡын ала, тине ул. Был ойошма, ысынлап та, сама белмәй башланы түгелме? Элек 4-5 тин торған ябай ғына ҡотлау открыткаларын хәҙер 48 һумға һатып ултыралар бит! Һәр төрлө түләүҙәргә комиссия тотоп ҡалалар, яҙыу-һыҙыу кәрәк-яраҡтары, хужалыҡ тауарҙары ғына түгел, хатта аҙыҡ-түлек, кейем-һалым менән ауҙа итә башланылар бит почта бинаһы эсендә. Үҙҙәренең һаҡлыҡ банкын астылар - был нимә, ябай почта эшселәренең йән аҫрауымы, әллә хужаларына өҫтәмә килем генәме? Етмәһә, былай ҙа фәҡирлек сигендә көн итеп, бына тигән гәзит-журнал ижад итеүселәрҙән аҡса ҡайыра, тиң, ә!

Замандаштарымдың вайымһыҙлығы, хуш күңеллегенә лә эс боша. Йәнде өйкәп тороусы көнүҙәк мәсьәләләр буйынса дөйөм фекер алышыу, йәшәйешебеҙҙәге теге йәки был күренеште хуплау йә булмаһа бер төптән тәнҡитләү тигән нәмә юҡ, һәр кем үҙ өңөнә бикләнгән. Әлбиттә, гәзит алдырып уҡымағас, ниндәй фекер уртаҡлашыу, ти ул! Ҡайһы саҡ сәмләнеп-ғәрләнеп тә китәм: республикабыҙҙа татар телендә нәшер ителеүсе "Без - бергә" тигән гәзит 66 мең 800 дана менән сыға, беҙҙең әсә телебеҙҙәге төп гәзиттәребеҙҙе уҡыусы юҡ кимәлендә - хурлыҡ түгелме ошо?..

Журналистарыбыҙ гәзит-журнал да сығара, өҫтәүенә, инәлеп-ялбарып тигәндәй, үҙ уҡыусыларын эҙләй, уларҙы гәзиткә яҙылырға өндәй. Был дөрөҫмө? Юҡ, әлбиттә! Быларҙы мин зарланыуҙан бигерәк киләсәгебеҙҙе уйлап хафаланыуҙан, балаларыбыҙҙың кем һәм ниндәй телле булып үҫере борсоғандан яҙам. Милләттәштәребеҙҙең һәр береһе булмағанда ла, һәр ғаилә берәр дана матбуғат баҫмаһы алып уҡыһа, был рухи асылыбыҙға ҡайтыуҙа, туған телебеҙҙе һаҡлап ҡалыуҙа мәртәбәле ғәмәлдәрҙең береһе булыр ине.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ,**
**йәмәғәт хәбәрсеһе.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

мәғариф өлкәһендә нимәгә өҫтөнлөк бирелде: конкуренцияла бирешмәҫлек шәхес әҙерләнһен, ул дөйөм дәүләт имтихандарын бирә алһын, күберәк балл йыйһын да юғары уҡыу йортона инеп китһен. Ә баланың Кеше булараҡ өлгөрөп етеүе - артҡы планда! Шул нигеҙҙә үҙен генә өҫтөн ҡуйған, хатта ата-әсәһен дә бар тип белмәгән, ижади фекерләй алмаған, әҙер яуаптар менән генә эш иткән (сөнки тест һорауҙарына ижади уйлау кәрәкмәй, яҡшы тигән хәлдә лә хәтерҙең шәплеге менән генә ятланған яуаптар еткән) күпселегендә бына ошондай быуын формалашты. Уларҙың байтағы туған телен дә, Атайсал тарихын, мәҙәниәтен дә, Оло Ватандыҡын да белмәй. Әйтеп үткән күсәгилешлелек, тәбиғи рәүештә йәшәп килгән быуындар бәйләнеше, традицияларҙың, ыҙан-йолаларҙың, әҙәп-әхлаҡ ҡағиҙәләренең ололарҙан йәштәргә тапшырыла килеүе өҙөләр сиккә еткән. Уйланһаң, уйылып китерлек! Ләкин ҡойолоп төшөргә, ҡул ҡаушырып ултырырға ярамай. Телем, милләтем тип янған һәр кем ҡулынан килгәнен эшләргә тейеш.

Әйткәнемсә, илһөйәрлек, ватансылыҡ тойғоһо Атайсалыңды яратыуҙан башлана. Ә яратыу өсөн уны белеү кәрәк! Белмәгәнеңде нисек яратаһың? Тимәк, илеңде, халҡыңды һөйөү туған телеңде, халҡыңдың тарихын белеүҙән башлана. Халыҡта ябай ғына әйтем бар: "Оло йортҡа ни кәрәк, Кесе йортҡа шул кәрәк". Оло Ватанды берләштереүсе, нығытыусы дәүләт теле бар икән, ул йәшәй-үҫешә икән - Кесе Ватанды ла тәү сиратта тел берләштерә, халҡыңдың үткәнен белеү - уның менән ғорурланыу тойғоһон уята, илеңдең бөгөнгөһөнә үҙ өлөшөңдө индергең килә башлай.

Мәҫәлән, Уралына сат йәбешеп ятҡан, нисәмә-нисә ҡырғынсыларҙан ҡурсалап алып ҡалған атай-олатайҙар менән нисек ғорурланмайһың! Ялыҡ бей һуңғы ырыуҙашы ҡалғансы, Ҡармасан менән Сәрмәсән уландары һәләк булыуына, тотош ырыуын юғалтыуына, япа-яңғыҙы тороп ҡалыуына ҡарамаҫтан, татар-монгол яуына сая ҡаршылыҡ күрһәтә. Бошман бей ун дүрт йыл буйына был ҡара яуға ҡаршы тора. Уның нәҫелен дауам итеүсе Кинйә Арыҫланов Пугачевты үҙенең казактары тотоп биргәнсегә тиклем изге ихтилалға тоғролоҡ һаҡлай. Инде килеп совет осоронда Кинйәнең туранан-тура бүләләренең бүләһе Ғәфиәт Арыҫланов башҡорттарҙан беренсе булып фин һуғышында уҡ Советтар Союзы Геройы исемен аласаҡ. Ә Кинйә нигеҙләгән ауылдан, шулай уҡ уның шәжәрәһенә барып тоташҡан Ғайсин менән Биктимеров та Бөйөк Ватан һуғышында был юғары наградаға лайыҡ буласаҡ. Ҡырҡ өйлө генә бәләкәй ауылдан өс Советтар Союзы Геройы! Өсөһө лә бер үк тамырҙан! Тикшеренеүселәр Рәсәйҙә башҡа бындай ауыл юҡ, тип иҫәпләй. Бының менән нисек ғорурланмайһың! Бына ошондай мәғлүмәттәргә нигеҙләнеп тәрбиәләргә тейешбеҙ йәштәрҙе.

Эйе, беҙҙең һәр беребеҙ Атайсалына изге ғәмәлдәр ҡылырға бурыслы. Мәҫәлән, мин үҙем тыуған ауылым тарихын яҙырға тотондом. Архивтарҙа эҙләнергә тура килде. Район гәзите төпләнмәләрен аҡтарҙым. Ауылдаштар, бигерәк тә оло йәштәгеләр менән бәйләнештәрҙе яңырттым. Ентекләп шәжәрәләрҙе өйрәндем. Материал туплауҙа ауылдаштарҙан айырыуса Фәнис Бикташев ныҡ ярҙам итте. Эш тамамланыу өҫтөндә. Алла бирһә, айырым йыйынтыҡ булып сығасаҡ. Был китап, йәш быуында тарихи хәтер тәрбиәләүҙә үҙенә күрә бер алыштырғыһыҙ сығанаҡ буласаҡ, тигән ҡараштамын.

Республика мәктәптәрендә "Регионоведение. Башкортостан" тигән предмет индереү күҙаллана. Ул - "Башҡорт теле" дәресен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүгә альтернатива рәүешендә индереләсәк. Башланғыс синыфтар өсөн программалар, әсбаптар эшләнде, баҫылып сыҡты. Төп автор һәм мөхәррир булараҡ, был эштәрҙе миңә эшләргә тура килде. Юғары синыфтар өсөн дә был йүнәлештә эш бара. Тик вазифалы иптәштәрҙе "башҡорт ихтилалдары" (ә башҡорт тарихында батшалыҡҡа ҡаршы беҙҙең ата-бабалар һикһәндән ашыу азатлыҡ көрәше ойоштorған!) тигән һүҙбәйләнеш тертләтеү арҡаһында, тамамланыу алдында торған эш туҡталып ҡалды...

Үткәнебеҙҙе белһәк, быуаттар һуҙымында тупланған тәжрибәгә таянһаҡ, рухи байлығыбыҙҙы туплаған туған телебеҙҙә аралашһаҡ, иртәгәбеҙ, һис шикһеҙ, ҡояшлы буласағына, Атайсалыбыҙ ҙа, Оло Ватаныбыҙ ҙа күкрәп сәскә атасағына бер тамсы ла шикләнмәйем!

**Фәнил КҮЗБӘКОВ,**
**яҙыусы, филология фәндәре докторы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2023 йылдың 3 апреленән 1 июленә тиклем Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына конкурс материалдары ҡабул ителә. Премияға шәхсән дә, авторҙар коллективы ла (5 кешегә тиклем) дәғүә итергә мөмкин. Уларҙың йәше 35-тән артмаҫҡа тейеш. Материалдар эш көндәрендә иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем Өфө ҡалаһы, Аксаков урамы, 2 адресы буйынса ҡабул ителә. Бәйләнеш өсөн телефон: +7 927 306-82-73, эл. почта ismagilova.da @bashkortostan.ru.

✓Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов үҙенең телеграм-каналында шәмбе, 8 апрелдә, республикала һыу һәм урман ҡоштарына һунар миҙгеле асылыуын хәбәр итте. "Һунар миҙгелен башлау һәм тамамлау ваҡыты һәр зона, шулай уҡ ҡоштарҙың төрҙәре өсөн айырым билдәләнгән, - тине ведомство башлығы. - Яҙғы һунар осоронда инә өйрәк, һуйыр, ҡор, сел, ҡашҡабаш, һаҙ тауығы, ағуна, ҡурпысыҡ ауларға ярамай. Бының өсөн административ һәм енәйәт яуаплылығы бар".

✓Республика бюджетынан картуф һәм йәшелсә үҫтереүгә бүленә торған субсидия күләме раҫланған. Мәҫәлән, картуф сәселгән майҙандың һәр гектарына - 15 мең һум, асыҡ тупраҡтағы йәшелсәнекенә 17 мең һум бүленә. Ябыҡ тупраҡта йәшелсә үҫтереүгә киткән сығымдарҙың өлөшөн ҡаплау - бер тонна өсөн 3 мең һум. Шулай уҡ Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығы бойороғонда субсидия алыу өсөн ғариза формаһы һәм кәрәкле документ өлгөләре бирелгән.

✓3 апрелдә Камчаткала көслө итеп ер тетрәгән, магнитудаһы - 6,9 балл. Был хаҡта Рәсәй Фәндәр академияһы Берҙәм геофизика хеҙмәтенең Камчатка филиалы хәбәр итә. Эпиүҙәк Петропавловск-Камчатскийҙан 64 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Социаль селтәрҙә Камчатка крайы губернаторы Владимир Солодов хәбәр итеүенсә, зыян күргәндәр һәм емерелгән биналар юҡ.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам күрһәтеү өсөн "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фондын булдырыу тураһында указға ҡул ҡуйған. Фондты ойоштороусы - Рәсәй Хөкүмәте. Фондтың маҡсаты - хәрби хәрәкәттәр ветерандарына, уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам күрһәтеү. Фондтың күҙәтеү советы рәйесе итеп Рәсәй Президенты Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Сергей Кириенко тәғәйенләнде.

✓ "Беҙҙә "Сириус"тың тәжрибәһе бик ҡыҙыҡһындыра, уны Өфөлә математика лицейын төҙөгәндә ҡуллана алыр инек. Бынан тыш, әле беҙ Евразия ғилми-белем береү үҙәгенең вуз-ара кампусы буйынса һуңғы ҡарарҙар ҡабул итеү этабында.



ҠЫҪҠАСА

# ТАЛПАНДАН ҺАҠЛАН!

**Роспотребнадзор Башҡортостандың талпан энцефалиты таралыу хәүефе булған райондар исемлеген баҫтырып сығарҙы.** Билдәле булыуынса, 68 административ биләмәнең 42-һе ошо исемлектә бар: Әбйәлил, Әлшәй, Асҡын, Баҡалы, Бәләбәй, Балаҡатай, Белорет, Бөрө, Благовещен, Бүздәк, Борай, Бөрйән, Ғафури, Дәүләкән, Дыуан, Йәрмәкәй, Йылайыр, Иглин, Ишембай, Ҡалтасы, Ҡариҙел, Ҡыйғы, Краснокама, Күгәрсен, Көйөргәҙе, Мәләүез, Мәсетле, Мишкә, Миәкә, Нуриман, Салауат, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Тәтешле, Туймазы, Өфө, Учалы, Федоровка, Саҡмағош, Шишмә, Шаран, Яңауыл райондары. Ведомствоның матбуғат хеҙмәтендә белдереүҙәренсә, хәүефле сирҙән төп һаҡланыу сараһы - прививка. Уны йыл дауамында, шул иҫәптән эпидемия миҙгелендә, инфекция сығанағы булған урынға барырҙан 2 аҙна алда яһатырға мөмкин.

✓ **Республика Хөкүмәте хәрби хәрәкәттәр ветерандарының яңы батальондар ойоштороу башланғысын хуплай.** Премьер-министр Андрей Назаров хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда 600-ҙән ашыу кеше Даян Мурзин исемендәге, "Төньяҡ амурҙары" ирекле батальондарына, ошо формированиелар составындағы "Ватан" разведка ротаһына инергә теләк белдергән. "Граждандарыбыҙҙың башланғысы менән Даян Мурзин исемендәге, "Төньяҡ амурҙары" яңы башҡорт батальондарын ойоштороу буйынса йәмәғәт штабы булдырылды. Ошо батальондар составына инеү өсөн 600-ҙән ашыу кеше ғариза яҙған. Был аҙнала ошо батальондарҙы төҙөп, махсус хәрби операция зонаһында хеҙмәт итергә әҙерләү өсөн йомғаҡ яһау ҡарала", - тине Андрей Назаров. Республика Хөкүмәте алдында финанслауҙы максималь рәүештә тәьмин итеү бурысы тора, тип билдәләне Премьер-министр. Башҡортостан Башлығы Хакимиәте хәрбиҙәрҙе кейендереү мәсьәләләре менән шөғөлләнәсәк.

✓ **Рәсәй Хөкүмәте аҙ килемле ғаиләләрҙең Әсәлек капиталынан айлыҡ түләү юллау мөмкинлеге тураһында ҡарарҙы раҫланы. Элек быйдай түләүҙе икенсе балаға ғына алырға мөмкин ине.** Документта билдәләнеүенсә, аҡса килеме айына бер кешегә ике тапҡыр йәшәү минимумынан кәмерәк булған ғаиләләргә тәғәйенләнә. Уны балаға өс йәш тулғансы алырға була. Әгәр ғаиләлә өс йәшкәсә бер нисә бала булһа, аҡсаны уларҙың һәр береһенә юлларға мөмкин. Айлыҡ түләүҙең күләме - балаға тәбәктәге йәшәү минимумы. Ил буйынса уртаса алғанда 13,9 мең һум килеп сыға. Бынан тыш, ғаиләнең бер үк ваҡытта берәм пособие һәм әсәлек капиталынан түләү алыу мөмкинлеге бар. Айлыҡ түләү алыуға ғаризаны дәүләт хеҙмәттәре порталы аша, күп функциялы үҙәккә йәки Рәсәйҙең Социаль фонды бүлексәһенә барып бирергә мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ҺӘЛӘТЛЕЛӘР ӨСӨН...



**"Яңы идеялар менән ҡайтабыҙ" - Башҡортостан Башлығы Сочиҙа "Сириус" үҙәге менән танышҡандан һуң шулай тине.**

"Сириус" Рәсәй Президенты Владимир Путиндың башланғысы менән тотош илдәге һәләтле балаларға булышлыҡ итеү өсөн булдырылған. "2019 йылда Башҡортостанда үҙебеҙҙең "Аврора" тәбәк үҙәген астыҡ, ул "Сириус" моделе буйынса эшләй. Уның ярҙамында теге йәки был өлкәлә һәләтен күрһәткән һәр уҡыусы иң яҡшы уҡытыусылар менән шөғөлләнеү, олимпиадаларға әҙерләнеү, айырым фәндәрҙе тәрәнерәк өйрәнеү, сәнғәттә һәм спортта үҫешеү мөмкинлегенә эйә була", - тине Радий Хәбиров.

Билдәләнеүенсә, үҙ өлкәһендә яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшкән балалар өсөн "Сириус" үҙәгенең профилле сменаларында ҡатнашыуға квоталар ҡаралған. Быйылғы уҡыу йылында республиканың 68 уҡыусыһы унда булып ҡайтты. Һигеҙ уҡытыусы квалификация күтәреү курстарын үтте. "Беҙҙә "Сириус"тың тәжрибәһе бик ҡыҙыҡһындыра, уны Өфөлә математика лицейын төҙөгәндә ҡуллана алыр инек. Бынан тыш, әле беҙ Евразия ғилми-белем береү үҙәгенең вуз-ара кампусы буйынса һуңғы ҡарарҙар ҡабул итеү этабында. "Сириус"тың үҙ кампусы бар, беҙ ҙә унда булдыҡ. Яңы идеялар менән ҡайтабыҙ", - тип йомғаҡ яһаны Башҡортостан Башлығы.

## СӘСӘЛӘР...

**Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында баҫыу эштәре ҡәҙимгенән 2-3 аҙнаға һуңыраҡ башлана торғайны, ләкин бында һауа температураһының түбән булыуы сәбәпле, ҡайны берҙә ашлыҡ өлгөрөп етмәй ине.**

Һуңғы йылдарҙа ошо тәбиғәт-климат зонаһында үҫемлексәлек өсөн шарттар яҡшы яҡҡа үҙгәрҙе, тип билдәләне Башҡортостан Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Мәсетле районында уҙған зона агрономия конференцияһында. Был хаҡта аграр ведомствоның матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. "Зона районарында ҡар ҡалмаған тиерлек, ужым культуралары шытҡан баҫыуҙарҙы күреп ҡыуандым. Был Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышы өсөн ғәҙәти булмаған күренеш", - тип билдәләне Илшат Фәзрахманов.

2023 йылдың яҙында баҫыу эштәре уҙған йылдарҙағы кеүек республиканың көньяғынан түгел, ә төньяҡ-көнсығыштағы Ҡыйғы районынан башланды. 30 мартҡа унда - 200 гектар ужым арышы, Баҡалы районында иһә 60 гектар ужым культуралары туҡландырылған. Шулай итеп, республика аграрийҙары, яҡшы һауа шарттарынан файҙаланып, рекордлы уңыш алыуға өлгәште. Хәҙер әлеге тенденцияны киләһе йылдарға һаҡлап ҡалыу мөһим. Агроконференцияла ҡатнашыусыларға республикала яҙғы баҫыу эштәрен финанслау, техниканың әҙерлеге тураһында һөйләнеләр.

## БАҠСА ҮҘГӘРӘСӘК

**Баш ҡалала С. Аксаков исемендәге баҡсала күсмә кәңәшмә үткәргәндән һуң, уны яңыртып ҡороу өсөн ябырға ҡарар ителгән. Территорияға ремонт тамамланғансы инеп булмаясаҡ. Төҙөкләндереү эштәре "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль программаһы сиктәрендә тормошҡа ашырыла.**

Яңыртып ҡороу һөҙөмтәһендә баҡса территорияһы төрлө зоналарға бүленәсәк. Бында тарихи аллея, күл яры, әҙәби ҡунаҡхана, ваҡиға һәм балалар майҙансыҡтары буласаҡ. Бәләкәй архитектура өлгөләре ҡуйыласаҡ, яҡтыртыу сығанаҡтары яңыртыласаҡ, юл ҡатламы алмаштырыласаҡ, ҡарт ағастар урынына йәштәре, шулай уҡ сәскә атҡан ҡыуаҡтар ултыртыласаҡ.

Сергей Тимофеевичтың бала сағынан, яҡынса 1834 йылдан бирле үҫкән ҡарағас тарихи мираҫ булып тора. Ул башҡа ағастар араһында архитектура яҡтыртыуы менән айырылып торасаҡ һәм уның эргәһенә мәғлүмәт табличкаһы урынлаштырыласаҡ. Йәмәғәт киңлегенең визит карточкаһы булған "Ал сәскә" конструкцияһы урынына яңы "сәскә" ултыртыласаҡ. Бөткән театр урынын ваҡиға майҙансығы биләйәсәк. Ул элек Виденеево йәйге театры урынлашҡан участкаға яҡын буласаҡ һәм төрлө саралар уҙғарыу үҙәгенә әүереләсәк. Пушкин урамынан инеү урынының тарихи йөҙө һаҡланһа ла, Яңы күпер урамы яғынан инеү урыны үҙгәртеләсәк.

## ТҮЛӘҮҘӘР ТӘҒӘЙЕНЛӘГӘНДӘ...

**Советтар Союзы, Рәсәй Федерацияһы Геройҙарын, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарын, Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт Геройҙарын һәм Дан орденының, шулай уҡ Хеҙмәт Даны ордендарының тулы кавалерҙарын һәм уларҙың ғаилә ағзаларын айлыҡ түләүҙәр алыу өсөн ғариза һәм документтар тапшырыуҙан азат итәләр.**

Дәүләт Думаһы депутаттары беренсе уҡыуҙа ошондай закон проектын ҡабул итте. Документта билдәләнгәнсә, Пенсия һәм социаль страховкалау фонды кемдәргә түләүҙәр тәғәйенләү тураһында мәғлүмәт бирергә бурыслы. Һуҙ 2023 йылдың 1 ғинуарынан һуң түләүгә хоҡуғы булған геройҙар һәм һәләк булған геройҙарҙың ғаилә ағзалары хаҡында бара.

Ғәмәлдәге ҡануниәт буйынса, геройҙарға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына (герой һәләк булған осраҡта) аҡса алыу өсөн ғариза, тейешле документтар менән Пенсия һәм социаль страховкалау фондына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Төҙәтмәләргә ярашлы, Рәсәй Федерацияһы Президентына яугирҙы наградаға тәҡдим иткән органдар Социаль фондҡа Геройҙар исемен биреү тураһында мәғлүмәттәр тапшыра. Был улар исем алған көндән алып биш эш көнөнән дә һуңға ҡалмайынса башҡарылырға тейеш. Советтар Союзы һәм Рәсәй Федерацияһы Геройҙарына, Дан орденының тулы кавалерҙарына айлыҡ түләүҙәр күләме февралдәге индексацияға тиклем 74 мең 617 һум ине. 2023 йылдың 1 февраленән айлыҡ түләүҙәр 11,9 процентҡа арттырылды. Башҡортостанда был сумма - 83 496 һум, тип хәбәр иткәйне "Башинформ".

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Апрель айының ғәҙәттәгенән әҫе булыуына ҡарамаҫтан, йылы биреүҙе туҡтатыу әлегә иртәрәк, тип иҫәпләйҙәр Өфө хакимиәтендә. Төндә температура нулгә тиклем төшә һәм унан да ныҡыраҡ түбәнәйә, тиҙҙән көндәҙ ҙә температураның түбәнәйеүе көтөлә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, биш көн дауамында тәүлек температураһы уртаса +8 градус кимәлендә торһа, йылытыу миҙгеле тамамлана. Әйткәндәй, был аҙнала температура +11-гә тиклем күтәрелде.

✓Башҡортостан Башлығы махсус хәрби операция зонаһында хәрби бурыстарын үтәгән яҡташтарыбыҙға уңыштар теләне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, уҙған ял көндәрендә бер төркөм хәрбиҙәр республикаға ҡыҫҡа ваҡытлы отпускыға ҡайтты. Яугирҙарҙы Октябрьскийҙа, һуңынан Өфөлә хөрмәтләп ҡаршы алдылар.

✓Башҡортостандың торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Голованова һуҙҙәренсә, урамдарҙы, ихаталарҙы таҙартыу һәм төҙөкләндереү эштәре 30 апрелгә тиклем дауам итә. Унда Башҡортостандың барлыҡ 63 муниципалитеты ҡатнаша. 29 апрель һәм 13 май "Йәшел Башҡортостан" акцияһын уҙғарыу көндәре тип иғлан ителде. Акция барышында ҡалаларҙа 48 тематик аллея булдырыу, 24 мең ағас ултыртыу күҙаллана.

✓Төркиәнең Southwind Airlines авиакомпанияһы 2023 йылдың йәйендә Төркиә менән Рәсәй араһында даими пассажирҙар ташыу өсөн тәғәйенләнеүен белдерҙе. Рейстарҙы аҙнаһына ете көн илебеҙҙең 11 ҡалаһына, шул иҫәптән Өфөгә башҡарыу күҙаллана. Шулай уҡ Өфөнән Баҡыға өҫтәмә рейс асылыуы тураһында хәбәр ителә.

✓Өфөлә "Мисс Берҙәмлек-2023" этник матурлыҡ һәм талант конкурсы финалсыларының исемдәре билдәле булды. Конкурсты ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, һайлап алыу туры йомғаҡтары буйынса гала-финалда ете милләт вәкиле сығыш яһай. Проекттың гала-финалы 21 апрелдә "Торатау" конгресс-холында уҙа.

✓28 апрелдән NordStar авиакомпанияһы "Өфө" аэропортынан Сочиға осоштар программаһын тергеҙә. Рейстар 180 пассажирға иҫәпләнгән Boeing 737-800 самолеттарында аҙнаһына бер тапҡыр, йома көндәредә башҡарыла. "Аэрофлот", "Победа", Smartavia и Nordwind авиакомпаниялары Өфө - Сочи маршруты буйынса осоштар башҡарыуын дауам итә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Махсус хәрби операция зонаһына һәм Рәсәйҙән ситкә ебәрелгән хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаилә ағзалары элекке хеҙмәт урыны буйынса торлаҡ менән файҙаланыуын дауам итергә мөмкин.***



БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# БАРЫҺЫ ЛА...

## балалыҡ именлеге өсөн



**Республикала ыңғай үҙгәреш күҙәтелә: һуңғы ун йылда күп балалы ғаиләләр өлөшө 8,4 проценттан 12,5 процентҡаса артҡан. Был йәһәттән 2020 йылда булып үткән Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре буйынса мәғлүмәттәр менән Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы Дәүләт ғаилә сәйәсәте буйынса координация советы ултырышында уның рәйесе, премьер-министр урынбаҫары - финанс министры Лира Иғдисамова таныштырҙы.**

Иҫәп алыу һөҙөмтәләре буйынса республика халҡы 4 млн 73 мең кеше тәшкил итә. 18 йәшкә тиклемге бала тәрбиәләүсе 471 895 ғаилә иҫәпләнә. Шуларҙың 60 меңгә яҡынында 3 һәм унан күберәк бала үҫә. Шулай итеп, 2010 йылғы халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре менән сағыштырғанда күп балалы ғаиләләр структураһының сағыштырма өлөше 4,1 процентҡа артҡан. Был мәғлүмәттәр киләһе ун йыллыҡҡа демография һәм ғаилә сәйәсәтен күҙаллау һәм анализлау, идара итеү ҡарарҙарын ҡабул итеү өсөн нигеҙ булып хеҙмәт итәсәк, тине Лира Иғдисамова.

Ғаиләләргә социаль ярҙам саралары комплексын бойомға ашырыу тураһында доклад менән координация советы рәйесе урынбаҫары, БР ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡҡа социаль ярҙам министры Ленара Иванова сығыш яһаны. Уның һүҙҙәренсә, республикала хәҙер аҙ килемле ғаиләләр менән эштең яңыртылған моделе индерелде. Ул төп ике йүнәлеште үҙ эсенә ала: ғаилә тәьминәтен әүҙемләштереү буйынса эш һәм аҙ тәьмин ителеүсе ғаиләләргә ярлылыҡтан ҡотолоу буйынса ярҙам ойоштороу, уларҙың үҙтәьминәт кимәлен күтәреүгә өлгәшеү. Мәҫәлән, 2022 йылда 11 "Ғаилә" үҙәктәре нигеҙендә төҙөлөш ҡоралдары һәм техникаһын бушлай биреү пункттары, "Ғаилә ғаиләгә ярҙам итә" тигән 69 үҙ-ара ярҙам төркөмдәре эш башланы; өс үҙәктә ғаилә башлыҡтарына дистанцион рәүештә һөнәри белем алырға, һөнәри оҫталыҡтарын арттырырға, ҡабаттан әҙерлек курсы үтергә мөмкин; шулай уҡ һөнәри йүнәлеш һәм үҙ мөмкинлектәрен һынап ҡарау буйынса 12 төркөм ойошторолдо. Был проекттарҙы Ауыр тормош хәлендә ҡалған балаларға ярҙам фонды бойомға ашырырға булышлыҡ итә. 2022-2023 йылдарҙа аҙ килемле ғаиләләргә социаль ярҙамды арттырыу маҡсатында Башҡортостанға ошо Фонд иҫәбенән 14,7 млн һум аҡса күсереләсәк.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

ҠЫҪҠАСА

# ИҢ УҢАЙЛЫ ҠАЛА

**Өфө 2022 йылда Рәсәйҙә ҡала мөхитенең сифат индексы буйынса тәүге урынау иҫәбенә инде, йәғни йәшәү өсөн иң уңайлы ҡалаларҙың береһе тип танылды.** Был хаҡта, илдең Төҙөлөш министрлығы тикшереүҙәренә һылтанма менән баш ҡала хакимиәтендә хәбәр иттеләр. Ҡала иң юғары 360 балдан 208 балл йыйып, 7-се урынға сыҡты. Эксперттар ҡаланың төҙөклөгө кимәлен хәүефһеҙлек, уңайлылыҡ, экология, оҡшашлыҡ, төрлөлөк һәм башҡа күрһәткестәр буйынса баһаланы, властарҙың яңы парктар һәм скверҙар булдырыу, балалар һәм спорт майҙансыҡтары төҙөү, яр буйҙарын төҙөкләндереү буйынса эшен билдәләне. Рейтингта Рәсәйҙең 1117 ҡалаһы ҡатнашты. Беренсе урында - 299 балл менән Мәскәү. Бынан алда "Башинформ" һуңғы 4 йылда Башҡортостандың сәнәғәт сәйәсәтен тормошҡа ашырыуҙа иң яҡшыһы булыуы, ғилми-технологик үҫеш рейтингында 4-се урын алыуы, милли инвестиция рейтингында иң яҡшы бишәү иҫәбенә инеүе хаҡында яҙғайны.

✓ **Башҡортостанда 9 майҙа үтәсәк "Үлемһеҙ полк" акцияһына әҙерлек әүҙем бара. Өфөлә "Рәсәйҙең Үлемһеҙ полкы" хәрәкәте төбәк штабының киңәйтелгән ултырышы уҙҙы.** Ултырышты Башҡортостандың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова һәм "Рәсәйҙең Үлемһеҙ полкы" хәрәкәтенең төбәк штабы етәксеһе Вадим Курилов алып барҙы. Ултырыш ваҡытында "Үлемһеҙ полк" акцияһын ғәҙәттәге тәртиптә уҙғарыу тураһында ҡарар ҡабул ителде, шулай уҡ республиканың барлыҡ районында сафҡа теҙелеү өсөн бер үк ваҡыт билдәләнде. Быйыл акцияла ҡатнашыусыларҙың бергәләп рус телендә һәм республика халыҡтары телдәрендә "Катюша" йырын башҡарыуы көтөлә. Башҡортостандың барлыҡ ҡала һәм районында һуғыш йылдарындағы легендар "Катюша" йырын күмәкләп йырлау Башҡортостан халҡының берҙәмлеген һәм совет халҡының 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүе хаҡында яҡты хәтерҙе һаҡлау теләген күрһәтергә тейеш.

✓ **Башҡортостандың Транспорт министрлығы 1 апрелдән Берҙәм социаль юл йөрөү билеты (ЕСПБ) буйынса айына юл йөрөүгә сикләү индерҙе.** Хәҙер уның буйынса бер айҙа 90 тапҡыр ғына иҫәпләшергә мөмкин. Бындай аҙымға барыуға карта хужаларының уларҙы икенсе кешеләргә биреп тороуҙары сәбәп булған. Анализ күрһәтеүенсә, ҡайһы бер пассажирҙарҙың айына 400-500 тапҡыр юл йөрөүе асыҡланған һәм был ысынбарлыҡҡа тап килмәй. Үҙгәрештәр ЕСПБ ҡулланған Башҡортостандың социаль картаһы һәм "Алға, Башҡортостан" картаһы эйәләренә генә ҡағыла. Билет хаҡы әүәлгесә - айына 600 һум булаcаҡ. Баш ҡала ЕСПБ менән ҡала электротранспортында, эске һыу һәм аҫылмалы канат юлдарында, шулай уҡ 74, 3, 6, 9, 10, 13, 14, 27, 234, 16А, 22/22а, 24, 30, 30к, 31, 34, 35к, 39, 43, 51/51а, 57, 57а, 69, 75, 75э, 226, 290, 59э, 17с, 15 һанлы автобустарҙа йөрөүсе льготалы категория граждандары файҙалана ала. Ғәҙәти "Алға" транспорт картаһы менән ҡулланыусылар өсөн сикләүҙәр юҡ. Тарифтар элеккесә ҡала: "Башавтотранс" дәүләт унитар предприятиеһы автобустарында юл хаҡы - 28, трамвай, троллейбустарҙа 25 һум.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ТОРЛАҠ МЕНӘН...

**Дәүләт Думаһы 21 мартта махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың ғаиләләрен торлаҡ менән тәьмин итеү тураһында закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте.**

Махсус хәрби операция зонаһына һәм Рәсәйҙән ситкә ебәрелгән хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаилә ағзалары элекке хеҙмәт урыны буйынса торлаҡ менән файҙаланыуын дауам итергә мөмкин. Торлаҡты ҡуртымға алып йәшәйҙәр икән, ғаиләләргә ҡуртым өсөн компенсация һаҡлана. Компенсация күләме хәрби дәрәжәгә, вазифаға һәм хеҙмәттәргә ҡарамай. "Ҡабул ителгән закон проекты - махсус хәрби операция биләмәһендә илебеҙҙе һаҡлау, граждандарҙың именлеген тәьмин итеү өсөн барыһын да эшләгән яугирҙарҙың ғаиләләренә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән тағы бер ҡарар. Уларҙың яҡындары хаҡында хәстәрлек күреү - беҙҙең бурыс, - тип билдәләне Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин. - Был хәрбиҙең ғаиләһе объектив сәбәптәр буйынса уның менән яңы урынға бара алмаған осраҡта кәрәк". Закон милли гвардия ғәскәрҙәре хеҙмәткәрҙәренә лә ҡағыла. "Закон проекты хәрбиҙәрҙе, эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәрен һәм уларҙың ғаилә ағзаларын торлаҡ менән тәьмин итеү йәһәтенән социаль ярҙам сараларын арттырыуға йүнәлтелгән", - тип өҫтәне Оборона буйынса комитет рәйесе Андрей Картаполов.

# СӘЙӘХӘТТӘР КӨТӘ

**2023 йылда Башҡортостанға балалар туризмын үҫтереү өсөн федераль бюджеттан 188,7 миллион һум аҡса бүленә, республика ҡаҙнаһынан өҫтәмә рәүештә 75,5 миллион һум йүнәлтелә, был иһә 37 743 уҡыусы өсөн турҙар ойошторорға мөмкинлек бирер тип көтөлә.**

2022 йылдан республика "Туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ индустрияһы" милли проекты сиктәрендә "Социаль өлкәлә дәүләт (муниципаль) хеҙмәттәр күрһәтеүгә дәүләт (муниципаль) социаль заказы тураһында" федераль законды ғәмәлгә ашырыуҙа әүҙем ҡатнаша. Былтыр республика мәктәп туризмы программаһын бойомға ашырыусы 18 пилот төбәк иҫәбенә инде. Проект ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы, балаларҙың, ата-әсәләрҙең, уҡытыусыларҙың юғары баһаһын алды. 2023 йылда республикабыҙҙа программала ҡатнашыусылар 3 тапҡырҙан ашыуға арттырылды, улар өсөн яңы ҡыҙыҡлы маршруттар һәм экскурсиялар әҙерләнде.

# АЛИМЕНТ ТҮЛӘҮСЕГӘ

**Рәсәй Дәүләт Думаһы алимент түләүҙең яңы тәртибен күҙ уңында тотҡан закон проектын индерҙе.**

Ошо органдың сайтында баҫылған документҡа ярашлы, был сумма бала йәшәгән төбәктәге уртаса йәшәү минимумынан 50 проценттан да кәм булмаҫҡа тейеш. Яҡтарҙың матди йәки ғаилә хәлен һәм иғтибарға лайыҡ башҡа сәбәптәрҙе иҫәпкә алып, өлөштәр күләмен кәметергә йәки арттырырға мөмкин. "Закон проекты баланың ай һайын минималь түләү алыуға хоҡуҡын яҡлай. Алимент түләгән ата-әсә ҡатмарлы тормош шарттарында дәүләт яғынан ярҙам алыу мөмкинлеген тормошҡа ашырырға хоҡуҡлы", - тип билдәләнә документта.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Болон туҡранбашы

❖ Тышҡы яман шештәрҙән (злокачественная опухоль) 2-3 ус болон туҡранбашын (клевер луговой) ҡайнар һыу койоп, 10 минут торорға һәм һыуын түгергә. Йылы төпрәнән 1-2 сәғәтә сылатҡыстар яһарға. Йәйгеһен ошо уҡ маҡсатта яңы йыйылған япраҡтарын бутҡа итеп төйөп ҡапларға була.

❖ Диабет булғанда сәй урынына болон туҡранбашының 2-3 киптерелгән сәскәһен 1 стакан ҡайнар һыуҙа бешереп эсергә ғәҙәтләнергә кәрәк.

### Ҡабаҡ

❖ Биттә пигмент таптары булған осраҡта сей ҡабаҡ орлоҡтары һәм һыуҙы 1:1 нисбәттә килелә төйөргә, килеп сыҡҡан измәгә бал ҡушырға. Шуны биткә һыларға һәм ярты сәғәт торорға. Бит таҙарғансы эшләргә.

❖ Яман шеш (рак) булғанда көнөнә 1-2 стакан ҡабаҡ һутын эсергә, ә йомшағын (мякоть) шешкә ҡаплайҙар. Яман шеш осрағында ҡабаҡ сәскә атҡан мәлдә көн һайын һеркәлә 3-4 сәскәһенән бер юлы ашарға кәңәш ителә.

### Аҡ сирень

❖ Ашҡаҙан полиптарынан аҡ сиреньдең сәскәләре һәм япраҡтары менән бергә 2 ботағын алып, 2 стакан ҡайнар һыу койорға, 10-12 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә. 2 ай дауаланырға. Бының өсөн аҡ сиренде алдан киптереп әҙерләп ҡуйырға.

### Ҡара әрем

❖ Үпкә туберкулезынан 50 грамм кипкән ҡара әрем (чернобыльник) тамырына 2 литр аҡ йөҙөм шарабы ҡойорға, ауыҙын ябып 10 минут ҡайнатырға һәм 1 стакан бал ҡушырға. Һыуынғас, һөҙөргә һәм иртәнсәк ас ҡарынға 1 стакан эсергә. Йәки көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-әр ҡалаҡ эсергә була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Башҡорттарҙа ла аҡыҡтың сихри көскә эйә булыуына ишара яһаусы ышаныуҙар элек-электән йәшәй. Халыҡ был ташты күҙ тейеүҙән, йыландан, үлемдән һаҡлаусы тип ҡабул итә.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Аҡыҡ

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүестәрендә йыш осраған материалдарҙың тағы береһе - ҡыҙыл йәки ҡыҙғылт һары төҫтәге аҡыҡ (ғәрәп теленән үҙләштерелгән һүҙ). Ҡайһыларын селтәр, һаҡалдарға тағылған сулпыларҙың ҡашында күрергә мөмкин булһа, икенселәре түңәрәк, йәки йөрәк формаһында эшкәртелгән рәүештә беркетелгән. Борондан донъялағы күп кенә халыҡтар был таштың сихри көсөнә ышанып, уны биҙәнеү әйберҙәрендә ҡулланыр булған. Мәҫәлән, хәҙерге Пакистан ерендәге ете мең йыллыҡ тарихлы боронғо ултыраҡта аҡыҡ муйынсаҡтар табыла. Шумер-аккад мифологияһы буйынса аҡыҡ - мөхәббәт һәм муллыҡ алиһәһе Иштарҙың ташы. Ғөмүмән алғанда, донъя халыҡтарының күбеһе борондан уҡ был ташты сихырҙан, яуыз көстәрҙән, ауырыуҙарҙан һаҡлаусы итеп ҡабул иткән. Төҫөнә ҡарап уны Ҡояшҡа яҡын тип иҫәпләгәндәр. Тарихсылар билдәләүенсә, аҡыҡтар беҙҙең төбәктәргә йышыраҡ Һиндостандан Урта Азия аша сауҙа юлы менән килеп еткән.



Күренекле археолог Нияз Мәжитов боронғо ултыраҡтарҙа табылған әйберҙәргә нигеҙләнеп, X-XI быуаттарҙа башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының аҡыҡтан эшләнгән муйынсаҡтарҙы күпләп ҡуллана башлауын һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Башҡорттарҙа ла аҡыҡтың сихри көскә эйә булыуына ишара яһаусы ышаныуҙар элек-электән йәшәй. Халыҡ был ташты күҙ тейеүҙән, йыландан, үлемдән һаҡлаусы тип ҡабул итә. Шуға күрә лә ҡурсалау маҡсатынан йәш килендәргә аҡыҡ ҡашлы йөҙөк, беләҙек йөрөтөргә ҡушҡандар. Мәҫәлән, "Ҡыҙ оҙатыу йолаһы" барышында ҡыҙ үҙенең сеңләүҙәрендә йыш ҡына аҡыҡты телгә ала:

Аҡ сепрәккә төргәнең
Аҡыҡ ҡына инеме, атаҡайым?
Аҡыҡ ҡына кеүек һатып бирҙең,
Артыҡ ҡына инемме, атаҡайым?
Аҡыҡ ҡына аҡыҡ йөҙөгөмдө
Һандыҡ төпкәйенә һалығыҙ.
Тыуған илдән китеүҙәре ауыр
Көйҙәремде тыңлап ҡалығыҙ.

Был таштың халыҡ ырымдарында сағылыш табыуы - уның сихри көскә эйә булына көслө ишара. Мәҫәлән, күҙгә аҡ төшһә, аҡыҡ төймә, йөҙөк ҡулланылған. Үткер бысаҡ менән аҡыҡты ҡырып, уның онтағын аҡ төшкән күҙгә һалғандар. Йәки аҡыҡты кешенең баш кейеменә күҙ тапҡырына тегеп ҡуйғандар. Тағы бер ысулы түбәндәгесә: аҡлы аҡыҡты (аҡ таптары булған) еп менән сырмайҙар. Һәр бер урауҙы төйөн менән нығыталар. Һөҙөмтәлә барлығы 41 төйөн килеп сыға. Бәйләгән ваҡытта махсус доғаһын уҡыйҙар. Һуңынан бындай аҡыҡты ҡулға кейҙереп ҡуялар. Ышаныуҙар буйынса ул күҙҙең ағын бөтөрә. Үрҙә килтерелгән ырымдарҙан күренеүенсә, был таш ғәҙәттә күҙ ауырыуҙарын дауалауҙа ҡулланылған. Әйтергә кәрәк, аҡыҡтың даулау үҙенсәлектәрен күренекле академиктар Н. Бурденко, П. Зелинский һәм В. Вернадскийҙар ҙа инҡар итмәй.

Тимәк, был аҫылташтың башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары биҙәүестәрендә йыш урын алыуы осраҡлы ғына күренеш түгел. Ул йолаға әүерелеп, селтәр, һаҡал, яғаларҙың айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнеп киткән.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Баш ҡаланың Йәштәр һарайында Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы үҙенең алтын юбилейын билдәләне. Белем усағын БР мәғариф һәм фән министры урынбаҫары Инесса Косолапова, Киров районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Адик Фәтхуллин, РФ "Сауҙа берҙәмлеге" профсоюздарының Башҡортостан төбәк бүлексәһе рәйесе Айҙар Ахунйәнов, БР Кулинарҙар, рестораторҙар һәм отельерҙар ассоциацияһы рәйесе Наталья Чибрикина тәбрикләне.**

# ЗАМАНСА ҺӨНӘР...

## ошо уҡыу йортонда бирелә

1972 йылдың 24 февралендә РСФСР Сауҙа министрлығы бойороғо буйынса асылған Өфө Совет сауҙаһы техникумы ярты быуат эсендә төрлө осорҙар кисерә. Тәүҙә унда ни бары өс кенә һөнәргә уҡытыла: Йәмәғәт туҡланыуы продукцияһы технологияһы, Тауар белегесе, Иҡтисад һәм бухгалтер иҫәбе. Эш башлауының тәүге ике йылында уҡыу биналары ҡуртымға алынһа, 1974 йылда уның үҙенең бинаһы ишектәрен аса. Тағы ла ике йылдан һуң инде студенттар өсөн ятаҡ төҙөлөп бөтә, уҡыу-производство ашханаһы төҙөлә башлай. Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, совет йылдарында һәүетемсә генә эшләгән уҡыу йортона заман менән бергә атларға тура килә - унда коммерция, хоҡуҡ белгесе, менеджмент, маркетинг, ҡунаҡхана эшмәкәрлеге һ.б. буйынса яңы специальностар, хатта республикала иң беренсе булып студенттарҙың бизнес-клубы асыла. Әлеге ваҡытта Сибай һәм Нефтекама ҡалаларында колледждың филиалдары эшләй.

- Үҙенең ярты быуатлыҡ юлын уҡыу йорто Рәсәйҙең урта һөнәри белем биреү өлкәһендә лидер, өлгө булып ҡаршылай, сөнки былтыр беҙ методикалар буйынса федераль пилот майҙансығы булараҡ, Рәсәйҙә икенсе урын яуланыҡ, - **тип уңыштарҙы барлай колледж директоры Ришат Сабитов.** - Шулай уҡ былтыр "Рәсәйҙең иң яҡшы колледжы" конкурсында беренсе урынға лайыҡ булдыҡ. Беҙҙең иң ҙур ҡаҙанышыбыҙ - ул төбәк иҡтисадында үҙ урынын тапҡан һәм юғары кимәлле белгес булып киткән сығарылыш студенттары. Барлыҡ уңыштарына колледж ошо йылдар эсендә педагогик коллектив хеҙмәткәрҙәренең көндәлек эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә өлгәште. Бөгөн Өфө сауҙа-иҡтисад колледжында иң яҡшы студенттар белем ала. Улар үҙҙәренең һәр яҡлап алдынғы икәнен даими иҫбатлап тора. Ошо көндәрҙә беҙҙең команда бизнес буйынса Бөтә Рәсәй конкурсының көмөш миҙалын яуланы. Спортсыларыбыҙ спорттың күп төрҙәре буйынса пъедесталдың юғары баҫҡыстарын биләй. Ансамблдәребеҙ республикалағы 96 колледж араһында алдынғылыҡты бирмәй.

Билдәләнеүенсә, бөгөн Өфө сауҙа-иҡтисад колледжында 8 йүнәлеш буйынса 1600 студент уҡый, уларға 83 педагог белем һәм тәрбиә бирә. Мәғариф учреждениеһы иҡтисад, коммерция, ҡунаҡсыллыҡ тармаҡтары буйынса хеҙмәт баҙарында ихтыяж булған белгестәр әҙерләй. Һуңғы ике йылда уҡыу йортонда донъя стандарттарына тап килгән туризм, иҡтисад һәм бухгалтер иҫәбе, банк эше, отель администраторы, ресторан сервисы, кондитер эше, эшҡыуарлыҡ буйынса 7 оҫтахана булдырылған. Колледж республиканың "Байрам", "Лента", "Ашан" сауҙа үҙәктәре, "Башспирт" предприятиеһы, "Президент отель", "Азимут-Отель" отелдәре, "Дуҫлык", "Премьер" рестораннары, "Капитал Медстрахование", "Росгосстрах" страховка компаниялары, Росимущество, Росреестр идаралыҡтары, "Баштур Плюс", "CoralTravel" туристик компаниялары, "Открытие" һәм "Уральский банк реконструкции и развития" банкылары кеүек уңышлы ойошмалар менән хеҙмәттәшлек итә.

- Беҙҙең ресторан бизнесы менән Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы араһындағы ныҡлы бәйләнешкә бары тик көнләшергә генә мөмкин, сөнки ошо дуҫлыҡ хаҡында Рәсәйҙәге коллегаларыма һөйләһәм, күптәр, ысынлап та, көнләшә, - **тип һөйләне БР Кулинарҙар, рестораторҙар һәм отельерҙар ассоциацияһы рәйесе Наталья Чибрикина.** - Тағын шуны билдәләп китер инем: бындай уҡыу йорто менән эшләү - үҙе бер бәхет һәм ҡәнәғәтлек бирә. Сөнки улар менән эшләүе рәхәт, үҙҙәре теләгәндәр менән генә эшләүе еңел һәм уңышҡа өлгәшеп була. Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы һәр саҡ нимәлер теләй. Уҙған һәр йылды алдағыһы менән сағыштырғанда һәр саҡ эшмәкәрлеге киңәйә бара, һәр саҡ яңылыҡҡа ынтылалар, һәр саҡ алға баралар...

Эйе, ошо хеҙмәттәшлек һәм ҡулланылған башҡа саралар комплексы арҡаһында сығарылыш студенттарының 85 проценты бер ҡыйынлыҡһыҙ эшкә урынлаштырыла. Был ҡаҙаныштарҙы колледждың 2009 йылдан алып республика һәм Рәсәй кимәлендә яулаған еңеүҙәре, "100 иң яҡшы ссуз" Европа сифат билдәһе лә раҫлай. Бына шулай, 50 йыл дауамында колледж коллективы иң ауыр мәсьәләләрҙе хәл иткән һәм бөгөн дә кәрәкле сиселештәр тәҡдим итергә һәләтле.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

АРҘАҠЛЫЛАРЫБЫҘ

# МӨХӘМӘТХАН ҠУЛАЕВ

**Быйыл февраль айында Башҡортостан Республикаһына нигеҙ һалыусыларҙың береһе, күренекле башҡорт эшмәкәре, табип, телсе Мөхәмәтхан Сәхипгәрәй улы Ҡулаевтың тыуыуына 150 йыл тулды.**

Мөхәмәтхан Ҡулаев 1873 йылдың 7 февралендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы) Ейәнсура ауылында тыуған. Тәүҙә ауыл мәҙрәсәһендә, артабан рус-башҡорт мәктәбендә уҡый. 1895 йылда Ырымбур гимназияһын алтын миҙалға тамамлай. 1897-1902 йылдарҙа Ҡаҙан университетының медицина факультетында уҡый. Университетта уҡыған йылдарында урыҫ ҡыҙы менән танышып, өйләнергә була. Әммә ҡыҙҙың атаһы М. Ҡулаевҡа христиан диненгә күсергә - урыҫ исемен алырға тигән шарт ҡуя. Ошо осорҙан алып Мөхәмәтхан Ҡулаевтың рәсми исеме Мстиславҡа әйләнә (Ҡайһы бер сығанаҡтарҙа университетҡа христиандар ғына ҡабул ителгәнгә күрә исемен алыштыра, тигән ҡараш бар). Университетты тамамлағандан һуң, Ҡаҙан губернаһының Кесе Илсекәй ауылында земство врачы булып эшләй, һуңынан Ҡаҙан ҡалаһынаң Александр дауаханаһына күсә.

1913 йылда Варшава ҡалаһына эшкә күсерелә. Беренсе донъя һуғышы башланғас, 1914 йылдың октябренән



Көньяҡ-Көнбайыш фронтта ялан госпиталенең начальнигы - баш врачы булып хеҙмәт итә. 1917 йылда революциянан һуң Ҡаҙанға ҡайтып, врач булып эшләй. 1918 йылдың авгусында Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушылып китә. Уны Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәтенә баш врач итеп тәғәйенләйҙәр. Оҙаҡламай хөкүмәт составына индерелә. Сентябрь айында Ҡулаев башҡорт йәштәренең "Тулҡын" ойошмаһын тергеҙеүҙә ҡатнаша.

1918 йылдың ноябрендә Колчак власҡа килеү менән хәлдәр ҡатмарлашҡас, Башҡорт хөкүмәте рәйесе вәкәләттәре Мөхәмәтхан Ҡулаев ҡулына тапшырылған булһа кәрәк. Документтар ошо хаҡта һөйләй. Омскиҙа Колчак хөкүмәте менән һөйләшеүҙәр алып барған юрист Искәндәр Солтанов 1918 йылдың 14 ноябрендә Ырымбурға: "Готовятся назначить главноуполномоченного для ликвидации нашего дела башкирской автономии. Приезд доктора желателен", - тип телеграмма һуға. Оҙаҡламай М. Ҡулаев Омскиға китә. "Доктор Кулаев, генерал Ишбулатов, Султанов и Ишмурзин еще до сих пор не вернулись. Они пишут о плохом положении Колчака", - тип яҙа 1918 йылдың 14 декабрендә Зәки Вәлиди. Омскиҙан ҡайтҡас, Мөхәмәтхан Ҡулаев, 1919 йылдың ғинуарында, рәсми рәүештә Башҡорт хөкүмәтенең рәйесе итеп һайлана.

Хәҙер инде ул Советтар менән һөйләшеүҙәргә етәкселек итә. 1919 йылдың 18 февралендә Ҡулаев етәкселегендәге Башҡорт хөкүмәте делегацияһын (М. Халиҡов, Ә. Бикбаув) Өфөлә Республиканың Реввоенсоветы, губерна ком-

✔ ***Көньяҡ Себерҙең һәм Ҡаҙағстандың йәнәш ятҡан районлары ҡурғандарында табылған баҡыр-бронза әйберҙәрҙең химик составын анализлау уларҙың күбеһенең Көнсығыш Уралда (Иткүлдә) етештерелеүен раҫланы.***



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Өсөнсө бүлек. Иртә тимер эпохаһы



Ағиҙел йылғаһының урта ағымы бассейнындағы ананьин ҡомартҡылары материалдарының үҙенсәлекле булыуы археологтарға уларҙы үҙаллы ҡараабыҙ мәҙәниәте (б.э. тиклем V - б.э. II быуаттар) сифатында өйрәнеү маҡсатка ярашлы, тип раҫлау мөмкинлеген бирә. Беҙҙең ҡарамаҡҡа, б.э. тиклем V - III быуаттарҙағы ҡомартҡыларҙың ҡараабыҙ төркөмөн берҙәм ананьин мәҙәниәтенең урта Ағиҙел (среднебельский) варианты тип нарыҡлау дөрөҫөрәктер. Шул уҡ ҡомартҡылар, әммә б.э. тиклем II быуаттан б.э. II быуатына тиклемге арауыҡта, Урта Кама һәм Ағиҙелдең түбәнге ағымы буйындағы синхрон ҡомартҡыларҙан әллә ни айырылмай тиерлек, һәм уларҙы пьянобор мәҙәниәте сиктәрендә ҡарау фарыз.

Ҡәберлектәр материалдары ҡараабыҙ ҡәбиләләрендә үҫешкән баҡыр һәм бронза металлургияһы булыуын раҫлай. Был уларҙа үтә матур бил ҡайыштарының, күкрәк биҙәүестәренең, сәсмәүҙәрҙең (сулпы), күлдәк итәктәренә тегелгән киң бронза пластиналарҙың, тишекле мәрйендәрҙең, шулай уҡ сымдан эшләнгән беләҙектәрҙең, алҡаларҙың, ҡолаҡҡа тағыла торған асмаларҙың күпләп таралыуынан беленеп тора. Ҙур бронза көҙгөләр, таралғы-ҡаптырмалар һәм башҡа предметтар киң ҡулланылышта була. Ҡәберлектәрҙә быяла мәрйендәрҙән эшләнгән муйынсаҡтар күп, улар көньяҡтан килтерелгән. Уларҙың Уралға сауҙа итеү һөҙөмтәһендә алып килинеүе шик тыуҙырмай. Ҡараабыҙ ҡәбиләләре мәҙәниәтенең бер үҙенсәлеге булып бында ҡоралдарҙың бай йыйылмаһы табылыуын атарға була - улар бронзанан, тимерҙән эшләнгән; уҡ башаҡтары һөйәктән, һөңгө остары һәм ҡылыстар - тимерҙән.

Әйтергә кәрәк, иртә тимер быуатында ике тарихи-хужалыҡ өлкәләренең - дала зонаһындағы күсмә малсылыҡтың һәм урман-дала зонаһындағы малсылыҡлы ултыраҡ ер биләүҙең барлыҡҡа килеүе барса тарихи дәүерҙәрҙә, XX быуат баштарына тиклем уҡ, Көньяҡ Урал халыҡтарының ижтимағи-сәйәси һәм этномәҙәни үҫешенең иң мөһим факторҙарына әүерелә.

### Иртә тимер быуаты эпохаһындағы Көньяҡ Урал аръяғы ҡәбиләләре

Һуңғы 2-3 тиҫтә йыл арауығында Көньяҡ Урал аръяғы ҡәбиләләренең мәҙәниәте һәм көнкүреше хаҡындағы белемдәребеҙ Силәбе археологтары коллективынын барса эпохаларға ҡараған ҡомартҡыларҙы комплекслы рәүештә өйрәнеү буйынса уңышлы эшләүе һөҙөмтәһендә ныҡлап тулыланды. Көньяҡ Урал аръяғы ҡәүемдәренең һәм уларға йәнәш йәшәгән Көнбайыш Себер халыҡтарының тарихы һәм мәҙәниәте Көнбайыш Урал буйындағыларҙың хәл-торошона оҡшаш үҫешкән. Ошо төбәк ҡәбиләләренең этник составы шулай уҡ бик сыбар була. Мәҫәлән, б.э. тиклем VII - II быуаттарҙа Урал тауҙарының үҙәк һырты һәм көнсығыш итәктәрендә иткүл мәҙәниәте ҡәбиләләре йәшәгән, уларҙан дүрткел һәм овал формалы ярым ер өйҙәрҙән һәм ер өҫтөнә бүрәнәнән һалынған өйҙәрҙән төҙелгән ҡаласыҡтарҙың һәм асыҡ торлаҡтарҙың ҡалдыҡтары тороп ҡалған.

Уларҙа хужалыҡ итеүҙең төп йүнәлеше - көтөүлә малсылыҡ. Бер нисә иткүл торлағында металлургия производствоһы эҙҙәре - ҡойоу формалары, улар өсөн яһалған матрицалар табылыуына иғтибар итергә була. Тимәк, иткүл ҡәбиләләрен бронза эпохаһының үҫешкән баҡыр һәм бронза металлургияһының туранан-тура вариҫтары итеп ҡарап була. Көньяҡ Себерҙең һәм Ҡаҙағстандың йәнәш ятҡан райондары ҡурғандарында табылған баҡыр-бронза әйберҙәрҙең химик составын анализлау уларҙың күбеһенең Көнсығыш Уралда (Иткүлдә) етештерелеүен раҫланы. Тимәк, иткүлселәр үҙҙәренең көньяҡ күршеләренең металға мохтажлығын ҡәнәғәтләндерә алған.

Б.э. тиклем VI - I быуаттарҙа Өфө (Ҡариҙел), Исәт, Мейәс, Уй, Тубыл һәм Ишем йылғалары бассейнында горохов мәҙәниәте ҡәбиләләре йәшәгән. Гороховсыларҙың көнбайыш сиктәре Йүрүҙән, Әй һәм Ҡариҙел (Өфө) йылғаһының урта ағымы тарафтарына тиклем килеп еткән. Шулай булғас, горохов ҡәбиләләре Урал тауҙарының үҙәк һырты һәм көнсығыш итәктәрендә урындағы иткүл мәҙәниәтенә ҡараған ҡәүемдәр менән яҡын күрше булып йәшәп, бындағы ҡатнаш халыҡты хасил иткән.

Горохов мәҙәниәте ҡомартҡылары ҡаласыҡтар, ҡасабалар һәм ҡурған ҡәберлектәре рәүешендә билдәле. Уларҙың торлаҡтары ярым ер тибындағы квадрат, дүрт мөйөшлө һәм трапеция формаһындағы, башлыса, коридор кеүегерәк итеп эшләнгән сығыу урындары булған өйҙәрҙән торған. Тикшеренеүселәр ҡайһы бер ҡаласыҡтарҙың оборона һыҙыҡтары системаһының камилыраҡ булыуына иғтибар итә: ҡаласыҡ ҡапҡалары алдындағы валдар һәм йырындар яҡшыраҡ нығытылған, уларҙың периметры буйлап алғараҡ сығып торған башня рәүешендәге бастиондар ҡоролған була.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**
**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 2022 йылдың 28-се һанында).**

мунистары, 5-се армия Реввоенсоветы һәм Наркомнац вәкилдәре менән һөйләшеүҙәр үткәрә. Артабан һөйләшеүҙәр Көнсығыш фронттың штабына, Сембер ҡалаһына күсерелә. Бында, 1919 йылдың 27 февралендә, башҡорт вәкилдәре һәм Көнсығыш фронттың Реввоенсовет вәкилдәре менән тәүге (предварительный) килешеү төҙөлә. Артабан Башҡорт хөкүмәте делегацияһы Мәскәүгә юллана. Бында килешеү барышына Зәки Вәлиди ҙә ҡушыла. Мөхәмәтхан Ҡулаев менән Вәлиди Ленинға инеп, автономия мәсьәләләре тураһында һөйләшеп сыға. "...Мәскәүҙә (2-6 марта) Коминтерндың Икенсе конгресы йыйылырға тейеш булған. Лениндың ысынлап та бик мәшәҡәтле ваҡыты. Сит мәмләкәттәрҙән күп делегация килгән. Шулай ҙа Сталин миңә бер көн телефон аша шылтыратып, һеҙҙе Ленин күрергә теләй, үҙегеҙ менән бергә бер-ике иптәшегеҙҙе лә алығыҙ, тине. Хөкүмәт рәйесебеҙ доктор Ҡулаев менән бергә киттек. Ул ошо көндәрҙә Семберҙә көнсығыш фронт командалығына солох төҙөү һөйләшеүҙәренән ҡайтып төшкәйне. Ҡулаев бала сағынан рус миссионерҙары ҡулына эләгеп, христиан мөхитенә йәлеп ителеп, христианлаштырылған башҡорт. Беҙ уға ысын исеме менән Мөхәмәтхан ағай тип өндәшә торғайнык, үҙе лә шуны теләне. Әммә рәсми исеме менән Мстислав Кулаев тип имза ҡуя ине... Ленин өҫтәл артынан сығып, ҡул һуҙып күреште... Доктор Ҡулаевтан: "Иптәшегеҙҙең исеме Әхмәтзәки, ә ни өсөн һеҙҙең исемегеҙ Мстислав?"- тип һораны. Ҡулаев: "Мин христиан башҡорт", - тип яуап бирҙе. Ленин: "Дин алыштырыуығыҙ арҡаһында халҡығыҙ менән мөнәсәбәтегеҙ боҙолманымы? Дин алмаштырмай ғына атеист булыу яҡшыраҡ түгелме?" - тип һораны. Ҡулаев уңайһыҙланды, аныҡ яуап бирмәне", - тип яҙа үҙенең хәтирәләрендә Вәлиди.

1919 йылдың 20 мартында Үҙәк Совет хөкүмәте менән Башҡортостан хөкүмәте араһында Башҡортостан Совет автономияһы тураһында килешеү төҙөлә. Килешеүгә Башҡорт хөкүмәте исеменән Мөхәмәтхан Ҡулаев, Муллайән Халиҡов һәм Әбдрәшит Бикбаувтар ҡул ҡуя.

Мәскәүҙән ҡайтҡандан һуң Ҡулаев Башревкомда эшләй. 1919 майынан, Саранскиҙа Башревком рәйесе урынбаҫары вазифаһын башҡара. Июнь айында Ҡулаевты Саранскиҙан Ҡаҙан ҡалаһына, мосолман эшмәкәрҙәрен Башҡорт республикаһына эшкә саҡырырға ебәрәләр. Әммә ул бында ауырып китеп, үҙенең өҫтөнә һалынған бурыстарҙы үтәй алмай. Һуңынан инде Башревкомға килеп тормай, Ҡаҙанда эшкә төшә. Ошонан менән дәүләт эштәренән бөтөнләй китә. Шулай ҙа Мөхәмәтхан Ҡулаев һәр саҡ бөтөн күңеле менән туған халҡы, Башҡортостаны өсөн янып йәшәй. Тел өлкәһендәге ғилми эштәрен дауам итә. 1928 йылда "Твёрдый алфавит башкирского языка" исемле хеҙмәтен Ҡаҙан ҡалаһында баҫтырып сығара, 1930 йылда - "Башҡорт теленең ҡылымдары тураһында" ("О глаголах башкирского языка") исемле хеҙмәте донъя күрә.

Мөхәмәтхан Ҡулаев ғүмеренең һуңына тиклем Ҡаҙан ҡалаһында йәшәй, табип булып эшләй. Медицина буйынса докторлыҡ диссертацияһы әҙерләй, әммә яҡлай алмай. 1958 йылда ошонда вафат була. Үҙе үлер алдынан бай мираҫын Башҡортостанға ҡайтарырға васыят итә. Бөгөн уның хеҙмәттәре Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты архивында һаҡлана. Уның хеҙмәттәре, башҡорт теленең ул туплаған бай ауыҙ-тел ижады өлгөләре ғалимдар өсөн ҙур хазина булып тора.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**тарихсы.**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

7-се гв. атлы корпусына яңы командир - генерал-майор Михаил Петрович Константинов тәғәйенләнә. Ул Белоруссия фронты командующийы, армия генералы К.К. Рокоссовскийҙан корпус частарын 65-се армия ҡарамағына ебәреүҙе һорап мөрәжәғәт итә. 65-се армия биләгән киң плацдарм артабан Речица йүнәлешендә немец оборонаһын емереп, алға барыу өсөн унайлыраҡ була. 7-се гв. кавкорпус командирының тәҡдиме ҡабул ителә, кавкорпус маршҡа ҡуҙғала, 22 октябрҙә 16-сы гв. атлы дивизияһы ла яңынан Днепрҙың уң яҡ ярына сыға һәм Прогресс исемле ауыл янындағы урманға инә. 30 октябрҙә дивизия полктары Красная Ветка - Липняки - Восход - Возок ауылдары рубежында оборона позицияларын нығыта. Дивизия бында 10 ноябргә - Гомель-Речица һөжүм итеү операцияһына тиклем оборонала тора.

60-сы гв. атлы полкы командиры, гв. подполковнигы И.Ф.Горлатов шәхси составтың дөйөм йыйылышын уҙғара, һалдат һәм офицерҙарға фронт хәлдәре хаҡында һөйләй, алда торған бурыстарҙы аңлата. Командирҙың сәйәси бүлек буйынса урынбаҫары Шакир Насир улы Закиров яугирҙар исеменән тылдағыларға хат менән мөрәжәғәт итергә тәҡдим итә. Ошо хатҡа һалдат вәкилдәре ҡул ҡуя. "Чернигов һәм Днепр өсөн яуҙарҙа беҙ гвардия байрағына тап төшөрмәнек, уны ғорурлыҡ менән алып барҙыҡ, боевой традицияларҙы күбәйттек. Беҙ унар меңләгән совет кешеләрен фашист ҡоллоғонан азат иттек. XX быуат кеше ашаусылары тарафынан индерелгән "яңы тәртипте", аҫып үлтерелгән совет патриоттарын, етем ҡалған балаларҙы күреп, беҙ үҙ еребеҙҙе фашист емтектәренән тиҙерәк таҙартырға ант иттек... Беҙ һеҙҙең менән бергә еңеүгә өлгәшербеҙ. Һеҙҙең хеҙмәт фронтындағы уңыштарығыҙ, Ҡыҙыл Армия өсөн кәрәк булған барса нәмәне етештереүҙә ҡатнашыуығыҙ беҙҙе героик көрәшкә рухландыра", - тип яҙа тыуған яҡтарына ут-һыуҙарҙы үтеп сыныҡҡан батыр яугирҙар.

### Шайморатовсылар - Гомель-Речица операцияһында

1943 йылдың 6 октябренән совет ғәскәрҙәре Невель ҡалаһынан Припять йылғаһы тамағына тиклемге 550 саҡрымлыҡ арауыҡта дошһәтле һөжүм башланы. Калинин фронты армиялары Прибалтика фронты ғәскәрҙәре менән Витебск йүнәлешендә дошманға ябырылды. Көнбайыш фронты яугирҙары көнсығыштан Орша һәм Могилев йүнәлешендә, көньяҡтан, Гомель һәм Бобруйскка табан, Үҙәк фронт (ул 20 октябрҙән Белоруссия фронты тип атала башлай) ғәскәрҙәре хәрәкәт итә. Фашист Германияһы етәкселәре оккупацияланған Белоруссияны юғалтыуҙы үҙҙәре өсөн ни тиклем үлемесле булыуын аңлай, әлбиттә. Улар һәр яҡлап бындағы оборона һыҙығын нығыта, ғәскәр һәм ҡорал туплай. Октябрь баштарына немец командованиеһы ошо йүнәлештә, "Үҙәк" тип аталған армиялар төркөмөндә, 70 дивизия тота, ә Невель ҡалаһы районында "Төньяҡ" армиялары төркөмөнә ҡараған 5 дивизия оборонала тора. Дошман совет ғәскәрҙәренең ҡеүәтле һөжүмен нисек итеп булһа ла тотҡарларға тырыша. Хатта бәләкәй генә ауылдар ҙа нығытылған оборона пункттарына әйләндерелә, совет ғәскәрҙәренең төп һөжүм итеү йүнәлештәренә артиллерия һәм танкылар күпләп килтерелә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Унда ауыл советы ла ҡыҫыла алмай, сөнки шәхси милек, шул уҡ ваҡытта уны милек хужаһы ла ҡарамай, ташландыҡ итеп тота. Әгәр кеше үҙенең йортон ҡарамай икән, ул кешегә штраф та һалып була.***

# ТЫУҒАН АУЫЛЫҢДА...

## үҙ йортоң булһын!

**2021 йылдың мартында республикала "Атайсал" проекты эшләй башланы. Ул тыуған ауылдарынан ситтә йәшәгән кешеләрҙе атайсалына ярҙам итеү, төрлө саралар үткәреүҙә ярҙам күрһәтеү, йәштәр күңеленә илһөйәрлек һәм бәләкәй ватанына һөйөү тойғолары һалыу һәм фекерҙәштәрҙе бер ҡорға туплау маҡсатынан булдырылғайны.**
**Бер ни тиклем ваҡыттан һуң проект нигеҙендә республика зоналары буйлап "Атайсал - яҡташлыҡ көсө" тип аталған форумдар уҙғарыла башланы. Уның бишенсеһе ошо көндәрҙә Мәләүез ҡалаһында үтте. Сарала РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф БАЙҒУСҠАРОВ та ҡатнашты һәм үҙенең фекерҙәрен беҙгә лә еткерҙе.**

**"Атайсал" проекты, ғөмүмән атайсал - һеҙҙең өсөн нимә ул?**

- Атайсал - ул һинең кендек ҡаның тамған ер, ә ошо атамалы проект - ул тыуған яғыңды яратыу, уға ҡулыңдан килгәнсә ярҙам итеү, тәү тәпәй баҫҡан ереҢ менән элемтәне өҙмәү, атай-әсәйең, олатай-өләсәйҙәрең мәңгелек йорт тапҡан урынды ҡәҙерләп тороу. Проекттың шулай рәсми булдырылыуы, ул, әлбиттә, ошо әйткәндәрҙе бер системаға һалып, ошо йүнәлештә эшмәкәрлек алып барған кешеләрҙе берләштереү, йүнәлеш биреү. Мәҫәлән, мин ауылым өсөн күп нәмә эшләһәм дә, проектта теркәлеү үтмәгәйнем. Теркәлеү ни өсөн кәрәк? Яуап шундай: бәләкәй эштәрҙе үҙең дә башҡарһаң, күләмле эштәр өсөн яҡташтарыңды, ауылдаштарыңды йәлеп итә алаһың.

Ғөмүмән алғанда, атайсалыңды яратыу һәр кемдең ҡанында булырға, уның булмышында ятырға тейеш. Үҙенең тыуған яғын, тамырҙарын онотҡан кешеләрҙе аңлап етмәйем, улар, бәлки, үҙҙәрен зат-ырыуһыҙ робот кеүек тоялрҙыр, ғаиләлә тыуған төйәккә һөйөү тәрбиәһе алып етмәгәндәрҙер.

Ҡайһы берәүҙәр ошо проект буйынса нимәлер эшләһәң генә һинең тыуған яғыңа ярҙамың иҫәпкә алына, тип уйлап яңылыша. Минеңсә, был проекттың даирәһе күпкә киңерәк. Минең бер дуҫым бар, әлеге ваҡытта ул Свердловск өлкәһенең губернатор урынбаҫары - Азат Сәлихов. Сығышы менән Мәләүез районынан. Төрлө мәсьәлә буйынса халыҡ мөрәжәғәт иткәс, ҡайһы ваҡыт уға шылтыратһам, ул яҡташтарына ихлас ярҙам ҡулы һуҙа. "Тыуған яҡ бит - ул минең туғандарым, минең яҡташтарым", - тип тора. Уның был ғәмәлдәре лә атайсал проектына инә бит.

**Кешене нимәгәлер ылыҡтырыу, артыңдан эйәртеү өсөн тәүҙә үҙең өлгө булып торорға, эш күрһәтергә тейешһең, юҡһа, улар барыһын да буш һүҙ, тип баһалай. Һеҙ үҙегеҙ атайсалығыҙ өсөн шәхсән нимәләр эшләнегеҙ?**

- Мин үҙем тыуған ауылыма ҡайтып йөрөйөм. Бәләкәй генә төпкөл ауыл, 20-ләп кенә өй бар. Унда бер ваҡытта ла мәктәп тә, магазин да, ғөмүмән, бер ниндәй социаль объект та булманы һәм әле лә юҡ, перспективаһыҙ ауыл тип һанала. Һирәк кенә ҡайтып йөрөгәндә лә, емерек, буш торған өйҙәр эсте бошора ине. Шунда өс йыл элек ауылдаштарымдан кемдер: "Бына ошо емерек өйҙә һинең ҡартайыңдың атаһы йәшәгән", - тине. Мин уны белмәй инем, атайым мәрхүм дә ул турала һөйләмәне. 15-20 йыл буш торған урынды ҡарағура, ағас баҫып бөткәйне. Шунан шул емерек өйҙөң хужаһын табып, унан һатып алып, өйөн емереп, урынына яңы өй ултыртып ҡуйҙым. Былтыр ноябрҙә генә төҙөп бөттөм. Хәҙер был урын төҙөкләнеп, матурланып китте. Кемдер был эште "Атайсал" проектына кермәй, ул үҙе өсөн эшләгән, тип уйлай. Ә нишләп кермәһен, ти?

**Минеңсә, тәү сиратта, һәр кеше үҙенең тыуған ауылына ҡайтып, ата-олатайҙар нигеҙендә өй һалып, туғандарының иҫке йортон ремонтлап ҡуйһа йәки емерелгән кәртәһен яңыртып тотһа - был да атайсал өсөн эшләнгән изге эш бит. Бер өйҙө матурлап, кәртәләп ҡуйһаң да ул ауылға йәм бирә, ҡот өҫтәй. Ә һин ошо ғәмәлең менән тыуып-үҫкән ереңә бурысыңды ҡайтараһың, тәрбиәләп үҫтергән ата-әсәйеңә рәхмәтеңде белдерәһең. Минең ҡарамаҡҡа, атайсалға изге ғәмәлдәр шундай була. Әгәр һәр кем атайсалын йөрәгендә йөрөтөп, уны бар күңеленән яратһа, беҙҙең ауылдар етемһерәп ҡалмаҫ, уларҙа ташландыҡ йорттар булмаҫ ине.**

Мәләүездә үткән форумдағы сығышымда ла әйттем: райондарға эште шунан башларға кәрәк - тәү сиратта ошо ташландыҡ, ҡаралмаған өйҙәрҙең хужаларын, ҡасандыр унда йәшәгән кешеләрҙең варисҙарын табырға кәрәк. Уларҙы тапҡас, йә матурлап төҙөкләндереп ҡуйыуҙарын, әгәр йорт, урын уларға кәрәкмәй икән, ауыл советына урынды алыуға рөхсәт биреп, ғариза яҙыуҙарын һорарға кәрәк. Ул сағында ауыл советы ул йортто, исмаһам, үҙенең милке итеп теркәп, кәртәләп ҡуя, һуңынан йорт төҙөргә теләүсе булһа, шул урынды бирә аласаҡ. Ә былай унда ауыл советы ла ҡыҫыла алмай, сөнки шәхси милек, шул уҡ ваҡытта уны милек хужаһы ла ҡарамай, ташландыҡ итеп тота. Бындай хәл-торош ҡануниәттә лә ҡаралған: әгәр кеше үҙенең йортон (милкен) ҡарамай икән, был урынды ҡарағура баҫҡан икән, ул кешегә штраф та һалып була.

Ҡайһы бер йорттар бөтөнләй хужаһыҙ, йәғни ата-әсәләре йәшәгән, улар вафат булған, ә балалары йорт-ерҙә үҙҙәренә теркәмәгән. Һәм республикала ошондай ерҙәрҙе асыҡлау, ауыл советтары милкенә күсереү буйынса эш башланды.

Ташландыҡ йорттар ауылдың йәмен, ҡотон ебәреп кенә ултырмай, улар янғын йәһәтенән дә хәүеф тыуҙыра. Йәйгеһен балалар шул йорттарға кереп уйнап, йәрәхәтләнеү, имгәнеү ҡурҡынысы ла бар. Беҙҙең ауылда ла шундай өйҙәр бар.

**Мин ауыл кешеләренән ул йорттарҙың хужаларының телефондарын алдым да, һәр берсеһенә шылтыратып һөйләштем. "Һеҙҙең атай-әсәйегеҙҙе яҡшы хәтерләйем, улар бик егәрле кешеләр булды. Һеҙ шул йортта үҫтегеҙ. Бөгөн атай-әсәйегеҙҙең өйө - төп йортоғоҙҙоң шундай ташландыҡ хәлдә тороуы өсөн оят түгелме?"- тием. "Беҙҙең дә, балаларыбыҙҙың да коттеджы бар, ул йорт беҙгә кәрәкмәй. Беҙ нимә эшләргә тейеш?" - тип һорайҙар. Өйөгөҙҙөң урынынан баш тартып, ғариза яҙығыҙ йәки ҡайтып, тирә-яғын таҙартып, үләндәрен сабып, кәртәләп ҡуйығыҙ, тием. Шулай тип аңлатҡас, ҡайтып, эшләп ҡуйҙылар. Күпме шылтыратып һөйләштем, ҡаршы әйткән кеше булманы.**

Һәр районда, ауылда шундай аңлатыу эштәре алып барырға кәрәк. Барыһы ла тыңлар тип уйламайым, әммә яртыһы ғына ҡолаҡ һалһа ла, ауыл өсөн файҙа буласаҡ. Шулай булғанда һәр беребеҙҙең тыуған яғы, тыуған ауылы матурланасаҡ.

Шулай уҡ шылтыратҡанда, ата-әсәләренең ҡәберен ни өсөн ҡарамауҙары, тәрбиәләмәүҙәре, уларҙың ташландыҡ булыуы тураһында ла һорашам - өндәшмәйҙәр. "Балаларығыҙ, ейәндәрегеҙ бар, уларға ниндәй өлгө күрһәтәһегеҙ. Ҡайтығыҙ, ҡарағыҙ", - тиһәм, "Беҙ ул турала бөтөнләй уйлағаныбыҙ юҡ ине", - тип яуаплайҙар.

Тағы ла бер яғы бар - ауылға йәм өҫтәлеүен күреп, минән һуң тағы бер нисә кеше өй һала башланы. Ауылдаштар менән һөйләшеп, зыяратты таҙалап, кәртәләп ҡуйҙыҡ, балалар майҙансығы эшләнек. Юлдарға матурлап асфальт һалдырҙыҡ.

Быйыл Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға һәйкәл эшләргә тип уйлайбыҙ.

Ауыл ситендә бәләкәй генә матур бер шишмә була торғайны. Барып ҡараһам, мал йөрөп, емереп бөткәндәр, һаҙлыҡҡа әйләнгән. Былтыр бетон ҡулсалар алып ҡайтып, трактор алып барып, матурлап ҡаҙып, ҡулсаларҙы урынлаштырҙыҡ. Быйыл уны кәртәләп ҡуйып, берәй беседка ултыртып, шул эште тамамларға уйлайым. Минеңсә, был да кәрәкле эш.

**Халыҡ ниндәйҙер идея тирәһендә берләшә, әгәр ул идея булмаһа, тырым-тырағай йөрөй. Бөгөн ошо "Атайсал" проекты халыҡты берләштереүсе идея булып торамы, әллә халыҡ яҡташтарҙы берләштергән проекттың көсөн аңлап етмәйме?**

- Күҙәтеп барһағыҙ, халыҡ кесе ватаны өсөн күберәк эштәр эшләй башланы, әммә был улар элек эшләмәгән тигәнде аңлатмай. "Атайсал" - ошо барлыҡ эштәрҙе күрһәтеп барыуы менән отошло. Һәр кем ҡулынан килгәнде эшләргә тейеш. Бая әйткән дуҫым Азат үҙенең ауылдағы өйөн мәсет итеп үҙгәртеп төҙөп ҡуйҙы. Әммә барыһы ла ундай ҙур эштәр башҡара алмай, шуға ҡулынан килгәнде эшләһә лә, ҙур ярҙам ул.

10-15 йыллап инде ғаиләм менән ауылға ҡайтып, зыяратҡа барып, атай-әсәй, ҡарсәй-ҡартатайҙарҙың ҡәберен таҙалап, сәскәләр ултыртып, тәрбиәләп китәбеҙ. Был ни өсөн эшләнә: беҙ ҙә мәңге йәшәмәйәсәкбеҙ, һәм шул ваҡытта беҙҙең балаларыбыҙ ҙа беҙҙең ҡәбергә килергә тейеш, тигәндән сығып башҡарыла. Ошо йәһәттән проект яҡташтарҙы берләштерә, тыуған еренә һөйөү уята, йәштәрҙе тәрбиәләүҙә бик ҙур роль уйнай.



***"Атайсал" - ошо барлыҡ эштәрҙе күрһәтеп барыуы менән отошло. Һәр кем ҡулынан килгәнде эшләргә тейеш. Бая әйткән дуҫым Азат үҙенең ауылдағы өйөн мәсет итеп үҙгәртеп төҙөп ҡуйҙы. Әммә барыһы ла ундай ҙур эштәр башҡара алмай, шуға ҡулынан килгәнде эшләһә лә, ҙур ярҙам ул. 10-15 йыллап инде ғаиләм менән ауылға ҡайтып, зыяратҡа барып, атай-әсәй, ҡарсәй-ҡартатайҙарҙың ҡәберен таҙалап, сәскәләр ултыртып, тәрбиәләп китәбеҙ. Был ни өсөн эшләнә: беҙ ҙә мәңге йәшәмәйәсәкбеҙ, һәм шул ваҡытта беҙҙең балаларыбыҙ ҙа беҙҙең ҡәбергә килергә тейеш, тигәндән сығып башҡарыла. Ошо йәһәттән проект яҡташтарҙы берләштерә, тыуған еренә һөйөү уята, йәштәрҙе тәрбиәләүҙә бик ҙур роль уйнай.***

**Әле бишенсе "Атайсал - яҡташлыҡ көсө" форумы үтте. Һеҙ уларҙың нисәһендә ҡатнаштығыҙ һәм халыҡтың фекере нисек?**

- Әле мин был форумдың беренсеһендә генә ҡатнаштым һәм алтынсыһына - Баймаҡта уҙғанына ла барырмын тип уйлайым. Был форумға зона буйынса тыуған яғын яратҡан кешеләр йыйыла. Улар бер-береһе менән аралашып, тәжрибәләрен өйрәнә. Шундай инициативалы

✓ ***Күптәребеҙҙең ауылға ҡайтып, әйҙә әле мин һеҙҙең теге йәки был объектты төҙөкләндерәм, төҙөйөм, тип әйтергә ҡыйыулығы етмәй ине. Йөрөй шунда ҡыҫылып, тип әйтеүҙәре лә ҡурҡыта бит инде.***

кешеләрҙе бергә йыйып, эшләгән эштәре өсөн рәхмәт әйтеп, наградалар тапшырыу уларға ҡанат ҡуя. Халыҡ менән аралашҡанда, ошо сара барышында уҡ, "Бына, башыма тағы бер уй килде әле, шуны-шуны эшләргә кәрәк", тип дәртләнеүселәр бихисап булды.

Баш ҡалала республиканың һәр районының яҡташтар ойошмалары бар. Йәштәрҙең яҡташтар ойошмалары айырым һәм улар ололарға ҡарағанда әүҙемерәк эшләй бөгөн. Ошо яҡташтар ойошмалары "Атайсал" проектында, форумдарында ҡатнаша һәм башҡаларҙың тәжрибәһе менән таныша, аралаша, үҙенең проекттарына нигеҙ һала, ауылдаштарына тәҡдим итә. Әгәр ниндәйҙер матур, изге эштәрҙе ойоштороусы булһа, ауыл халҡы хуплаһа, өмәгә сығырға әҙер тора бит ул. Беҙҙең халыҡта сәм тиғән матур бер сифат бар, улар, гәҙәттә, "Бына күршеләр шулай эшләгән, ә беҙ уларҙан кәмме ни!" тип, сәмләнеп тотона.

▸ **"Атайсал" проекты башланыуға өсөнсө йыл, хәҙер инде ул форум рәүешендә республикаға таралды, быйылғы йыл "Атайсалға - изге гәмәлдәр" девизы аҫтында үтә, әммә ҡайһы бер урындарҙа халыҡ нисек битараф булған - һаман шулай булып ҡала бирә, хатта улар шундай проект барлығын да белмәүе ихтимал...**

- Беҙҙең һәр ауылда старосталар, депутаттар бар. Улар инициатива күрһәтеп, ойоштороп йөрөһә, халыҡ барыбер күтәрелә, ярҙам итә. Битарафтар ҙа бар, әммә улар аҙсылыҡ. Улар аҡса йыйырға булһа - аҡса бирмәй, өмәгә сығырға булһа - сыҡмай. Хатта зыярат таҙартырға сыҡмай, үлһәм, барыбер шунда күмәһегеҙ бит, тиеүселәр ҙә булды. Күпселек барыбер тыуған, торған ерен хәстәрләргә, матурларға тырыша.

Әле райондарҙа "Ирҙәр ҡоро" ойошторабыҙ һәм уның маҡсаттарының береһе - тыуған яғында шундай изге эштәрҙе ойоштороу, халыҡты туплау, күтәреү. Әгәр кешенең ауылда өйө булһа, ул ҡасан да булһа ауылға ҡайтасаҡ, был беҙҙең ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу өсөн дә файҙалы буласаҡ. Маҡтанып әйтмәйем, әгәр ауылға өй һалып ҡуймаһам, күп нәмә эшләнмәгән булыр ине. Ә инде шунда йортоң булып, ҡайтып йөрөгәс, нимәләр эшләргә кәрәклеген күрәһең һәм эшмәкәрлегеңде артабан дауам итәһең.

**Ауылда үҙ йортоң булғанда ауылдаштарыңа, яҡташтарыңа тағы ла нығыраҡ яҡынаяһың, уларға һүҙең үтә, улар һине үҙ кеше, хатта үҙенең ҡәнәшсеһе, ярҙамсыһы, яҡлаусыһы тип ҡабул итә. Шуға ла тыуған яғынан ситтә йәшәгән, әммә кендек ҡаны тамған ерен, тамырҙарын иҫләгән, унан айырылмаған һәр кемде "Ауылыңда үҙ йортоң булһын!" тип саҡырам һәм был ошо "Атайсал" проектының бер девизы булырға тейеш, тигән фекерҙәмен.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ЯҠТАШТАР ОРАН ТАШЛАЙ:

## бер-беребеҙгә терәк булайыҡ!



**Мәләүез ҡалаһында республиканың 12 районынан - Стәрлетамаҡ, Салауат һәм Күмертау ҡалаларынан, шулай уҡ Мәләүез, Ғафури, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Стәрлебаш, Миәкә, Күгәрсен һәм Көйөргәҙе райондары вәкилдәре ҡатнашлығында "Минең кесе Ватаным - Атайсал" бишенсе муниципаль форумы булып үтте.**

Форум, гәҙәттәгесә, күргәҙмәнән башланды, унда муниципалитеттар үҙ биләмәһендә гәмәлгә ашырылған әһәмиәтле проекттар менән таныштырҙы. Экспозицияла меценаттарҙың һәм битараф булмаған яҡташтарҙың тыуған төйәгендә тормошто яҡшыртыуы: ауыл урамдарын төҙөкләндереүе, мөһим социаль объекттар төҙөүе һәм ремонтлауы, тыуған яғының мәҙәни үҙенсәлектәрен һәм тарихын һаҡлауға үҙ өлөшөн индереүе сағылдырылған. Үткән муниципальара форумдарҙағы кеүек үк, бында ла махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү темаһына айырым иғтибар бүлендe. Башҡортостандың һәр районында һәм ҡалаһында яугирҙарға ярҙам йыйыуҙы ойоштороу дауам итә.

Артабан тематик секциялар башланды. Форумда 4 майҙансыкта тиҫтәнән ашыу секция эшләне. *"Ауыл йәки ҡала унайлы мөхит тыуҙырыу өсөн нимә эшләргә?"* тигән эшлекле уйынды алып барыусы, Башҡортостан Республикаһы Стратегик тикшеренеүҙәр үҙәге директоры кәнәшсеһе Урал Ибраһимов билдәләүенсә, бындай саралар конкурстың идеяһын яҡшыраҡ аңларға һәм бөтәһе өсөн дә файҙалы проект төҙөргә ярҙам итә. "Тәү сиратта бизнес-берләшмәләр, әүҙем граждандар һәм власть органдары берберeһен тыңларға һәм аңларға тейеш. Шул ваҡытта дөйөм эш уңышлы буласаҡ", - тине ул үҙ сығышында. *"Коммерцияға ҡарамаған ойошмалар өсөн гранттар. Нимә ул һәм ни өсөн кәрәк?"* тигән секцияла сығыш яһаусылар гранттар менән эшләүҙең нескәлектәре тураһында һөйләне, ҡунаҡтар үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарҙы бирә алды *"Заманса мәктәп телевидениеһы"* секцияһында баласа балалар ҡатнашты. Улар өсөн "Тамыр" телестудияһы оҫталыҡ дәресе ойошторҙо. Мәктәп уҡыусылары асыҡ студия майҙансығында фекер алышты. Үҙенде камера алдында нисек тоторға, интервью барышында ниндәй һорауҙар бирергә һәм тамашасыны нисек үҙеңә йәлеп итергә - журналистар ошо һәм башҡа һорауҙарға яуап бирҙе. *"Мәләүез ере - батырлыҡ биләмәһе. Илһөйәрҙәр үҫтерәбеҙ"* тип исемләнгән майҙансыҡҡа йыйылыусылар киләсәк быуында ватансылыҡ, тоғролоҡ, Тыуған илгә һөйөү кеүек изге тойғолар тәрбиәләү хаҡында фекер алышты, ошо йүнәлештә эш алып барғандар үҙ тәжрибәһе менән уртаҡлашты.

*"Заман шарттарында яҡташтар ойошмаларының ауылдарҙы һаҡлап ҡалыуҙағы роле"*нә арналған секцияла ошо яҡташтар ойошмаларының эшмәкәрлеге, тәжрибәһе, уларҙы һәр районда тергеҙеү тураһында ихлас фекер алышынды. Секция эшендә БР Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев сығыш яһап, "Атайсал" программаһының бурыстарын, әһәмиәтен аңлатты. **Урал Таһир улын һәм башҡа яҡташтар ойошмалары етәкселәренең үҙ тәжрибәләре тураһында һөйләгәнен секция эшендә ҡатнашыусылар менән бергә 12 райондың хакимиәт башлыҡтары ла тыңланы. Беҙ беләбеҙ, төрлө райондарҙың яҡташтар ойошмалары бик күптән эшләп килһә лә, был хәрәкәт властарҙың иғтибарын бик үк йәлеп итмәне. Республика Башлығы Радий Хәбиров тәҡдим иткән "Атайсал" программаһы был мөнәсәбәттә үҙгәртер, тигән ышаныс тыуа хәҙер. Ошо форумдағы сығыштарҙан да аңлашылыуынса, тыуған ауылдарынан ситтә йәшәгән күптәр атайсалына ярҙам итергә, уны йәшәтеү, йәнләндереү өсөн ҡулдан килгәндә эшләргә теләй - урындарҙағы власть әһелдәре шуны аңларға, яҡташтарҙың тәҡдим-теләктәрен ҡабул итергә тейеш. Тап шуның менән әһәмиәтле лә инде "Атайсал" дың ошондай муниципаль форумдары - улар бер-береһе менән аралашты, бер-береһен ишетте, тип ышанырға кәрәк.**

- Рәхмәт "Атайсал" программаһын уйлап сығарған республика Башлығы Радий Хәбировҡа, уны гәмәлгә ашырыуға ең һыҙғанған Урал Килсенбаевҡа һәм уның фекерҙәштәренә, - тине "Торатау" Ишембай яҡташтар ойошмаһы етәксеһе Рәүҙәт Ҡолманбәтов. - Беҙ, ситтә йәшәгән яҡташтар, быға саҡлы ла ауылдарыбыҙға ҡайтып, ниндәйҙер мәҙәни саралар, осрашыуҙар ойоштора ала инек. Әммә күптәребеҙҙең ауылға ҡайтып, әйҙә әле мин һеҙҙең теге йәки был объектты төҙөкләндерәм, төҙөйөм, тип әйтергә ҡыйыулығы етмәй ине. Йөрөй шунда ҡыҫылып, тип әйтеүҙәре лә ҡурҡыта бит инде. Ә был программа беҙгә ауылдарыбыҙға ҡулдан килгән ярҙамды күрһәтергә юл асты. Кемдер ниндәйҙер предприятие асып, эш урындары булдыра ала, кемдер мәсет төҙөй, зыяраттарҙы, шишмәләрҙе тәртипкә килтерә. Тик яҡташтарҙың ошо ярҙамын ҡабул итергә өйрәтергә кәрәк әле беҙҙең район етәкселәрен.

Сарала ҡатнашыусылар Башҡортостандың һәр районында яҡташтар берлеген ойоштороrға тәҡдим итте. Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев бер йыл элек "Атайсал" зона форумдарын яҡташтар хәрәкәтен тергеҙеү өсөн уҙғара башлауҙарын әйтте. "Бер йыл элек беренсе республика форумында ҡуйған төп бурыстарыбыҙҙың береһе һәр районда яҡташтар хәрәкәтен тергеҙеү ине. Әлеге тема менән шөғөлләнгән хакимиәт башлыҡтары, муниципалитет етәкселәре ошондай ассоциациялар булдыра башланы. Шуныһы ҡыуаныслы: быны өсөн бер ниндәй ҙә тырышлыҡ кәрәкмәй, быны менән ҡыҙыҡһынған һәм күп кешеләрҙе берләштерә алған кешене табыу зарур", - тине Урал Таһир улы.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы рәйесе Юлдаш Йосопов билдәләүенсә, яҡташлыҡ институтына ярҙам һәм ватандаштарыбыҙҙы республика тормошона йәлеп итеү хәҙерге шарттарҙа, тәү сиратта биләмәләрҙе артабан үҫтереү өсөн бик мөһим. "Ҡасандыр үҙ-ара ярҙам итеү өсөн булдырылған яҡташтар берлеге бөгөн дә тормоштоң ҡатмарлы осорҙарын еңеп сығырға ғына түгел, ҡыйыу рәүештә киләсәккә ҡарарға мөмкинлек биргән терәк булып тора. Үҙ-үҙеңә, күршеңә ышанмайынса, территорияның стратегияһын төҙөп булмай. Еңеү өсөн аяғыңда ныҡлы баҫып торорға кәрәк, был иһә стратегик планлаштырыу ҡанұны", - тип үҙ фекерен белдерҙе Юлдаш Йосопов.

Ошо уҡ фекерҙе ҡеүәтләп, Стәрлебаш яҡташтар ойошмаһы вәкиле, республиканың Күсемһеҙ мираҫ ҡомартҡыларын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса ғилми-етештереү үҙәге етәксеһе Данир Ғәйнуллин шулай тине: "Эйе, тыуған ауылдан сығып китһәң дә, Ватанға һөйөү һәр ваҡыт үҙең менән. Олоғая килә тыуған ергә һөйөүҙе ярҙам рәүешендә күрһәтеп булыуын да аңлай кеше. Бөгөн мин дә тыуған ерем - Стәрлебаш районы Түбәнге Аллағыуат ауылына ярҙамым, район хакимиәте менән бергәләп эшләүебеҙ тураһында һөйләнем, тәжрибә уртаҡлаштым. Гөмүмән, тыуған ереңә нисек файҙалы булырға, тигән һорау һәр кемдең аҡылына килһен ул. Сөнки ауылдар киләсәге - үҙебеҙҙең ҡулда!"

**Шулай итеп, аралашыу, фекер алышыу, тәжрибә уртаҡлашыу дауам итә, "Минең кесе Ватаным - Атайсал" алтынсы муниципаль форумы 14 апрелдә 9 район ҡатнашлығында Баймаҡта үтәсәк, тип билдәләнде һәм күсмә кубок Баймаҡ район хакимиәте башлығы Фәнис Әминевҡа тапшырылды.**

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

***✓ Ҡайтҡас, тәүге тапҡыр аҡсаһын киләһе көндәрҙе теүәлләп хисапланы: "Тәмәкене ташларға кәрәк, араҡыны ла ҡуйып торормон, уларға тотонолған аҡсаға баланың ашарына алырмын, исмаһам."***





Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# ТАБЫЛДЫҠ

хикәйә

Ҡайтып инде. Алып ҡайтҡанын әҙерләне лә уны банкаға ҡойоп, ауыҙына осон энә менән тишеп, имеҙлек кейҙергәс, эсемлектең эҫе түгелләгән самалап усында йомоп ултырҙы. Юҡ, былай бармай, аҙыҡты иң башта үҙеңә тәмләп ҡарарға кәрәк, ни тиһәң дә, аптека әйбере, ә ул аптекалар хәҙер ямғырҙан һуң ҡалҡҡан бәшмәктәрҙәй аҙым һайын, билдәле, күп тауарға ышаныс аҙая һәм кәмей.

Шул берҙән-бер байлыҡ сығанағы сумаҙанынан күптән ҡулланмаған "Лесная" теш пастаһын, ҡылдары һабына уҡмашып йәбешеп ҡатҡан щетка, ирендәрен ел ярғанда ҡулланған "Тетрациклин" майын килтереп сығарҙы. Коридорҙың теге осонда урынлашҡан йыуыныу бүлмәһенә барып, ентекләп ике тапҡыр тештәрен таҙартты, тамаҡ төбөн һыу менән сайҡатып төкөрҙө, ирендәрен май менән эшкәртте. Араҡы, хәмер эсеүҙән уҙмаған йүнһеҙ ауыҙы ипкә килде һымаҡ.

Бүлмәһенә инеп, ишекте ябып өлгөрөүе булды, бала тыҙылдап та ебәрҙе.

- Уяндыңмы, улым, йоҡоң да туйҙымы? Хәҙер һәйбәтләп тамаҡ туйҙырып алабыҙ! - Ауыҙына эсемлекте алып тәмләгәс, ризаһыҙ сытырайҙы. - Әсә һөтөнә нимә генә етһен инде, ни хәл итмәк, бар һыйым ошо, риза бул!

Ирендәренә йылымыс әйбер ҡағылыуын тойған бала имеҙлекте һоғоноп ҡапты ла ҡомһоҙланып имергә тотондо.

- Улай уҡ ашыҡма, эсеңдең ауыртыуы бар. Бына шулай... Тәк, бик һәйбәт...

Тамағы туйған балаға нимә инде, тағы ла йоҡоға талды.

- Арыныңмы? Батырға ла ял кәрәк, һин йоҡла, ә мин һине һаҡлап янында ултырып торормон...

Баланы тынысландырҙы, тамағын да туйҙырҙы һымаҡ. Ары ни эшләргә? Был яһалма ыштанды кейҙерергә ярамайҙыр, бәпес танауы менән түгел, тәне менән тын ала, тигәнде ишеткәне бар. Хәҙер простыня һатып алып, йүргәк хәстәрләргә кәрәк. Шуны самалап йыртһаң, сиратлап дүрт тапҡыр ҡулланыуға етә, еүешләнгәнен йыуып торор, әҙере менән йүргәр. Тороп тор, нимә ҡылана әле тағы? Табылдыҡты кисекмәҫтән полицияға илтеп тапшырырға кәрәк, ҡалғанын улар хәл итһен, уның ни ҡыҫылышы бар был ерҙә! Ике сәғәттән бала яңынан уянды. Был саҡта инде ул простыня алып ҡайтып, йүргәктәр әҙерләргә лә өлгөргәйне.

- Уяндыңмы, егет? Уянаһың инде ул, аҫтыңды еүешләгәнһең дә баһа! Хәҙер йүргәккә төрөп ебәрәйек, юрғаныңды ла алыштырайыҡ. Ә еүешләгәнеңде балконға сығарып элеп торорға тура килер! Мин һине даими йүргәп кенә торормон, нимәгә беҙгә яһалма ыштан! Беҙ бөтәбеҙ ҙә йүргәккә йүргәләп үҫтек, һин дә бирешмәҫһең!

Килешһеҙ хәрәкәттәр менән ыҙалай-йонсой баланы йүргәне, матурлап үҙенең ябынып йөрөгән юрғанына төрҙө:

- Хәҙер ашап ал да полицияға! Миңә үпкәләмә берүк, башҡаса сараһы, юлы юҡ!

Тегендә кем генә хәстәрләһен, ҡайғыртһын инде баланы, шуға пакетҡа теге һатып алған әйберҙәрен һалды. Полицияла ла ҡатын-ҡыҙҙар эшләй, уларҙың баланы мәлендә ашатырға кәрәклеге, моғайын да, баштарына етер, бер бәғерһеҙе белмәһә, икенсе белеклеһе белер. Улай тиһәң, кешене хөкөм итеп, уларҙың күңеле әллә ҡасан ҡатып бөткәндер әле. Төргәкте ҡосаҡлап, сығыу яғына йүнәлгәйне генә бала сарғаланып мыжып ебәрҙе.

- Һе, унда барғым килмәй, тиһеңме? Һуң ҡалайтайым!

Кире карауатына барып ултырғайны, бала ла тымып ҡалды.

- Ошонда ҡулай, тиһеңме? Дөрөҫ фекерҙәһең. Дауахана ла, приютта ла йылы, әҙәмсә мөнәсәбәт юҡ шул ул. Тик аңла, барырға кәрәк... Бына мин дә яңғыҙ көн иткем килмәй ҙә бит, ни хәл итмәк, маңлайыма яҙылғаны ошо... Әйҙә, киттек полицияға. Тура дауаханаға барыр инек тә ул, улар шундуҡ өҫтәренән яуаплылыҡ алыу уйынан полицияға оҙатасаҡтар, күр ҙә тор!

Йыйынып, ишек тотҡаһына тотонғайны ғына бала тағы тауыш бирҙе.

- Һин бик ныҡыш, үҙһүҙле малайға оҡшағанһың, һүҙеңдә шулай ҡәтғи тормаҡсыһыңмы? - Кире ҡайырылып барып ултырғас, эске ҡәнәғәтләнеү менән шулай һөйләнде. - Һиңә ышанам, тиһеңме? Ышан шул, ышанысыңды аҡларға тырышырмын һәр хәлдә... Әйҙә, әлегә былай хәл итәйек, бөгөнгә бергә ҡунайыҡ, йән биргәнгә йүн биргән, нисек тә тәүлекте үткәрербеҙ әле, ә һин шул араүыҡта ныҡ итеп уйлан, төплө фекергә кил. - Юрғанды тағатып, тағы һәрмәп ҡараны. - Тағы ла еүеш! Миңә эш табып ҡына тораһың бит. - Йылмайып, шулай һөйләнде. - Хәҙер аҫтыңды алыштырайыҡ та ашап ал, шунан тыныс ҡына ятып торһаң, мин тиҙ генә эргәләге "Йәшел баҙар" тигән ергә барып киләйем. Унда ауыл ҡатындары һыйыр ағы һата торғандар. Был хөкөмәт аҙығын маҡтаһалар ҙа рәте юҡтыр, ни тиһәң дә, яһалма аҙыҡ бит, һүҙе үк сифаты хаҡында әйтеп тора...

Баҙар лавкаһы буйлап ҡатындар теҙелгән, бер яҡта һөт, ҡаймаҡ, ҡорот, ҡатыҡ, эремсек, икенсе рәттә баҡса емештәрен, башлыса тоҙланғандарын һаталар, йәнә киптерелгән дарыу үләндәрен.

Рәттәр буйлап китте лә килештереп аҡ халат кейеп алған йыуан кәүҙәле ҡатындың ҡаршыһында туҡталды:

- Һеңлем, бында кәзә һөтөн һатыусы берәйһе юҡмы икән?

- Бар, бында күгәрсен һөтөнән башҡаһын барыһын да һаталар. Теге оста бер әбей тора, шуға барығыҙ, тик тиҙерәк, ҡайтырға йыйына ине шикелле ул.

Ысынлап та, теге ергә барһа, урын буш, ә бер тәбәнәк буйлы әбей ҡапҡа яғына ҡарай йүнәлгән. Эргәһенә йүгерә-атлай барып етте:

- Инәй, кәзә һөтө кәрәк ине бит әле!

- Бар ул миндә. Тик уны ала һалып бармайҙар, һыйыр һөтөнә ынтылалар, быны шифаһын, файҙаһын, туҡлыҡлылығын һанға ла һуҡмайҙар. Күпме кәрәк?

- Бер шешә, юҡ, алғас алайым, бер литр кәрәк булыр.

Әбей самалағандай ҡулындағы бәләкәй бетонын һелккеләне:

- Бер литр уҡ сыҡмаҫ бынан, булғанын бирәм.

- Иртәгә килһәм, һеҙҙе мында осратырмынмы?

- Килә алмамдыр көн һайын, алыҫ ара бит. Ҡартым сирләп түшәктә ята, заруратттан ғына йөрөүем.

- Мин дә шул заруратттан ғына һорап тороуым инде.

- Улайһа, йортом ҡала ситендә, Баймаҡҡа киткән юлда тимер юлға етәрәк уң яҡҡа ҡараһаң шифер ҡыйыҡлы, урыҫ ҡапҡалы йорт.

Баҙар ауыҙында Валерий тап булды. Өлкән лейтенант ине, әле капитан погондарын таҡып ебәргән.

- Һаумыһығыҙ, Мозафар Ғәлиевич!

- Здравия желаем, товарищ капитан! Тағы ла бер йондоҙ өҫтәлеү менән ҡотлайым.

Тегеһе илтифатһыҙ ҡул ғына һелтәне:

- Быныһы потолок, башҡаса бирмәҫтәр.

- Бирелгәненә шөкөр итә белегеҙ!

- Уныһы шулай. Бында ни сәбәптән һуғылдығыҙ әле?

- Кәзә һөтө артынан килеүем.

- Кәзә һөтө? Диетик аҙыҡҡа күсергә иттегеҙме?

- Кисә врачҡа күренгәйнем, үпкәлә сир тапты. Кәзә һөтө генә ярҙам итер, ти.

- Дауаланығыҙ улайһа, тик эсеүҙе кәметегеҙ, тартыуҙы ла. Юғиһә, бөтөнләй бирешерһегеҙ. Ятып китһәгеҙ, кемгә кәрәгегеҙ бар?

- Миңә бөгөндән башлап һис тә ятырға ярамай, хаҡым юҡ, не имею права.

- Быны аңлағасығыҙ, молодец, ары ла шулай тотоғоҙ курсты.

- Есть, товарищ капитан, прямо держать этот курс! - Шунан ихлас итеп йылмайҙы.

Китә биргәс, Валерий Леонтьев ҡайырылды:

- Мозафар Ғәлиевич, сырхап торһағыҙ ҙа бөгөн йөҙөгөҙгә нур ҡунған, тағы дәртле лә күренәһегеҙ!

Ҡайтыу менән кәзә һөтөн ҡайнатып, йылымыс хәлгә килгәс, үҙе тәмләп ҡарағандан һуң самалап бәпескә имеҙҙе.

- Ихлас һураһың түгелме, шилма? Һин дә тыуғаныңа яңы, ә тәбиғи аш менән яһалма аҙыҡты тиҙ айыраһың. Беҙҙең яҡтың ризығы үҙе бер башҡа, үләндәр ҙә төрлө, ҡылғаны ла бар, һыу ҙа саф...

Магазинға барып, аҙыҡ-түлек, көнбағыш майы һатып алды. Урамда шешәләштәренең береһен тап итте. Тегеһе эргәһенә килә һалып, тирә-яҡҡа алан-йолан ҡаранып, урлыҡ менән булышҡан кешеләй бышылданы:

- Иртә таң менән хәйер эстәп ултырылды. Бер эшкәлектәй төштө шулай ҙа. Әйҙә, ҡуш та, һиңә инеп сығырбыҙ!

- Бына нимә, миңә ике аяғығыҙҙың береһен баҫмағыҙ!

- Ниңә улай, көн уртаһында сығынсы аттай сығынлайһың? Тиҫкәренән тыуған берәй себен тешләнеме әллә? Улай тиһәң, әлегә себен терелмәгән, буғай.

- Әйттем - бөттө! Барыһына ла еткер! Килеп йөрөмәгеҙ!

- Үлергә йыйынмағанһыңдыр ҙа?

- Санаторийға китәм, теүәл бер айға! Әгәр килеп бүлмә ишеген ҡайырып асырға маташһағыҙ, минән яҡшылыҡ көтмәгеҙ!

- Вон оно как... Ярай, дуҫтарыңды улай йәберһетһәң, бер кәрәгербеҙ, тик беҙ генә булмаҫбыҙ...

- Кәрәгегеҙ бер тин! Пока, не болейте, и не кашляйте!

Ҡайтҡас, тәүге тапҡыр аҡсаһын киләһе көндәрҙе теүәлләп хисапланы: "Тәмәкене ташларға кәрәк, араҡыны ла ҡуйып торормон, уларға тотонолған аҡсаға баланың ашарына алырмын, исмаһам."

Көнбағыш майын ҡайнатып һыуытҡас, баланы тәҙрә төбөндәге ҡояшҡа һалып, түшен, арҡаһын, ҡул-аяҡтарын сиратлап майларға тотондо:

- Йә, нисек, йылымы, рәхәтме? Устарым һылауға яраҡлашмаған, ҡытыршыраҡ инде, уныһы ла ярап ҡалыр, өҫтәмә массаж...

Ғәжәбенә ҡаршы, бала үтә тыныс фиғелле булып сыҡты, ни эшләһә лә риза булып тик ята, ашатһаң артыҡ ҡарһаланмай ғына имә лә шундуҡ йоҡлап та китә.

Шул арала тасҡа һыу ҡойоп алып, тәҙрә төбөнөң, стеналарҙың туҙанын һөртөп алды, ентекләп иҙәнде йыуып сығарҙы, боҙолоп, карауат аҫтына ырғытылған, кәрәкһеҙгә иҫәпләнгән үтекте килтереп сығарып ремонтларға тотоноп китте, уныһын яйға һалғас, йүргәктәрҙе үтекләй башланы. Быларҙың барыһын да ниндәйҙер эске кинәнес, ҡәнәғәтлек тойғоһон кисереп башҡарҙы.

Кис еткәс, баланы эргәһенә алып, янына ятып бөршәйҙе, ябыныр ине лә юрғаны менән баланы төргән, шуға үҙе курткаһын бөркәнде. Төндө лә уяулы-йоҡоло үткәрҙе, һәр ике сәғәт һайын уянып, баланы имеҙҙе, үтек менән йылытып, йүргәктәрен алыштырҙы.

...Шул ятыуында кисәге араҡы шауҡымы һаташыуында күргән төшө иҫенә килеп төштө. Төшөндә ап-асыҡ итеп Зәбирәһен күргәйне бит. Ул ап-аҡ күлдәк кейеп алған, ҡулында аҡ төргәк, шуны уға һоноп тотторҙо ла былай тине: "Ошо инде беҙҙең балабыҙ, ә һин ғүмер буйы балабыҙ юҡлыҡҡа кәмһенеп, ғәйепте үҙеңдән эҙләгән булдың. Дөрөҫөндә ғәйеп миндә ине, бала саҡта ныҡ һыуыҡ тейҙереп ауырығайным бит, врачтар тикшергәндән һуң, бала таба алмайһың, тигән ҡәтғи диагноз ҡуйҙылар... Шуға фанилыҡтағы етешһеҙлегемде баҡыйлыҡта төҙәтәм, бала алып килдем һиңә... Уны һис ҡасан ташлама, ул да һиңә тоғро булыр!" Шулай тине лә томанда ирегәндәй юҡҡа ла сыҡты. Бына әле генә килеп айыҡ аҡылына барып етте, тикмәгә килмәгән төшөндә Зәбирәһе, уға өнөндә бала алып килгән. Нимә тине әле һуңғы һүҙҙәрендә: "Ташлама уны!" Тимәк, юҡҡа түгелдер был төшө, һис тә юҡҡа түгелдер. Оҙаҡ йылдарҙан һуң күңеленә тәүге тапҡыр йәш сағында йыш йырлаған мәғәнәле йырҙың моңло һүҙҙәре килде:

Юҡҡа түгел, юҡҡа түгелдер...

Мөңгөрәп йырланы ла йылмайған килеш әүелйеп тә киткәйне, бер аҙҙан уны ҡабаттан баланың ҡыңғырау сыңлағандай тауышы уятты...

**(Дауамы. Башы 10-сы һанда).**

АФАРИН!

# КҮҢЕЛДӘН - КҮҢЕЛГӘ

**Гәлсәр Байғусҡарова. "Күңел". Концерт иғланынан ап-асыҡ, яҡты йөҙлө, янып торған күҙҙәр баға. Өмөт-хыялға тулы ҡарашы менән үҙенең күңел донъяһына саҡыра.**



Бына М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры сәхнәһенә сағыу уттар яҡтыһына сорналып, йәш йырсы сығып баҫа. Унын тирәләй берәм-берәм Мәскәү һәм Башҡортостан музыканттары теҙелә. Зал тын ҡалып Гәлсәрҙең сығышын тыңлай. Моңло күңелдән күңелдәргә моң тула...

Әлеге көндә Мәскәүҙә Гнесиндар исемендәге Музыка академияһында һуңғы курста уҡып йөрөүсе, бөләкәй генә сағынан республика халҡына "Тамыр" телеканалы тапшырыуҙары, "Бирешмә" һәм "Ышан" йәштәр сериалдары аша таныш, Бөтә Рәсәй һәм Халыҡ-ара конкурстар лауреаты, Чехияла үткән "Прага буяуҙары" конкурсында, "Йәшлек-шоу"ҙа еңеүсе булырға өлгөргән Гәлсәр Байғусҡарова башҡорт, рус, инглиз телдәрендә, тере тауышта 20-гә яҡын йыр яңғыратты ул кисҙә. Етмәһә, концертты башынан аҙағынаса, ике сәғәт дауамында, яңғыҙы алып барҙы. Сығыштар араһында йәш йырсының тамашасы һорауҙарына биргән яуаптары ҙур экранға сығарылып, тамашаға тағы бер үҙенсәлек өҫтәне. Репертуарындағы Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим кеүек оло шәхестәребеҙҙең шиғырҙарына Салауат Низаметдинов, Нур Даутов, Ришат Сәғитов һәм башҡа композиторҙар ижад иткән йырҙарҙы шулай тамашасы күңеленә түкмәйсәсмәй генә еткерә алды йәш йырсы.

Әйткәндәй, тере тауыш, тере музыкаль инструменттар оҙатыуында ойошторолған концертты күптәрҙең тәүге күреүе булғандыр. Әлегә тиклем республиканың йыр сәнғәтендә башлыса "фанера" концерттары өҫтөнлөк итеүгә күнегеп тә бөткәнбеҙ бит. Был йәһәттән Гәлсәр Байғусҡарованың концерты, һис шикһеҙ, ихласлыҡ өлгөһө булды. Серле, мөғжизәле ижад яланына баҫҡан ғына ҡыҙсыҡҡа уңыштар теләп, уның тәүге концертын алҡышлап, киләсәккә фатиха бирҙе тамашасыһы. Хисле, киң һәм гәлсәр күңелле башҡорт ҡыҙының ижады тылсымлы ноталарға бай булһын, тип теләне тамаша ҡылыусылар. Түбәндә уларҙың ҡайһы берҙәренең фекер-теләктәренә ҡолаҡ һалайыҡ:

***Башҡортостандың халыҡ артисы Нәзифә Ҡадирова:*** Гәлсәрҙең ижады менән бала сағынан ҡыҙыҡһынып барам. Ул кескәй сағынан йырға мөкиббән китеп, сәнғәткә үҙен бағышларға тырышып ятҡан саф күңелле бала. Үсеш бара. Үҙенең юлын эҙләй. Ундай алым менән йырлаған йырсылар әлегә юҡ. Йыр сәнғәтен, тыуған ерен шул тиклем ярата. Концертын "Күңел" тип атауы ла күңелгә ятты. Уңыштар теләйем!

***Радио һәм телевидение ветераны, журналист, "Тамыр" балалар студияһын ойоштороусы Луиза Фархшатова:*** Тере тауыш та, үҙе һөйләп, үҙе йырлауы ла танһыҡ булды беҙҙең күңелдәргә. Етмәһә, һорауҙарға яуап биреп тә өлгөрә. Бар яҡлап уйланылған, профессиональ кимәлдә ойошторолған, йөкмәткеле, мәғәнәле концерт. Балаларса ихлас күңелле, йәш ижадсының сәхнәлә йәшәүенә шаһит булдыҡ.

***Башҡортостандың халыҡ артисы, музыкант Ғәле Алтынбаев:*** Был ҡыҙҙың Башҡортостан юлдаш каналындағы сығыштарын күргәнем бар ине. Әлеге концертта башҡорт ҡыҙының шул тиклем мөләйемлеген һәм асыҡ күңелен тойҙом. Йырҙарын композитор көйөнә яңы биҙәктәр өҫтәп башҡара. Ул эҙләнә. Үҙем музыкант булараҡ, киләсәктә унын менән ижади аралашып, тәжрибәм менән бүлешкем килде.

***Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Зәһир Иҫәнсурин:*** Гәлсәрҙең концертын һоҡланып ҡарап ултырҙым. Үҙемә мондаш тип уйланым. Ике сәғәттән ашыу барған концерт бер тынала үтте. Концерттың аҙағына тиклем йырсы менән бер тулҡында булдыҡ. Йырҙары менән донъя кимәленә лә сығыр әле, тигән өмөттәмен.

***Әүҙем йәмәғәт эшмәкәре, 83 йәшлек өләсәй Альбина Исхаҡова:*** Мин Гәлсәрҙе тыуған көнөнән алып беләм, тиһәм дә хата булмаҫ. Бишектән йырлай башлағандыр ул. Йәштәр араһында йәштәрсә йырҙар тыңлап, йәшәреп ҡайтырға сыҡтым. Афарин ҡыҙыма!

***"Юлдаш" радиоһы дикторы Салауат Шәмсетдинов:*** Һөйгән йәрем менән "Күңел " концертын ҡарап, күңел моңға тулып ҡайтып барабыҙ. Бындай формат, тере тауышта башҡарылған концертты тормошомда беренсегә ишеттем. Ошондай концерттарға күберәк йөрөр инем, әгәр тере тауышта йырлаусылар булһа...

**Фәнүзә БАҺАУЕТДИНОВА, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре.**

БЕР ТАМАША ТУРАҺЫНДА

# КҮҘ ЙӘШТӘРЕ АША ЙЫЛМАЙЫУ



**Был донъяла иң ҡыҙығы - кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтелер. Бигерәк тә, ирҙәр менән ҡатын-ҡыҙҙарҙың, ҡапма-ҡаршы енестәрҙең, үҙ-ара һыйышып (бәлки, һыйышмай) йәшәүе мауыҡтырғыс тамаша. Ғаилә ҡороп, юридик яҡтан ир менән ҡатын статусында йәшәүселәрҙең үҙ-ара мөғәмәләһе иһә тағы ла ҡыҙығыраҡ - күпме ғаилә, шунса тормош, шунса спектакль - комедияһы ла, драмаһы ла, ҡыҙғаныста, трагедияһы ла бар. Үҙенең алтын балыҡ тураһындағы әкиәтендә бөйөк Пушкин бынан ике быуат элек үк ир менән ҡатын араһында иң йыш осраған хәлде бик тәфсирләп аңлатҡан. Ҡатын-ҡыҙға ни кәрәк: баш өҫтөндә ышыҡлар ҡыйығы, һыйындырыр йылы мөйөшө булһа, етә. Әммә оҙаҡҡа түгел: бер ҡатлыһы булһа, ике ҡатлыһынан баш тартмаҫ, алтын һарайҙа йәшәһә лә эсен тишмәҫ. Ә ир кеше? Ул - табыусы, балыҡ тотоусы. Тик алтын балыҡ һәр ирҙең ауына эләкмәй шул...**

Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында Наил Ғәйетбайҙың "Һинән - фатир, минән - ир" комедияһын ҡарағандар, әлеге лә баяғы, ир менән ҡатын булып, ғаилә ҡороп йәшәүселәрҙең мауыҡтырғыс мөнәсәбәттәренә шаһит булдылар, сәхнәләге образдарҙың ҡыланыштарына һындары ҡатып көлдөләр, ҡаһы бер күренештәрҙә үҙҙәрен таныусылар ҙа булғандыр - пьесалар ҡуҡтән төшмәй бит.

Премьера Халыҡ-ара театр көнөндә сәхнәгә аяҡ баҫты - был да үҙенә күрә символик әһәмиәткә эйә. Етмәһә, ул театрҙың баш режиссеры Денис Нурғәлиндың яңы вазифаһында эшләй башлаған ҡуйған тәүге спектакле. Конфуций әйтмешләй, осраҡлыҡтар осраҡлы түгел, тигәндәй, был кистә йондоҙҙар сағыуыраҡ балҡығандай тойолдо. Комедияның йөкмәткеһе үтә лә ябай һымаҡ. Күрше ике бүлмәлә ике ғаилә йәшәй. Икеһе лә кеше тупһаһында. Бер ғаилә, хужабикә эшендә ҡыҫҡартыуға эләккәнлектән, бүлмәне бушатырға тейеш. Күрше ғаиләнең дә хәлдәре шәптән түгел, апайы кире үҙ бүлмәһенә ҡайтҡанлыҡтан, улар шулай уҡ йәшәгән урындарынан ҡайҙалыр күсенергә тейештәр. Ни эшләргә, ҡайҙа барырға, артабан нисек көн күрергә? Ирҙәр, баш өҫтөндә ҡыйыҡ булдырырға яуаплылар, ни уйлай? Ғүмер буйы кеше тупһаһында йәшәп булмай ҙа баһа!

Күрше ике ҡатын мөшкөлләнгән хәлдәрен нисек яҡшыртыу тураһында баш вата. Баҡтиһәң, ҡалала фатирлы ла, аҡсалы ла ҡатындар бар икән дә! Һәйбәт йәшәрҙәй шарттары ла бар, тик уларының ирҙәре генә юҡ! Баяғы мөшкөл хәлдәге ҡатындарҙың береһе үҙенең үлеп ҡалыуы тураһында ялған хәбәр тарата. Был хәбәрҙе ишетеү менән байбисәләр тол ҡалған ирҙе үҙҙәренә ҡаратыу өсөн килеп тә етәләр. Сәхнәләге ваҡиғалар ҡуйырғандан-ҡуйыра барып, торлаҡһыҙ ике күрше ҡатын, фатир хаҡына, ирҙәрен һатырға риза була. Ирҙәр ҙә алйот түгел, һатылыу иҫәбенә бер юлы ике ҡатын менән йәшәү планын төҙөйҙәр. Һәм... спектаклдең иң ҡыҙыҡ мәлендә әле генә эсте тырнай-тырнай көлөп ҡарап ултырған ваҡиғалар төп геройҙың төшө генә икәне беленә. Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та... Бөгөнгө көндә иң көнүҙәк проблемаларҙың береһе - торлаҡ мәсьәләһе - спектаклдә хәл ителмәй ҡала.

Тамашасылар спектаклде аңлап, бик йылы ҡабул итте. Алдан һөйләшкәндәй, тамаша барышында бер юлы ҡул сабыуҙар, залды яңғыратҡан дәррәү көләү тауыштары быға асыҡ дәлил. Тимәк, авторҙың әйтергә теләгәнен режиссер халыҡҡа сайпылтмайынса алып барып еткерә алды. Әйткәндәй, Денис Сәлим улы пьесаға заман һулышы өргән, гротеск алымдары ҡулланып, ирҙәр менән ҡатындар араһындағы мөнәсәбәтте тоҙло-боросло сатира кимәлендә еткергән. Актерҙарҙың оҫта уйынына арбалып, ваҡиғалар сылбыры башындағы торлаҡ мәсьәләһе онотолоп та китә хатта. Әммә Ҡол-Дәүләттең шиғырындағы һымаҡ, "Алданыуҙар алдан йөрөй икән, айнығыуҙар килә һуңынан..." икәнен дә онотмайыҡ. Спектаклде ҡарағандар һис юҡта барыбер ҙә уйланыр. Уйланыр, әммә һеләгәйен ағыҙып илап ултырмаҫ. Беҙ, рәсәйлеләр, шундай халыҡбыҙ: иң ауыр мәлдә лә ваҡиғаларға күҙ йәштәре аша йылмайып ҡарай беләбеҙ. Ошондай уйҙар тыуҙы премьераны ҡарағандан һуң.

**Радик ӨМӨТҠУЖИН.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИТТЕҢ ТӨРЛӨҺӨ ЛӘ ФАЙҘАЛЫ

■ Артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусылар өсөн хөрриәт килә, йәмәғәт, ғалимдар тәм-том ашап та, һимермәй торған препарат уйлап тапҡан. Техас университетының медицина фәндәре үҙәге белгестәре был дарыуҙы СРАСС тип атаған. Уның төп тәьҫире организмдан күберәк энергия бүлеп сығыуға ҡоролған. Дарыу магнийҙы күҙәнәктәрҙең митохондрияһына "ташыусы" MRS2 гены әүҙемлеген баҫа. Һөҙөмтәлә, шәкәр менән май тиҙерәк "яна" һәм энергияға әүерелә. Физик көс түгеп, ас тороп, йәки аҙыраҡ ашап ябығырға теләмәгәндәр өсөн был препарат үҙе бер мөғжизә инде. Ул һынауҙарҙы ла үткән, ҡомаҡтарҙы башта калориялы ризыҡтар ярҙамында һимерткәндәр, һуңынан ошо дарыу менән генә ябыҡтырғандар. Бауырға ла көс төшөрмәй икән препарат. Әлегә ғалимдар патент алыу менән шөғөлләнә. Шулай уҡ кешеләрҙә һынауҙар үткәрергә лә кәрәк буласаҡ. Белгестәр ошо дарыу ярҙамында диабет, йөрәк сирҙәре, бауыр яман шешен иҫкәртеп буласаҡ, ти.

■ Ошо уҡ университет ғалимдары тағы бер асыш яһаған. Быға тиклем ит зыянлы, уны күп ашаһаң, йөрәк сиренә тарыуың да бар, тип раҫлай инеләр. Бигерәк тә эшкәртелгән иттән яһалған аҙыҡ-түлек - колбаса, сосиска, ыҫланған ит ризыҡтары тураһында төрлө имеш-мимештәр күп йөрөй. Хәҙер бына белгестәр быны дөрөҫләккә тап килмәүе тураһында һөйләй. Бары тик итте сама белеп ҡулланырға кәрәк, ти улар. Яңы тикшеренеүҙәрҙә майлы (25%) һәм майы күп булмаған (5%) иттең ирҙәрҙең ҡан тамырҙары эшмәкәрлегенә йоғонтоһон өйрәнгәндәр. 5 аҙна дауамында 40 йәшлек 23 ир һыйыр итенән яһалған кәтлит ашаған. Көн һайын түгел, аҙнаһына 5-әр кәтлит тура килгән. Ошо кәтлиттән тыш, туҡланыуҙарында бер нәмәне лә үҙгәртмәгәндәр. Шулай уҡ ҡатнашыусыларҙың яртыһына майлы иттән яһалған кәтлит эләккән, яртыһына - майһыҙы. Асыҡланыуынса, был ҡан тамырҙарының эшмәкәрлегенә лә, күнекмәләр ваҡытында тамырҙарҙың кислородҡа туйыныуына ла йоғонто яһамаған. Етмәһә, майлы фарш ашаған ирҙәрҙең ҡан баҫымы түбәнерәк булып сыҡҡан, тимәк, майлы ит сәләмәтлеккә насар тәьҫир итә тигәне лә дөрөҫ түгел. Ғалимдар әйтеүенсә, самалап ит ашауҙың бер зыяны ла юҡ.

■ Эшһеҙлек кимәле менән ғүмер оҙайлығы араһында бәйләнеш бар. Был турала Рәсәй ғалимдары белдерә. Эшһеҙлек кимәле түбән булған һайын, илдең төрлө өлкәләрендә тормош яҡшыраҡ, тиерһегеҙ. Юғары иҡтисад мәктәбенең иҡтисад фәндәре факультеты белгестәре тикшеренеүҙәр үткәргән һәм быны дөрөҫләккә тура килмәүен асыҡлаған. Анализ өсөн Бөтөн донъя банкы һәм Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының 2011-2019 йылдарҙағы мәғлүмәттәре ҡулланылған. Уларҙа халыҡтың нисек йәшәүе, эшһеҙлек кимәле, шулай уҡ һаулыҡ һаҡлау өлкәһенен халыҡ иҫәбенә ҡарата тотонған сығымдары һ.б сағыла. Бынан тыш, экология, халыҡтың аҙыҡ-түлек менән тәьмин ителеше, тәмәке һәм алкоголле эсемлектәр ҡулланыуҙың кимәле өйрәнелгән. Килем юғары булған һайын, уртаса ғүмер оҙайлығы ла күберәк, тик килем тағы ла арта икән, ғүмер ҡыҫҡара бара, сөнки ғүмер оҙайлығының тәбиғи сиге бар. Ярлы илдәрҙә эшһеҙлек ғүмер оҙайлығын ҡыҫҡарта, был туҡланыуҙың, йәшәү шарттарының насарайыуы, дарыуҙар һатып ала алмау менән бәйле. Әммә бай илдәрҙә эшһеҙлек кимәле ғүмер оҙайлығына артыҡ тәьҫир итмәй, сөнки уларҙа һаулыҡ һаҡлау системаһы һәм социаль ярҙам ныҡ үҫешкән.

БАҠСА МӘШӘҠӘТТӘРЕ

# БАШҠОРТ ЕРЕНДӘ...

## йөҙөм дә үҫә

**Баҡса күптәрҙең яратҡан шөғөлөнә әйләнә бара һәм халыҡ йығылып ятып йәшелсә-емеш үҫтерә бөгөн. Ҡалала йәшәп, баҡса эшен үҙ итеүселәр ҙә бик күп. Йырсы, ҡурайсы, Башҡортостандың халыҡ артисы Сәғиҙулла БАЙЕГЕТ тә үҙе үҫтергән уңышты фотоға төшөрөп, социаль селтәрҙәрҙә күрһәтеп тора. Беҙҙә бигерәк тә Башҡортостан ерлеге өсөн ятыраҡ, тәбиғәт шарттары ҡатыраҡ булыу сәбәпле, тәрбиәләүе мәшәҡәтлерәк булған йөҙөм (виноград) ҡыҙыҡһындырҙы.**





**➔ Сәғиҙулла, һеҙ шәп йырсы, актер ғына түгел, уңған баҡсаһы ла икән?**

- Баҡса менән махсус шөғөлләнмәйем ул былай. Йортоң, ерең булғас, баҡсаң да булырға тейеш, тигән фекерҙәмен бары. Шуға ла йорт менән бергә баҡса ла барлыҡҡа килде. Ерҙе яҡшылап кәртәләп алғансы, башта яртыһына картуф сәстек. Унан Иҫке Сибайҙан сейә алып килдек, ҡарағат, ҡырҙан балан алып ҡайтып ултырттыҡ. Бөрйән, Әбйәлил яҡтарында булғанда ҡарағай, шыршы ағастары алып килдем. Янғынға ҡаршы хәүефһеҙлек нормалары буйынса, ағастарҙы өйгә яҡын ултыртырға ярамай, шуға уларҙы ситкәрәк урынлаштырҙыҡ. Үҙҙәре үҫеп сыҡҡан ағастар ҙа бар, мәҫәлән, ҡарама, ул беҙҙең яҡтыҡына оҡшамаған, ҡыуаҡ, уға форма биреп, киҫергә лә була. Миләште үҫтерә алмайбыҙ бына. Ғаиләм менән бергәләп эшләйбеҙ инде. Кәләш иртә менән теплицаға редис сәсә. Томат-маҙарҙы теплицаға сығарырға ваҡыт еткәнсе, ул өлгөрә лә. Витамин аҙыҡ аша инһә, файҙалыраҡ бит. Варенье эшләмәйбеҙ, емештәр компот өсөн тотонола. Баланды ҡар төшкәс йыйып, джем яһайбыҙ. Кәбеҫтә менән һуғанды һатып алыу яҡшыраҡ, тигән фекергә килгәнбеҙ. Үҙең үҫтергән томатҡа ла бер нәмә лә етмәй. Шуға ла помидор ҙа, картуф та яратып үҫтергән йәшелсәләребеҙгә әйләнде.

**➔ Беҙҙең халыҡ картуфты сортын белеп сәсмәй нишләптер, һеҙ ниндәйенә өҫтөнлөк бирәһегеҙ?**

- Мин дә шул башҡалар һымаҡ, аҡ, ҡыҙыл картуф тип кенә беләм уны. Нуғай ҡасабаһында ер аҫты һыуҙары өҫтә, шуға ла өйҙең нигеҙе эсендә баҙ эшләп булмай. Бында баҙҙы ерҙең өҫтөнә яһап, йылытырға кәрәк. Шуға ла тиҙ шытып бармаған картуфҡа өҫтөнлөк бирәбеҙ. Мәҫәлән, ҡыҙылы эре, тәмле, тик тиҙ шыта. Ә ағы яҡшы һаҡлана. Йыл да уңыш та булмай, ҡайһы йылда шул ҡыҙылы, ҡайһыһында ағы уңа. Яртылаш сәсәһең дә, отаһың. Тупраҡты ла ҡарарға кәрәк. Ауылда һыйыр тотҡан кешегә анһат, бында тиреҫте ҡиммәт хаҡҡа һатып алырға тура килә. Ике йылға бер тиреҫләп торам. 1990 йылдарҙа беҙҙе бит аслыҡтан картуф ҡотҡарҙы, был бер ҙә шаяртыу түгел. Икенсе икмәк, тип бушҡа әйтмәйҙәр инде. Хәҙер үҙебеҙҙең балалар студент, уларға ла кәрәк. Колорадо ҡуңыҙы билде яҙырға бирмәй инде былай, орлоҡто ағыулап сәсеп ҡараныҡ, тәме оҡшаманы. Шуға быйыл улай эшләмәҫмен тип торам.

**➔ Йөҙөм үҫтереүегеҙ тураһында ла һөйләгеҙ инде. Бындай затлы емеште үҫтереүе еңелдән түгел бит?**

- Үҫентеһен кемдәндер алғайным, шуны ҡыш буйы гөл һымаҡ өйҙә үҫтерҙем. Ике төбө ерегеп китте, береһе - йәшел, береһе - ҡара йөҙөм. Уны үҫтерәм тип тырышыуымдың да маҡсаты - ҡапҡанан килеп ингәс тә, йөҙөм үҫеп ултырһа, матур ҙа инде. Интернетта видеолар ҡараным да, улар нимә кәнәш итә, шулай эшләнем. Унда башлыса йылы яҡта, Ҡырым яҡтарында үҫтергәндәрҙең видеолары күп. Йөҙөм ысынлап та бик нескә культура, йылы, ҡояш ярата. Ҡышҡылыҡҡа уларҙы ябып, ҡар яткансы өшөмәһендәр өсөн өҫтөн япраҡ менән булһа ла ябып ҡуям. Компоты бик шәп була, 1-2 тәлгәш йөҙөмгә 1-2 киҫәк лимон ҡушып эшләйһең. Тәме бик үҙенсәлекле. Миндә "Медовый" тигән сорты үҫә.

Шуға хәҙер йөҙөм ҡыуаҡтарын күбәйтергә тырышып йөрөйөм. Көҙөн сыбыҡтан ҡырҡып алам, ҡышын өйҙә тотам, тик асыҡ ерҙә үҫмәй ҙә ҡуя. Былтыр ҡышҡылыҡҡа ергә һалып ҡалдырған сыбыҡтар иһә япраҡ ярҙы, быйыл нисек ҡышлағандарҙыр ине. Яҙ ныҡлап үҙ хоҡуғына инмәйенсә, ҡояш ныҡлап йылытмайынса, япраҡ ярмай йөҙөм. Яҙҙың иртәме, һуңмы килеүен уларға ҡарап билдәләргә мөмкин.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП:

**Йылы яратыусы йөҙөм беҙҙең шарттарҙа емеш бирһен өсөн ныҡ тырышырға кәрәк. Республикала йәй йылы, хатта эҫе, ҡышын 42 градус һыуыҡтар булыуы ихтимал. Ҡышын оҙайлы булыуы ла күп ауырлыҡтар тыуҙыра, күп үҫемлектәр өлгөрөп етмәй. Яҙын һауа торошоноң йыш үҙгәреп тороуы - йә йылытыуы, йә туңдырыуы һөҙөмтәһендә күпселек үҫемлектәрҙең тамыры туңа. Шулай итеп, йөҙөм үҫтереү буйынса кәңәштәр:**

● Башҡортостанда виноградтың тиҙ өлгөрә, шулай уҡ һалҡындарға бирешмәй торған сорттарын үҫтереү кәңәш ителә. "Александр", "Башкирский ранний", "Мадлен ананасный", "Юбилейный", "Василий", "Мечта Скуиня", "Белое чудо", "Башкирский изумруд" сорттары беҙҙең төбәк өсөн сығарылған. Үҫемлекте йәшәгән ерегеҙгә яҡыныраҡ булған махсус питомниктан алырға тырышығыҙ.

● Башҡортостанда йөҙөм ағасын ҡырауҙар бөткәс, яҙ ултырталар. Иң ҡулайлы мәл тип май айы иҫәпләнә. Тупраҡ 10 градусҡа тиклем йылынған булырға тейеш.

● Төньяҡ елдәренән ышыҡланған көньяҡ яҡтағы ҡояшлы урынға ултыртығыҙ. Грунт һыуҙары ағып яткан ер булмаһын. Ҡыуаҡтарҙы бер-береһенән 1,5 - 2 м аралыҡта, төньяҡтан көньяҡҡа ҡарай ултыртырға. Рәт аралары - 1 - 1,5 м. Соҡорҙо ҡаҙып, уға ашламалар һалғас, 0,5 - 0,6 м тәрәнлегендәгеһе иң ҡулайлыһы һанала. Ашлама - һәр ҡыуаҡҡа 2-3 биҙрә компост. Сыбыҡсанан үрсетәһегеҙ икән, 25 см ҡыҫҡа булмаған сыбыҡсаларҙы бер аҙ ҡыйшайтып һалырға ла, ерен тығыҙлап, 2-3 биҙрә һыу һибергә. Ер өҫтө кипкәс, 10 см тәрәнлегендә тупраҡты йомшартып сығырға.

● Ултыртҡандан һуң һәм тағы ла 2 аҙна интервал менән 2 тапҡыр яҡшылап һыу ҡойорға. Йөҙөм ҡыуағы ҡоролоҡҡа бирешмәй, тик быны өсөн уның тамырҙары нығынып, үҫеп китергә тейеш. Һыу йылы булһын. Сәскә атҡанда йәки сәскә атып бөткәс кенә һыу һипмәгеҙ, сәскәһе ҡойолоп бөтәсәк. Емеш өлгөрөп еткәндә һыу һибеү емештәрҙең ярылыуына, уларҙың өлгөрөп етмәүенә килтерә. Шуға ла һыуҙы артыҡ һипмәгеҙ.

● Ашлау яҙын һәм йәйен башҡарыла. Беренсе тапҡырында ҡыуаҡтарҙы ҡышлағандан һуң асырҙан алда 10 л һыуға 20 г суперфосфат, 10 г аммиак селитраһы, 5 г калий тоҙо менән ашларға. Был бер ҡыуаҡ өсөн. Ошо уҡ ашлама менән сәскә атырға 2 аҙна ҡалғас туҡландыралар. Емеш өлгөрөр алдынан суперфосфат һәм калийлы ашлама кәрәк. Азот ярамай. Ҡышты яҡшы сыҡһын өсөн уңыш йыйғас тағы ла калий менән туҡландырыу яҡшы.

● Яҙын - олондар буйлап һут йөрөй башларҙан алда, йәйен - яңы сыҡҡан үҫентеләрен ҡырҡырға. Августа - үҫеүенән туҡтап, емешкә һәм ҡышҡылыҡҡа көс йыйһын өсөн, көҙөн - уңыш йыйылғас ҡырҡалар. Климатты иҫәпкә алып, тәжрибәле баҡсасылар тәүге йылда йөҙөм ҡыуағын ҡышҡылыҡҡа ҡырҡмаҫҡа тәҡдим итә. Ҡалған ваҡытта нисек һәм күпме ҡырҡырға кәрәк - был турала мәғлүмәтте интернеттан ҡарарға була.

Ләйсән ВӘЛИЕВА әҙерләне.

ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ

**Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылындағы Башҡорт гимназия-интернаты педагогия хеҙмәте ветераны, "Тормош һабаҡтары" программаһы һәм дәреслектәре авторы, яҙыусы, Салауат Юлаев ордены кавалеры Мәрйәм Сабирйән ҡыҙы Бураҡаева исемен йөрөтә. Республикабыҙҙа тәүгеләрҙән булып үҙ районында башҡорт гимназияһы ойоштороған ил иңәһе һалған матур традициялар, милли рух, милли тәрбиә дауам итә бында. Халыҡ педагогикаһына нигеҙләнеп тәрбиәләнә беҙҙә уҡыусылар, халыҡ ижадына, телгә, моңға, тарихҡа һөйөү һалына илһөйәр, телһөйәр балалар күңеленә.**




# РУХЛЫ ЗАМАН УТРАУЫНДА



Гимназиябыҙҙа талантлы һәм һәләтле балалар күп. Улар ижад майҙанында туҡтауһыҙ эҙләнә. Уларҙың хыял-ниәттәренә ярҙам итеү, артабан үҫтереү, заман технологиялары менән үрелдереп, юғарыраҡ баҫҡыстарға күтәреү - педагогик коллектив алдына ҡуйылған заман талабы ул. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикабыҙҙа инициатив бюджетлау проекттарын бойомға ашырыу тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйғас, гимназиябыҙ ошо ярҙамға дәғүә итергә булды. Был мәктәп уҡыусыларының мөһим проекттарын тормошҡа ашырыу өсөн ойошторолған бик тә кәрәкле һәм күптән көтөлгән Хөкүмәт ярҙамы. Документҡа ярашлы, 2021-2024 йылдарҙа урындағы бюджеттар республикабыҙ ҡаҙнаһынан ошо йүнәлештәрҙә субсидия ала алаСаҡ. Гимназиябыҙ ҙа был проектта ҡатнашырға хоҡуҡ бирелгән мәктәптәр исемлегенә индерелгән. Беҙҙең уҡыусылар алты проект йүнәлешен тәҡдим итте: "Сенсор бүлмә" булдырыу проекты; "Ял утрауы" уңайлы ял урыны проекты; "Мәргән уксы" мәктәп тиры проекты; "Арғымаҡ" мәктәп медиаүҙәге проекты; "Спорт һәр кем өсөн" заманса спорт майҙансығы проекты; шәхси әйберҙәрҙе һаҡлау өсөн шарттар булдырыусы "Минең гардеробым" проекты.

Уҡыусылар шул тиклем дәртләнеп, ярыш сәме менән тоҡанып, аҙна дауамында үҙҙәренең проекттарын яҡланы, презентацияланы. Һәр бер инициатив төркөм үҙ проектына ҡыҫҡаса тасуирлама бирҙе, актуаллеген, социаль мөһимлеген билдәләп үтте, маҡсатын, көтөлгән һөҙөмтәһен атаны. Тәҡдим ителгән эштәрҙең барыһы ла бик ҡыҙыҡлы ине. Әммә күптәр "Арғымаҡ" медиаүҙәге өсөн тауыш бирҙе.

Билдәләнеүенсә, был проект сиктәрендә ижади медиаүҙәк ойоштороу планлаштырыла. Ул уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү, тәплә белем алыу, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған өлкәлә ижади һәләттәрен асыу өсөн бөтә мөмкинлектәр тыуҙырасаҡ, тип ҡуҙаллана. Был матур фотолар һәм видеолар төшөрөргә, ҡыйыуыраҡ булырға өйрәтеүсе, ораторлыҡ һәм йәш ҡәләм тирбәтеүселәр һәләтен үҫтереүсе һәйбәт майҙансыҡ буласаҡ. Туған тел - ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған иң ҡәҙерле ҡомартҡы. Медиаүҙәк телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу, артабан үҫтереү, уҡыусыларҙы милли рухта тәрбиәләүсе матур саралар ойоштороу, йәш быуынды туплау, юғары технологияларға йәлеп итеү маҡсатын алға һөргән рухлы заман утрауы буласаҡ.

Бөгөнгә көндә гимназиябыҙҙа "Арғымаҡ" гәзите сыға, "Аҫылташ" өлгөлө балалар театры гөрләп эшләй. "Тылсымлы шәм" республика конкурсында 1-се урын, "Башҡортостан ынйылары" республика конкурсында Гран-при яулаған был театр бөгөнгә көндә лә уңышлы сығыш яһай. Мәрйәм Бураҡаева уҡыуҙары фәнни-ғәмәли конференция барышында, талантлы шағир Рәйес Түләктең "Күпер" поэмаһына нигеҙләнеп ҡуйылған видеоһын күрһәтеп, оло баһа алды егет-ҡыҙҙарыбыҙ. Улар "Урал бөркөттәре" вокал ансамбле район, республика конкурстарында призлы урындар яулай, "Осҡон", "Йондоҙҙар" бейеү ансамблендә бейеү серҙәренә өйрәнә. Киләсәктә уҡыусыларыбыҙ өсөн видеостудия, фотостудия, журналистика студияһы ла булдырылһа, ысын илһөйәрҙәр, белемле шәхестәр тәрбиәләүгә тағы ла уңайлыраҡ шарттар тыуҙырылыр ине гимназиябыҙҙа, тигән хыял менән янабыҙ.

Яңы технологиялар - яңы мөмкинлектәр ул. Һәр яҡтан һәләтле уҡыусыларыбыҙ, әлмисаҡтан килгән изге аманат - этнопедагогикаға нигеҙләнеп, заманса аҙымдар менән алға барасаҡ, тип ышанабыҙ.

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**

*АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА*

# БАЛАҢ - ҺИНЕҢ КӨҘГӨҢ

**"Бала - ғаилә көҙгөһө; ҡояш һыу тамсыһында нисек сағыла, шуның кеүек үк, балаларҙа ла әсә менән атаның әхлаҡи сафлығы сағыла", - тигән бөйөк педагог В.А. Сухомлинский. Иғтибарығыҙға уның балалар, ғаилә һәм мәктәп тураһындағы ҡайһы бер фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.**

♦ Ата менән әсә бер-береһен ихлас яратһа, шулай уҡ башҡа кешеләрҙе лә ярат һа һәм хөрмәт итһә, бындай ғаиләлә балалар яҡшы кешеләр булып үҫә.

♦ Һинең балаларың тураһында насар һүҙ әйтәләр икән, тимәк, был насар һүҙ һинең үҙеңә лә ҡағыла.

♦ Ғаилә тормошоноң төп мәғәнәһе һәм маҡсаты - балалар тәрбиәләү. Ошо тәрбиәнең төп мәктәбе - ир менән ҡатындың, атай менән әсәйҙең үҙ-ара мөнәсәбәте.

♦ Бала тәрбиәләйһең икән, тимәк, һин үҙеңде лә ҡуша тәрбиәләйһең, үҙеңдең кешелек дәрәжәңде раҫлайһың.

♦ Бала бәләкәйҙән үк әсәһе, атаһы, өләсәһе, ҡартатаһы өсөн борсолһон, ҡайғырһын, яҡындары менән берәй насар хәл була ҡалһа, ата-әсәһен уйлап, төнөн йоҡламаһын. Уны борсолоу-көйөүҙәрҙән һаҡларға тырышмағыҙ: ҡурсалайһығыҙ икән, таш бәғерле кеше үҫтерәсәкһегеҙ. Ә таш бәғерҙә уғлан тоғролоғона ла, атай наҙына ла, халыҡ өсөн бөйөк идеалдарға ла урын юҡ; кем ата-әсәһенә битараф, ул бер ҡасан да илһөйәр була алмай.

♦ Баланың беренсе һәм иң төп тәрбиәсеһе, беренсе һәм иң төп уҡытыусыһы - ул атай менән әсәй.

♦ Ата-әсә башҡалар менән күңел йылыһын бүлешеп, уларҙың шатлығын да, ҡайғыһын да яҡын ҡабул итеп йәшәһә, бындай ғаиләлә балалар изгелекле, миһырбанлы, ярҙамсыл булып үҫәләр. Иң ҙур яуызлыҡ - ҡайһы бер ата-әсәләрҙең мин-минлеге, эгоизмы.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИҢ БАЙ КЕШЕ

**Байығыуҙың икенсе ысулы: "Үҙеңдең ихтыяжыңды контролдә тоторға өйрән"**

Бойомға ашмаған теләктәр улар миндә лә бар. Әллә һеҙ мин бай булғас та барлыҡ теләктәремде лә ғәмәлгә ашыра барам тип уйлайһығыҙмы? Юҡ шул. Сәбәптәре бик күп. Мин ваҡыт менән сикләнгәнмен. Минең физик көсөмдөң дә сиге бар. Мин сәйәхәт итә алған һәм алмаған аралар йыраҡлығы бар. Унан һуң, минең ашай алыу-алмау мөмкинселегем дә сикләнгән. Шулай уҡ тормош менән һоҡланыу, шатланыуҙың да үҙ самаһы бар.

Әгәр ҙә игенсе баҫыуҙа сүп үләненең тамырын ҡалдыра икән, ул барыбер үрсейәсәк. Шуның һымаҡ, теләгәнде ҡәнәғәтләндереү мөмкинлеге бар икән, улар артасаҡ ҡына. Тимәк, теләктәр күп, ә ҡандыра алырҙайҙары күп түгел икәнен һәр саҡ иҫтә тотоғоҙ.

Көндәлек тормошоғоҙҙағы ҡәҙимге ғәҙәт-ҡылыҡтарығыҙҙы ныҡлап күҙҙән үткәрегеҙ әле. Һеҙ мотлаҡ ҡыҫҡартырға, ихтыяждар исемлегенән төшөрөп ҡалдырырға мөмкин булған сығымдарығыҙҙы табасаҡһығыҙ. Һәр тинегеҙ ҡиммәте йөҙ процентлы булған нәмәгә тотонолһон - ошондай девиз ҡуйығыҙ үҙегеҙгә.

Ә хәҙер һатып алырға теләгән нәмәләрҙең исемлеген төҙөгөҙ. Улар араһынан мотлаҡ кәрәк булғандарын һәм ун һумығыҙҙың туғыҙ һумына һатып алырға мөмкин булғандарын ғына һайлағыҙ. Ҡалған теләктәрегеҙҙе исемлектән һыҙығыҙ. Шунан сығымдарығыҙҙы иҫәпләгеҙ. Көшөлөгөгөҙҙө яйлап тултыра торған баяғы бер һумға теймәгеҙ. Уның тиҙерәк тулыуы һеҙҙең иң ҙур маҡсатығыҙ булып ҡалһын. Бюджетығыҙ менән эшләүҙе дауам итегеҙ. Бюджетығыҙҙы ҡалыная барған көшөлөгөгөҙ һағындағы тәүге ярҙамсығыҙға әйләндерегеҙ.

Аркадтың ошо һүҙҙәренән һуң уҡыусыларҙың береһе урынынан тора һәм:

- Мин ирекле кеше. Мин үҙемде тормоштоң бөтөн хөрлөктәренән файҙалана алам тип уйлайым. Шуның өсөн, бюджетҡа ҡарата ҡолдарса мөнәсәбәттән баш тартам. Был мине түбәнһетә һәм йөк ташыған ишәк хәленә төшөрә, - ти.

- Улай булғас, һинең бюджетыңды кем билдәләй һуң? - тип һорай унан Аркад.

- Уны мин үҙем эшләйем, - ти уҡыусы.

- Әгәр ҙә йөк ташыған ишәк үҙ йөгөн үҙе билдәләй алған булһа, ул унда келәм, биҙәнгестәр, алтын тейәр инеме ни? Юҡ, әлбиттә. Ул иген, бесән, һыулы һауыт тейәп алыр ине.

Бюджеттың маҡсаты - һинең көшөлөктөң ҡалынайыуына ярҙам итеү. Ул һиңә ни кәрәк - шуларҙың барыһын да булдырырға, башҡа теләктәреңде лә үтәргә ярҙам итеү өсөн кәрәк. Ул һинең иң изге хыялдарыңды тормошҡа ашырыу, еңел-елпеләренән ҡотҡарыу өсөн кәрәк. Ҡараңғы мөмерйәлә сағылып ҡалған яҡтылыҡ кеүек, һинең бюджетың да көшөлөгөңдән сыҡҡан һәр бер тинде белгертеп торасаҡ, сығымдарыңды контролдә тоторға ярҙам итәсәк.

Шулай итеп, үҙ сығымдарығыҙҙы иң мөһим, иң лайыҡлы теләктәрегеҙҙе ҡандырырлыҡ, ҡәнәғәтләнеү килтерерлек нәмәләргә генә тотоноғоҙ. Был сығымдарығыҙ мотлаҡ килемегеҙҙең ундан туғыҙ өлөшө генә булһын.

**Джорж С. КЛЕЙСОН.**
**(Дауамы бар).**



### 10 АПРЕЛЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20 Д/ф "Элина Быстрицкая. Звезда эпохи". [12+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.45 Д/ф "Прямая речь". Памяти Владимира Жириновского. [12+]
12.45, 14.15, 18.05, 23.40 Информационный канал. [16+]
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "За полчаса до весны". [12+]
1.20 Т/с Премьера. "Почка". [18+]
1.50 Премьера. "На футболе с Денисом Казанским". [18+]
2.20, 3.05, 3.45 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Любовь преодолеет всё". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45, 14.45, 16.00, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Спортивная история. [12+]**
**12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 Преград. Net. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 3.00 История одного села. [12+]**
**18.00 "Ап-асыҡ". [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Пофутболим? [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Д/ф "Ядерный терроризм". [16+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Спектакль "Жанна, завтра будет новый день". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 Следопыт. [12+]**

### 11 АПРЕЛЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "За полчаса до весны". [12+]
0.25 Т/с Премьера. "Почка". [18+]
1.00, 1.40, 2.20, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Любовь преодолеет всё". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Ете егет". [12+]**
**10.45 Надо знать. [12+]**
**11.00, 16.00, 6.00 "Дорога к храму". [0+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.15 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Детей много не бывает. [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**17.00 Автограф. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Елкән. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**23.30 Бәхетнамә. [12+]**
**0.45 Спектакль "Счастье с неба". [12+]**
**2.45 Бай. [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**

### 12 АПРЕЛЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "За полчаса до весны". [12+]
0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

РОССИЯ 1 Башкортостан (Уфа)
5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Любовь преодолеет всё". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**10.30, 17.45 История одного села. [12+]**
**10.45 Әлләсе… [6+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [12+]**
**12.15 Пофутболим? [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 МузКәрәҙ. [6+]**
**15.30 Гора новостей.**
**15.45 "КультУра". [6+]**
**16.00, 6.00 Тайм-аут. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 Тормош. [12+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Д/ф "Завещание - грядущему". [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.15 "Любишь, не любишь?.". [12+]**
**3.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

### 13 АПРЕЛЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15, 18.05, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 Премьера. "Куклы наследника Тутти". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "За полчаса до весны". [12+]
0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.45, 4.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Малахов. [16+]
21.20, 22.20 Т/с "Любовь преодолеет всё". [16+]
23.25 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
2.05, 3.00 Т/с "Дуэт по праву". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Автограф. [12+]**
**10.30 "Яманташ". [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Историческая среда. [12+]**
**12.45 Счастливый час.**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 0.45 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Бәхетнамә.**
**15.00 Сулпылар. [0+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Специальный репортаж. [12+]**
**17.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00, 20.30 Вечерний телецентр.**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхетнамә. [12+]**
**1.15 Спектакль "В ночь лунного затмения". [12+]**
**3.15 Счастливый час. [12+]**
**4.00, 5.00 Вечерний телецентр. [12+]**
**6.00 "Это моя профессия". [12+]**

### 14 АПРЕЛЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 Премьера. "АнтиФейк". [16+]
9.40 "Жить здорово!" [16+]
10.30, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости.
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Премьера. "ГОЛОС" весны в обновленном составе. [12+]
23.30 "Вызов. Первые в космосе". [12+]
0.30, 1.10, 1.50, 2.30, 3.05, 3.40, 4.15, 4.50, 5.25 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 Прямой эфир. [16+]
21.30 Моя Мелодия. [12+]
23.30 Улыбка на ночь. [16+]
0.30 Х/ф "Сказки мачехи". [12+]
3.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.44 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**10.30, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 12.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.45, 14.45, 16.45, 22.00, 6.00 Интервью. [12+]**
**12.00 Слово Земли. 2.0. [12+]**
**12.45, 2.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.15 Ҡурай даны. [12+]**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз).**
**13.45 Автограф. [12+]**
**14.15, 19.45 История одного села. [12+]**
**15.00 "АйТекә!" [6+]**
**15.15 "КультУра". [6+]**
**15.30 Гора новостей. [6+]**
**15.45 Патриот РФ. [12+]**
**16.00 "Аль-Фатиха". [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 3.00 "Ҡурай даны". [12+]**
**19.00, 3.15 Честно говоря. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**21.15 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Спектакль "Сваха". [12+]**
**4.00 "Ете егет". [12+]**
**4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**5.30 Тормош. [12+]**

### 15 АПРЕЛЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Премьера. "Поехали!" [12+]
11.05 Премьера. "ПроУют". [0+]
12.00, 16.20 Новости (с субтитрами).
12.15, 23.30 Д/ф "Храм Гроба Господня". [0+]
12.55 Д/ф "Иисус. Земной путь". [0+]
13.45, 16.30, 18.15 Д/ф "Крещение Руси". [12+]
15.00 Схождение Благодатного огня. Прямая трансляция из Иерусалима.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.15 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
21.30 Х/ф Премьера. "Одна". История чудесного спасения. [12+]
0.20, 0.55, 4.15, 4.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
1.30 Пасха Христова. Прямая трансляция богослужения из Храма Христа Спасителя.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 20.00, 1.00 Вести.
11.25 Доктор Мясников. [12+]
12.25, 4.15 Х/ф "Течет река Волга". [16+]
15.00 Схождение Благодатного огня. Прямая трансляция из Иерусалима.
16.20 Х/ф "Тому, что было - не бывать". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Доктор Счастье". [12+]
23.00 Х/ф "Я буду рядом". [12+]
1.30 "Пасха Христова". Прямая трансляция Пасхального богослужения из Храма Христа Спасителя.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Ете егет". [12+]**
**8.30 Это моя профессия. [12+]**
**9.00 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**10.00 Елкән. [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 Преград. Net. [6+]**
**11.00 МузКәрәҙ. [0+]**
**11.30 "Бал маленьких принцесс". [0+]**
**12.00 Тәмле. Мы вместе! [12+]**
**12.30 Новости (на баш. яз). [12+]**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "Завещание - грядущему". [12+]**
**18.00 "Все песни о прекрасном". Концерт. [12+]**
**19.00 Формула меда. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.30 "Байыҡ-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Д/ф "Сотворить добро. Рукавишниковы". [12+]**
**23.45 Пасхальная служба из кафедрального собора Рождества Богородицы г. Уфа.**
**3.00 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Башкортостанского Никона. [0+]**
**3.15 Спектакль "Жизель Ботаническая".**
**4.45 Автограф. [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 "Дорога к храму". [0+]**

### 16 АПРЕЛЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 23.45, 0.25, 1.05, 1.45, 2.25, 3.05, 3.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.55 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.40 "Часовой". [12+]
8.10 "Здоровье". [16+]
9.20 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
9.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Премьера. "Жизнь своих". [12+]
11.05 Премьера. "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
14.05 Х/ф "Одна". [12+]
16.10 Д/ф "Владимир Мулявин. "Песняры". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Две звезды. Отцы и дети". Новый сезон. [12+]
21.00 "Время".
22.35 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

6.05, 1.30 Х/ф "Формула счастья". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.30 Большие перемены.
12.35 Х/ф "Несладкая месть". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.22 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз).**
**7.45 "Йома". [12+]**
**8.15 Тормош. [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 "Бай". [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз).**
**9.50, 15.15 Пасхальное послание митрополита Уфимского и Башкортостанского Никона. [0+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз).**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.15, 4.30 Историческая среда. [12+]**
**16.45 "Честно говоря". [12+]**
**17.30 Концерт народной артистки БАССР Флюры Кильдияровой. [12+]**
**19.15, 3.30 Әлләсе… [6+]**
**20.00, 1.45 Атлас Баженова: Башкортостан. [12+]**
**20.30 Полезные новости. [12+]**
**20.45, 2.15 Спортивная история. [12+]**
**21.15 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус.яз.).**
**22.15, 1.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Спектакль "Касатка". [12+]**
**0.45 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**2.45 Честно говоря. [12+]**
**4.15 Финликбез. [6+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.45 Специальный репортаж. [12+]**

✓ *Йәшәүҙән ҡурҡмағыҙ. Йәшәү кәрәк икәненә ышанығыҙ һәм ошо ышаныс, өмөт быны фактҡа әйләндерергә ярҙам итер.*

*(Уильям Джемс).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 12 АПРЕЛЬ - КОСМОНАВТИКА КӨНӨ




*Ер тирәләй беренсе булып 1 сәғәт 48 минут осоусы*

*Йыһанда 803 көн, 9 сәғәт 41 минут булыусы*

*Йыһанда иң оҙаҡ - 2 йыл, 2,5 ай булыусы*

*Ҡатын-ҡыҙҙарҙан беренсе*

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**11-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Йөҙөк. Фәтихов. Сәфәр. Балта. Күнәк. Ҡойроҡ. Ҡурайсы. Аҡлан. Ҡоршау. Аласа. Бот. Балыҡ. Оҫта. Лифт. Туҡал. Лиана. Атыш. Мөрйә. Ағуна. Зарипов. Төлкө.

**Вертикаль буйынса:** Ҡарамалы. Бураҡаева. Йомарлам. Факт. Өй. Зат. Аҡыҡ. Йәтәс. Батый. Әфтиәк. Фархшатова. Токио. Кивер. Вал. Батша. Ҡала. Алты. Көн. Ҡолға.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Апрель (Рамаҙан) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 10 (19) дүшәмбе | 4:28 | 4:58 | 6:28 | 13:30 | 18:12 | 20:07 | 21:37 |
| 11 (20) шишәмбе | 4:26 | 4:56 | 6:26 | 13:30 | 18:13 | 20:09 | 21:39 |
| 12 (21) шаршамбы | 4:23 | 4:53 | 6:23 | 13:30 | 18:14 | 20:11 | 21:41 |
| 13 (22) кесе йома | 4:21 | 4:51 | 6:21 | 13:30 | 18:15 | 20:13 | 21:43 |
| 14 (23) йома | 4:19 | 4:49 | 6:19 | 13:30 | 18:17 | 20:14 | 21:44 |
| 15 (24) шәмбе | 4:16 | 4:46 | 6:16 | 13:30 | 18:18 | 20:16 | 21:46 |
| 16 (25) йәкшәмбе | 4:14 | 4:44 | 6:14 | 13:30 | 18:19 | 20:18 | 21:48 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҒЫ*

## ТУЙ ЙОЛАҺЫН БЕЛӘҺЕҢМЕ?

**Республика халыҡ ижады үҙәге Мәҙәниәт йортонда "Ауаз" башҡорт фольклор ансамбленең "Башҡорт туй йолалары" тигән фолк-дәрес үтте.**

2018 йылда булдырылған ансамблдең художество етәксеһе, БР-ҙың атҡаҙанған артисы Нәсимә Тимерова әйтеүенсә, коллектив башҡорт туйының яусылау, никах, мәһәр, кәләште кейәү йортона оҙатыу, сеңләү, киленде кейәү йортонда сәләмләү, килен һөйөү, киленгә өгөт-нәсихәт әйтеү һәм киленде кейәү йортона оҙатырға әҙерлек йолаларын күрһәткән. Сара киләсәк быуынға әхлаҡи тәрбиә биреү, Башҡортостан халыҡтарының тарихи, этник һәм фольклор мираҫын пропагандалау һәм өйрәтеүгә йүнәлтелгән.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**11 апрель "Ҡыҙыл паша"** (Н. Асанбаев). 12.00, 19.00 12+

**14 апрель "Һинһеҙ килгән яҙҙар"** (З. Ҡадирова), мелодрама. 16+

**12 апрель "Ете быуын. Һаҡлаусылар"** спектакль-вербатим. 16+

**13 апрель "Ете быуын. Йәштәр"** спектакль-вербатим. 16+

**15 апрель "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**15 апрель "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 11.00 6+

**"Мөхәббәт һәм нәфрәт"** (З. Биишева), музыкаль риүәйәт. 18.00 12+

**16 апрель "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 18.00 16+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**13 апрель "Алға, Баламишкин!"** (Ф. Бүләков), комедия. 12+

**14 апрель "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 10.00 0+

**Премьера! "Хазина"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+

**15 апрель "Три поросенка"** (З.Сөләймәнов инсц.), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**12 апрель премьера! "Ырыҫ-дәүләт шишмәһен, белем менән асырһың"** концерт. 15.00 6+

**14 апрель Премьера! "Спектакль - как песня"** музыкаль-әҙәби лекторий. 13.00 6+

**15 апрель Премьера! "Әсәй, бына һиңә килен…дәр!"** (И. Зәйниев), комедия. 18.00 12+

**16 апрель "Золотой осел Насретдина"** (Ш. Казиев), музыкаль әкиәт. 12.00 0+

**"Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**10 апрель -** Әбйәлил районы Байым ауылында **"Һинән фатир, минән ир"** (Н. Ғәйетбай), гротекс-комедия. 20.00 12+

**12 апрель -** Әбйәлил районы Аҫҡар ауылында **"Тау артында ниҙәр бар?"** (Т. Ғиниәтуллин), хикәйәт. 12+

**11, 13, 14 апрель -** Баймаҡ районы буйлап гастролдәрҙә **"Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), лирик комедия. 20.00 12+

### БР Милли музейы

**12 апрель "Космический диктант - 2023".** 15.00 12+

**"12 апрель - Бөтә донъя космонавтика көнө"** күргәҙмәһе асыла. 16.00 6+

**13 апрель "Хәҙерге донъяла баҫма матбуғат һәм нәшриәт эше".** 11.00 6+

**"Таштың хикмәтле донъяһы"** сара. 12.00 6+

**"Өфөнөң шәфҡәтлелек тарихы"** сара. 15.00 12+

**15 апрель "Беренсе булыу ауыр"** Н.А. Мәжитовҡа арналған күсмә күргәҙмә. 6+

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# БЕҘ ОЯЛСАН БУЛҒАНБЫҘ...

**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры асылған йылдарҙан алып тиерлек унда актриса булараҡ эш башлаған, өс тиҫтә йыл эсендә бик күп спектаклдәрҙә матур ролдәр башҡарған һәм ошо көндәрҙә күркәм юбилейын билдәләгән Башҡортостандың халыҡ артисы Альбина Кашанова менән ижад юлы, остаздары һәм йәштәр тураһында әңгәмәләштек.**



**Утыҙ йыл эсендә театр һәм һеҙ ниндәй үҙгәрештәр кисерҙегеҙ?**

- Был ваҡыт арауығында театр ҙа, мин дә олпатландыҡ: тәжрибә тупланыҡ, оҫтарҙыҡ, байыныҡ. Мин эшкә килгән генә йылдарҙа йәш, бер аҙ ҡыйыуһыҙыраҡ булһам, хәҙер тупланған хеҙмәт тәжрибәм етерлек. Ул саҡта йәш һәм өлкән быуын актерҙары ғына эшләгән театрҙың хәҙер урта йәштәге үҙ актерҙары бар, талантлы яңы көстәр ҙә килде. Репертуары ла икенсе төрләрәк, мәғәнәлерәк һәм етдиерәккә әйләнде.

**Һеҙ башҡарған ролдәр араһында булмышығыҙға яҡындары ла, холоҡ-фигел йәһәтенән бөтөнләй яттары ла булғандыр. Тағы берҙе хәтергә төшөрөп китәйек әле...**

- Бик күп характерлы образдар тыуҙырҙым сәхнәлә. Театрға эшкә килгәс тә "Аҡ ҡалфаҡ" спектаклен сәхнәләштерҙек, уҡытыусыбыҙ Ғабдулла Ғиләжев эшләне. Мин Ғәфиә ролен башҡарҙым, әле лә һағынып иҫкә алам. Азат Нәҙерғолов "Һинд ҡыҙы" спектаклен ҡуйғайны, бик оҙаҡ йылдар барҙы ул һәм мин романтик та, лирик та Кәбирәне уйнаным. Йәш саҡтан апайҙар, әсәйҙәр, өләсәйҙәр образында йәш булдым мин. М. Кәримдең "Беҙҙең өйҙөң йәме"ндә Көнбикә, "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"та Оло Инәй ролдәрен яратып башҡарам. Улар эске булмышыма тап килә. Хатта "Ханума" спектаклендәге киреәк персонаж булып күҙ алдына баҫҡан Кабато тиҫкәреләнеп, ҡырыҫланып киткән саҡтарымды сағылдырғандай. Әлбиттә, актерҙар гел үҙенә оҡшаған, яҡын ролдәрҙе генә уйнамай. Минең дә холоҡ-фигелен күңелем менән ҡабул итә алмаған геройҙарым булманы түгел, булды. Шундайҙарҙың береһе "Куш моңлолар" тигән спектаклдән бәләкәй генә бер роль ине, персонажымдың исемен дә хәтерләмәйем хәҙер хатта. Әммә тамашасыға хәшәрәт бер әҙәм булып күренгән был образды тыуҙырыуы бик ауырға төшкәне һаман да иҫтә. Ғөмүмән, минә башҡа кешеләргә ҡарата тупаҫ, алдашыусы, йәберләүсе, кеше алдында артыҡ ҡыланыусы, маҡтансыҡ холоҡлоларҙы уйнауы ҡыйын. Кешеләрҙә тап ошо сифаттарҙы үҙ итмәйем.

**Быйыл Рәсәйҙә Педагог һәм остаз йылы. Һеҙҙең дә остазығыҙ булғандыр?**

- Остаздарым бер нисәү минең. Өфө сәнғәт институтына уҡырға килгән йылда драма актерҙарын йыйманылар, шуға, ҡурсаҡ театры курсына эләктем. Шунда беҙгә Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Павел Романович Мельниченко һөнәребеҙ буйынса нигеҙ белемдәр бирҙе. Атайҙарса хәстәрлекле педагог ине. СССР-ҙың халыҡ артисы Гөлли Арыҫлан ҡыҙы Мөбәрәкова сәхнә теле буйынса уҡытты, диплом спектакле ҡуйҙы. РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Ғабдулла Ғабдрахман улы Ғиләжев кәрәк саҡта шелтәләп тә, тура юлдан яҙлыҡтырмай һәр студентты ҡурсып торған кафедра мөдире булды. Шулай уҡ режиссер, РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Лек Вәли улы Вәлиев ҡуйған спектаклдәрҙә уйнарға тура килде һәм уның да кәңәштәре һаман булһа хәтеремдә. Институтты тамамлап, Йәш тамашасылар театрында (хәҙерге М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры) эш башлағас, художество етәксеһе булған Олег Закир улы Ханов эшкә өйрәтте. Остаздарымдан ундым, шөкөр.

**Һеҙҙең ижад итергә көс туплау, илһам сығанаҡтары ниҙә? Театрға һөйөү ҡайҙан барлыҡҡа килде?**

- Тыуған илем, тыуған еремдән туплайым көс-ҡеүәт. Мин Балтас районының Түбәнге Һикияҙ ауылында тыуғанмын. Һағынып-һағынып ҡайтам ауылымды һәм атай-әсәйемде. Сәнғәткә һөйөүем дә тап уларҙан башланды. Әсәйем ғүмер буйы фельдшер булып эшләне, әммә бик шиғри күңелле: үҙе ижад иткән оҙон-оҙон шиғырҙарын 84 йәшендә булыуға ҡарамаҫтан, әле лә һис янылышмай яттан һөйләй. Атайым иһә, бик матур итеп йырлай. Ҡыҙғаныска ҡүрә, атайымдың моңло тауышы миңә бирелмәгән. Бөтөнләй йырламайым түгел, шулай ҙа сәхнәләрҙә айырым сығыш яһарлыҡ шундай илаһи моң әйәһе түгелмен. Әлбиттә үҙ ғаиләм, улым да көс биреүсе сығанаҡ, ҡыуанысым.

Ә инде театрға һөйөү хаҡында әйткәндә, мин бала саҡтан сәнғәткә ғашиҡ булып үҫтем. Бәләкәй генә көйөнсә урамда уйнарға сыҡҡан арала ла йырлап йөрөргә яратҡанмын. Ауылдаштар мине ҡыҙыҡ күреп йырлатып, бейетеп йә шиғыр һөйләтеп, кәнфит-мажар тотторол та ҡайтарғандар. Ҡапҡа алдындағы эскәмйәлә тимер сүместе әйләндереп тотоп, мандолина итеп "сиртеп", ҡушылып йырлап ултырғаным хәтеремдә. Аҙаҡ инде мәктәп йылдарында ла бик әүҙем булдым, бейеүгә йөрөнөм, төрлө сараларҙа сығыш яһаным. Ә өйҙә өләсәй иртәнсәк тороу менән радионы ҡабыҙып ебәрә торғайны. Башҡортса радиопостановкалар йыш яңғыратыла ине, шуларҙы яратып тыңланыҡ. Ул замандың популяр артистары тураһында гәзит-журналдарҙа баҫылған мәҡәләләр, фотолар ҡырҡып алып тупланған альбомым да бар ине. Сәнғәткә ҡыҙыҡһыныуым юғары булһа ла, оялсанлығым, баҫалҡылығым баштан уҡ был өлкәгә килергә ҡамасау итте. Шулай ҙа ятҡан һөнәремә юлды таба алдым, шөкөр.

**Йәштәр театрының йәштәре ниндәй бөгөн? Әштә быуындар айырымлығы тойоламы?**

- Хәҙерге йәштәр беҙҙең һымаҡ түгел. Улар шул тиклем үткер, үҙҙәренә ышаныстары ҙур, саялар. Ҡайсаҡ уларға ҡарап, шаҡ ҡатам, беҙҙең быуында ундай сифаттар һирәк була торғайны, уғата ныҡ оялсан булғанбыҙ. Театрыбыҙға эшкә килгән йәш актер һәм актрисалар араһында төплө белемле, үҫешкә ынтылған, маҡсатлы, әҙерлекле, рухи яҡтан да көслө, актер өсөн кәрәкле һығылмалыҡ, йөнлелек, һәләт яғынан да бынамын тигәндәре лә бихисап. Хәҙерге йәштәрҙең тағы бер сифаты мине аптырашта ҡалдыра: улар бер урынға йәбешеп ятмай, гел хәрәкәттә булырға, үҫешергә, күберәк белергә ынтыла. Беҙ тик бер урынға эшкә килдек беҙ ҙә, шунан ебәреп ҡуймаһындар, тип йәбешеп ята торғайныҡ. Ә йәштәр улай түгел, улар үҙҙәренең ошо сәскәләй матур осорон күңелдәренә ысынлап ятҡан урынды эҙләп табыу, төрлө өлкәлә үҙҙәрен һынап ҡарау яғында.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Итәғәтле, асыҡ күңелле, әсәйҙәрсә күңел йылыһы бөркөп торған актрисаларҙың береһе ул Альбина Рәфис ҡыҙы. Уның ниндәй роль башҡарырға хыялланыуы тураһында һорағас: "Үҙебеҙҙең халыҡтың матур ғына бер әсәрендәге яғымлы, яҡшы образды сәхнәгә сығарғым килә", - булды яуап. Ошо хыялы тормошҡа ашһын, ижад ҡомары һүрелмәһен, тамашасыһын тағы ла яҡты ролдәре менән ҡыуандырһын халыҡ һөйөүен яулаған актрисабыҙ!**

**Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨСЛӨ ҠУРҠЫНЫС ТҮГЕЛ...

## үсле ҡурҡыныс

Тамаҡты йыртҡан аш түгел, тормошто боҙған дуҫ түгел.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙегеҙгә, һәләттәрегеҙгә ышанығыҙ! Үҙ көсөгөҙгә һәм мөмкинлектәрегеҙгә ныҡлы һәм нигеҙле ышанмай тороп, бәхетле һәм уңышлы булып булмай.

**(Норман Винсент Пил).**

Йәшәүҙән ҡурҡмағыҙ. Йәшәү кәрәк икәненә ышанығыҙ һәм ошо ышаныс, өмөт быны фаҡтҡа әйләндерергә ярҙам итер.

**(Уильям Джемс).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Берҙән-бер көндә Хужа Насретдин йәшәгән илдә батшаның иң аҡыллы кәңәшсе-вәзире донъя ҡуя. Донъя ҡуйыр алдынан вәзир батшаға: "Минә алмаш итеп беҙҙең батшалыҡтағы иң етди кешене эҙлә, сөнки етдилек - аҡыл эйәләренә генә хас булған сифат", - тип әйтеп ҡалдыра. Батшаның вәкилдәре бар батшалыҡтан ошондай етди аҡыл эйәһен эҙләргә сығып китә. Бына улар Хужа Насретдин йәшәгән ауылға ла килеп етә. Насретдин улар килгәнсе үк батшаның иң аҡыллы вәзире үлеп ҡалыуы тураһында ишеткән була. Батша яңы аҡыл эйәһен ниндәй сифаттарына ҡарап һайлаясағы тураһында ла алдан һиҙемләй, сөнки иң етди кеше - ул иң аҡыллы кеше, тигән риүәйәтте яҡшы белгән була. Хужа Насретдин тиҙ генә хәйлә ҡора: батша вәкилдәренә балыҡ йылымы йөкмәп, йылғанан ҡайтып килешләй тап була. Вәкилдәр Хужаның был төбәктәге иң бай кешеләрҙең береһе булғанын белә һәм шуға унан аптырап һорайҙар: "Был илдә балыҡ тотоу менән иң ярлы кешеләр генә шөғөлләнә. Ә һин бит байһың, ниңә йылым йөкмәп йөрөйһөң?" "Мин тап ошо йылым һәм балыҡ тотоу шөғөлө ярҙамында байыным да инде, - ти Хужа, - элекке шөғөлөмә рәхмәтле булыуымды белгертеү өсөн мин был йылымды гел үҙем менән йөрөтәм..." "Бына был иң етди, тимәк иң аҡыллы кеше! - тип һығымта яһай батша вәкилдәре. - Ярлы кеше байыһа, үҙенең ҡасандыр ярлы булғанын белгертмәҫ өсөн үткәндәрен, хатта туғандарын онота, үткәндәге ярлы хәлен хәтерләткән бар нәмәнән ваз кисә. Ә Хужа Насретдин бер нәмәне лә онотмаған..." тип һығымта яһай вәкилдәр һәм Хужа тураһында батшаға хәбәр итә. Шулай итеп, Хужа Насретдин батшаның яңы аҡыл эйәһе-вәзире итеп тәғәйенләнә. Үҙен вәзир итеп тәғәйенләгән көндә Хужа йылымын үҙе менән алмай, алыҫҡараҡ йәшереп ҡуя. Уны батшаға тәҡдим иткән вәкилдәр аптырап ҡала һәм унан: "Насретдин, ә һин йылымыңды гел үҙең менән йөрөтәм, тигәйнең, әле уны ҡайҙа ҡуйҙың?"- тип һорай. "Балыҡты тотҡас, йылымды ташлайҙар..." тип яуап бирә Насретдин..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
7 апрель 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3267
Заказ - 451